ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 сентябрь (нарысай) 2018

№36 (818)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле 1 сентябрҙән яңы хаҡтар менән старт алды. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Шәхси мәктәптәрҙең...**
өҫтөнлөгө ниҙә?

5

**Ғәлимйән Тағандың...**
эмиграциялағы тормошо тураһында

6-7

**Асылына ҡайтыу өсөн...**
үҙебеҙҙең мөхит кәрәк!

8

**Һөнәрмәнлек...**
йәшәү рәүешебеҙ ул

12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һаулығыңды иң ҙур байлыҡ тип иҫәпләйһеңме? Уны һаҡлау өсөн ниҙәр эшләйһең?

***Рәшиҙә ТУЙСИНА, бейеүсе, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Һаулыҡ - иң ҙур байлыҡ ул. Иҫәнлек булһа, кеше башҡа төрлө байлыҡтарһыҙ ҙа йәшәй ала, сөнки һаулыҡты бер ниндәй алтын-көмөштәргә лә алыштырып булмай. Иҫән-һау, ағзалары теүәл кешегә хатта ҡиәфәтенең, йәғни бит-йөҙөнөң ниндәй булыуы ла әллә ни мөһим булып тойолмаҫҡа тейештер ул, иң мөһиме бит шулай ҙа - сәләмәтлек! Ҡайһы берәүҙәрҙән, йәмһеҙмен, ямаҡаймын, тигән зарланыуҙар ишетергә тура килә. Ундайҙар, Хоҙай ҡушмаһын, тышҡы матурлыҡ түгел, ә һаулыҡ кәрәк икәнен сирләп киткәс кенә аңлауы ихтимал. Ә инде һау, сәләмәт кеше былай ҙа матур. Тимәк, уйҙары ла матур, сөнки сәләмәт кеше ғәҙәттә сәләмәт тормош алып бара, насар, алама ҡылыҡтарҙан азат; ул һәр саҡ яҡшы кәйефтә, һәр саҡ әүҙем хәрәкәттә, өҫтәүенә, дөрөҫ туҡлана, ваҡытында ял итә - ҡыҫҡаһы, бөтә нәмәлә сама белә торған кеше була ул сәләмәт әҙәм балаһы. Сама белеп ашау айырыуса кәрәк һәр кемгә лә. Дөрөҫ, һөнәрем талабы буйынса күп нәмәне үҙем өсөн сикләп йәшәргә тура килһә лә, яҡшы ғәҙәт өлкәнәйә килә рәхмәтле яҡтарын ғына күрһәтә, сөнки тормош рәүеше ғәҙәтеңә генә түгел, характерыңа ла йоғонто яһай ала. Ә шулай ҙа мин ҡайһы саҡ ана шул ҡағиҙәне боҙоп алыуҙан да бер хилафлыҡ та күрмәйем һәм ҡурҡмайым. Гел түгел, әлбиттә, тик бына яратҡан ризығындан оҙағыраҡ айырылып торһаң, күңел барыбер уны көҫәй, асҡаҡһырай. Шул саҡ тотам да үҙебеҙсә, баймаҡса, тәмле итеп бишбармаҡ бешереп ашап алам, ҡоротлап һурпа эсәм - башҡорт шунһыҙ ҡайҙан көс-илһам алһын, ти, юғиһә! Әле бына баҡсамдан ҡайтып ҡына тора инем, унда ла күберәк ял итергә, тәбиғәт ҡосағында булыр өсөн барам хәҙер. Бил яҙмай эшләп, һәр береће яртышар килолай сөгөлдөр-кишер үҫтерә торғайныҡ элек, хәҙер үҙемә ял бирәм, сөнки, бая әйткәнсә, сама белергә лә кәрәк. Шулай ҙа, хәҙер ялдамын, тип иҙерәп китергә лә ярамай. Өйөмдә көҙгө күп (бейеүсе интерьеры өсөн был бик кәрәк йыһаз), көүҙә, йөҙ торошона күҙ һалып, ҡарап тормаһаң, йәш бит үҙенекен итергә генә тора. Ни тиһәң дә, әленән-әле төрлө сараларға саҡырып алалар, халыҡ алдына сығырға тура килә, шуға үҙемде формала тотоу бик мөһим минең өсөн. Әллә ниндәй ҡатмарлы күнекмәләр ҙә яһамайым, ә бына халыҡ йолаларын, мосолман өсөн фарыз ғәмәлдәрҙе теүәл тоторға, үтәргә тырышам: намаҙға баҫтым, шөкөр, ураҙамды ҡалдырғаным юҡ. Бер ҙә генә "мода"ға эйәреп түгел, сәләмәтлек һәм күңел торошо өсөн. Рәхмәтлемен Хоҙайға. Шөкөр, төрлө хәлдәрҙән дә әмәлдәрен биреп тора Хоҙай Тәғәлә. Был донъяла йәшәүебеҙ өсөн дә Уға рәхмәтле булыу кәрәк!

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# РУХИ ҠИММӘТЕБЕҘ УЛ

**Бөгөн кеше бөтөн оператив мәғлүмәтте тиерлек интернет һәм телевидениенан ала. Үкенескә, һуңғы осор ваҡытлы матбуғат баҫмаларына мөрәжәғәт итеүселәр кәмене, ләкин был бер ҙә генә гәзит-журналдарҙың тормошобоҙҙағы әһәмиәтен кәметә алманы. Гәзиттәр: үҙәк баҫмамы ул, урындағы матбуғат булһынмы - нисек сығып килгән, шулай сығыуын дауам итә: ил, төбәк етәкселеге сәйәсәтен халыҡҡа еткереү бурысын үтәй, яңылыҡтар менән таныштыра, тормошобоҙҙағы теге йә был күренештәрҙе анализлай, аңлатма бирә, үҙ мөнәсәбәтен белдерә, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын барлай...**



Тик бына шунһы үкенесле: гәзит-журнал тираждары йылдың-йыл кәмей генә бара. Әлбиттә, кем гәзит уҡып өйрәнгән, уны, үҙҙәре әйтеүҙәренсә, "ысын дуҫы, серҙәше һәм кәңәшсеһе" ролендә күреп күнеккән, матбуғат баҫмаһын алдырып уҡыуҙан туҡтамаясаҡ та, сөнки ул белә: гәзит материалдары биргәнде башҡа бер ҡайҙан да, хатта әлеге бөтөн донъя ҡапланып ятҡан интернеттан да таба алмаясаҡ. Был тәңгәлдә мин үҙебеҙҙең башҡорт матбуғаты хазиналарын күҙҙә тотам.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнәлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# СИТТӘ ЙӘШӘҺӘК ТӘ...

***Ғәли ХӘСӘНОВ, "Татарстан Республикаһы башҡорттары Ҡоролтайы - башҡорт милли-мәҙәни автономияһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе:*** Милләттәштәр донъяның ҡайһы өлөшөндә йәшәһә лә, үҙенең тамырҙарын хәтеренән сығармаһын, туған телен белһен, мәҙәниәтен ихтирам итһен ине. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Мәсәлән, ун бала йыйылһа, башҡорт теле уҡытыусыһы булһа, айырым башҡорт класы астырыр өсөн бер ниндәй ҙә проблемам юҡ. Әммә: "Мә, минең баламды башҡортса өйрәт", - тип, бер кем дә инициатива күрһәтмәй. Шуға ла тәү сиратта ата-әсәләрҙең үҙҙәрен тәрбиәләү, мәҙәниәткә, тарихҡа ылыҡтырыу мөһим. Был йәһәттән эштәр яйға һалына бара, төрлө мәҙәни саралар, башҡорт халҡының байрамдарын үткәреп торабыҙ, унда халыҡты йылдан-йыл күберәк саҡырырға тырышабыҙ. Әйткәндәй, күптәрҙең шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһына башлауы ҡыуаныслы, үҙҙәрен икенсе милләт кешеһе тип иҫәпләп йөрөүселәр башҡорт икәнлектәрен таный башланы. Башҡорт рухын юғалтҡандан килеп сыға бына бындай хаталы фекер. Кеше ҡайҙа йәшәһә лә үҙенең асылын юғалтмаҫҡа тейеш, шул саҡта ғына ул йәмғиәттең ихтирамын яулай ала. Миңә Татарстанда йыш ҡына: "Һиңә ҡарап, бөтә башҡорттар ҙа шулай шәп икән тип күҙ алдына килтерәбеҙ", - тиҙәр. Тарихыбыҙға тап төшөрмәй, милләтебеҙҙең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, туған телебеҙҙе һис онотмай, рухлы булып йәшәйек. Рухын юғалтмаған халыҡтың проблемалары булмай, сөнки уның проблемаларҙы хәл итерлек көсө була.

***Рәсил МӨХӘМӘТЙӘНОВ, Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:*** Беҙҙең өсөн иң мөһиме, иң борсолдорғаны - туған тел. Төньяҡ башҡорттарының һөйләше башҡорт әҙәби теленән айырылып торғас, күп кенә милләттәштәр: "Татарса һөйләшәбеҙ, тимәк, милләтебеҙ менән дә татар", - тип хаталы фекерҙә йөрөй. Яңылышып йөрөмәйек, беҙ башҡортбоҙ, ниндәй телдә һөйләшеүең милләтеңде билдәләмәй әле, тип әйтәм уларға. Беҙ русса һөйләшһәк тә, йәһүдсә һөйләшһәк тә, йөрәгебеҙҙә башҡорт рухы бар икән - башҡортбоҙ. Иң мөһиме, рухыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалыу, ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, кемдәр араһында йәшәһәк тә, үҙебеҙҙең рухи ҡиммәттәребеҙҙе онотмау. Әлбиттә, башҡорт телен белмәгән кеше өсөн башҡортлоҡ тураһында һөйләп аңлатыуы, уның күңеленә моң һалыуы, үҙаңын уятыуы ауырыраҡ. Сөнки ул мәғлүмәтте башҡа тел аша ҡабул итә һәм әйтелгәндең мәғәнәһе тәржемә ваҡытында үҙгәреүе лә бар. Беҙ урыҫ араһында йәшәгәс, балаларыбыҙ ҙа русса уҡый, яҙа, һөйләшә. Әммә уларҙы шунын өсөн, рухыҙ юҡ, тип ситкә тибәреп ҡуйырға хаҡыбыҙ юҡ. Олораҡ быуын йәштәр тәрбиәһенә иғтибарлы булып, милләтен танырға, туған телен белергә, тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнергә ынтылыш тәрбиәләп үҫтерергә тырышһын ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һаулығыңды иң ҙур байлыҡ тип иҫәпләйһеңме? Уны һаҡлау өсөн нимәр эшләйһең?

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәжит ИШКИЛДИН, хеҙмәт ветераны, Ҡырмыҫҡалы районы Подлубово ауылы:*** Йәш саҡта, ғәҙәттә, кеше сәләмәтлегенең ҡәҙерен белмәй. Уның ҡәҙере олоғая төшөп, һаулыҡ бер төрлө ҡаҡшағас ҡына беленә башлай, үкенескә. Шунда ғына өләсәй-өсәйҙәрҙең бер туҡтауһыҙ "Һаулығың - байлығың", тип ҡабатларға яратҡан ҡанатлы һүҙҙәренең асылына төшөнәһен. Әсеү, тартыу кеүек алама ғәҙәттәрҙән арынып, сәләмәт тормош рәүешенә күсеү туранан-тура кешенең үҙенә бәйле булһа, бөгөн беҙҙең ихтыярҙан ғына тормаған объектив сәбәптәр ҙә күп. Улар ҙа нығ йоғонто яһай кешенең һаулыҡ торошона. "Нимә ашайһың - һин шулһың", "Ауыҙ аша - йөҙ ауырыу" тип аталған мәҡәләләр үҙебеҙҙең "Киске Өфө" биттәрендә лә йыш баҫыла. Һаулығыбыҙ, тимәк, беҙҙең туҡланыуыбыҙға ла бәйле. Мине төп ризығыбыҙ икмәктең сифаты торған һайын нығыраҡ борсоуға һала. Икмәкте үҙем өйҙә бешерәм, тип уйлаусылар ҙа яңылыша, сөнки бөгөн ондоң сифаты ниндәй булыуы бер кемгә лә сер түгел. Бойҙай орлоғон ағыулап сәсәләр, шытып сыҡҡан үҫентене ашлайҙар, уны төрлө ауырыуҙан, ҡоротҡостарҙан һаҡлайбыҙ тип тағы бер ҡат химик эшкәртеүгә дусар итәләр; элеваторҙан тирмәнгә алып килгәс, он боҙолмаһын, ҡортламаһын өсөн уға тағы ла ниндәйҙер консервант-өҫтәмәләр ҡушыла. Унан икмәк бешереүселәргә сират етә. Улар ҙа икмәгебеҙ "тәмле" булһын өсөн ниҙер ҡушалар, моғайын... Шулай ҙа мин, үҙем, мәҫәлән, мөмкин тиклем экологик таҙа ризыҡ менән туҡланырға тырышам. Итте үҙем белгән ауыл кешеһенән һатып алам. Сусҡа итен ашамайым, магазиндан колбаса-фәлән, әҙер билмән кеүек ярымфабрикаттар ҙа алмайым. Мал-тыуар аҫрамаһам да, баҡса үҫтерәм: исмаһам, картуф, башҡа йәшелсә, емешеләк үҙемдеке булһын, тим. Икенсенән, ерҙә эшләү даими хәрәкәт, әйләү-бөгөләү талап итә. Был да һаулыҡты нығытыуға бер сәбәп. Өсөнсө таяныс - дарыу үләндәре. Аптекаларҙа һатылған химик препараттар менән электән дә дуҫлыҡ юҡ. Шөкөр, сирле кеше булмаһаң да, ҡыш һалҡын тейгәндә сәй итеп эсергә ҡарағат, ҡурай еләге, сейә япраҡтары, әрем, дегәнәк, кесерткән, аҡ сәскә кеүек үләндәрҙе, ҡурай еләге, һырғанаҡ, ҡарағат емештәрен киптереп йә туңдырып ҡуйыу мотлаҡ. Үләндәр менән дауалау хаҡында Рим Әхмәдовтың бөтөн китаптары ла бар миндә, уларҙы ҡат-ҡат уҡырға яратам. Бынан тыш, шифалы халыҡ дауаларынан ҡорт балына ла өҫтөнлөк бирәм. "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға иҫәнлек-һаулыҡ теләйем.

***Сәлимә СӘҒИТОВА, медицина хеҙмәткәре:*** Был рубрикала юғарыла әйтелгән фекерҙәр менән нигеҙҙә килешәм, бөтәһе лә дөрөҫ. Шуныһы ҡыуаныслы: бөгөн кешеләр үҙ сәләмәтлегенә битараф түгел, һаулығына ҡағылышлы мәсьәләләрҙә хәбәрҙар. Иң тәүҙә кеше үҙ-үҙен фәҡәт ыңғайға көйләргә, матур уйлы, яҡшы ниәтле һәм ихтыр сырайлы булырға бурыслы. Шуға ла аңында бәхетле булыу тойғоһо йөрөтөү, һәр хәлдә, шуға ынтылыу сәләмәт, оҙон ғүмерле булыуҙың 10 сараһы иҫәбендә тора. Күңелһеҙерәк хәлдәргә күберәк юмор менән ҡарау, рәхәтләнеп бер көлөп алыу, шат күңелле кешеләр менән аралашырға тырышыу һөҙөмтә бирмәй ҡалмаясаҡ. Шул осраҡта йөрәгебеҙ ҙә үҙен яҡшы тоясаҡ. Әйткәндәй, йылына 1 тапҡыр эхо- һәм электрокардиограмма үтеп тороу хәйерле. Артыҡ нығ борсолоуҙар, хәүефләнеү һәм ҡайғырыуҙың туптура йөрәккә бәреүе үҙегеҙгә яҡшы билдәле, шуға кире хис-тойғоларығыҙҙы "йүгәнләргә" өйрәнегеҙ. Шул уҡ ваҡытта көҙҙәнең ауырлыҡ күләмен дә контролдә тотоу фарыҙ, югиһә, ҡайһы берәүҙәр артыҡ ауырлыҡ туплауҙы йәш үҙенсәлегенә һылтарға ярата. Был дөрөҫ көйләнеш түгел! Сама белеп йәшәүҙә бөтөн хикмәт.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# РУХИ ҠИММӘТЕБЕҘ УЛ

**(Башы 1-се биттә).**

Әйткәндәй, милли гәзит материалдарының күпселеге интернет биттәренә һалынмай, шуға күрә, исмаһам, бер дана булһа ла башҡортса гәзитте алдырып уҡыуҙан бер кемдең дә кесәһе таҡырланып китмәҫ. Уның ҡарауы, үҙебеҙҙән башҡорт донъяһы хәл-әхүәле менән, уның бөгөнгөһө, шулай уҡ тарихыбыҙ төпкөлөнән табылған яңынан-яңы мәғлүмәттәр менән байытырһығыҙ белем һәм дә рух кимәлегеҙҙе.

Был һүҙҙәрҙе яҙғанда, мин ана шулай күңел офоҡтарыбыҙҙы киңәйтеп, халҡыбыҙ, тарихыбыҙға ҡарата ғорурланыу тойғоһо уята белеүсе аныҡ баҫманы - "Киске Өфө" гәзитебеҙҙе күҙҙә тотамын. Республикабыҙ үҙаллылыҡ яулап алғандан һуңғы йылдарҙа башҡорт донъяһын балҡытып, уға икенсе һулыш биреүсе милләтебеҙ йылъяҙмаһына әйләнде "Киске Өфө". Рухиәтебеҙ һәм тарихыбыҙ ҡәҙерен белгәндәр был гәзиттең һәр һанын ҡәҙерләп йыйнап, төпләмә эшләп бара башланы хатта. Һәм улар бик дөрөҫ эшләне, тип уйлайым: ун алты йыл буйы бөгөн, үкенескә, арабыҙҙан киткән зыялы, белемле, данлыҡлы шәхестәребеҙ менән ниндәй генә әңгәмә, "Диалог"тар ҡоролманы ла, ниндәй генә алтын фекерҙәр әйтелмәне был гәзит биттәрендә! Редакцияның үҙендә һаҡланған йыллыҡ төпләмәләрҙе китап итеп баҫтырғанда ла бик шәп булыр ине лә, тик... Бөгөн бит бөтөн изге ниәттәргә лә заманыбыҙҙың төп яуабы бер, үҙегеҙ беләһегеҙ: аҡса юҡ! Ә шулай ҙа, кем әйтмешләй, ҡайғырмайыҡ, дуҫтар, иң мөһиме - рухи ҡиммәттәребеҙ һәр саҡ янда булһын. Шул уҡ "Киске Өфө" гәзитебеҙ, мәҫәлән. Йылдың, айҙың, эш көнөнөң теләгән мәлендә лә яҙыларға һуң түгел уға. Сәләмәт, имен тормош, милләт һәм ғаилә ҡиммәттәрен данлаусы, шул өлгөгә ылығырға әйҙәүсе, туған телебеҙ һағында тороусы, уны рәсми йәшәтеүгә булышлыҡ итеүсе "Киске Өфө" киләсәктә лә илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр гәзите булып ҡалһын, донъяға ҡарашыбыҙҙы киңәйтеп, зауыҡтарыбыҙҙы балҡытып, туған телебеҙ ҡулланылышын бойомға ашырып йәшәһен ине. Ә был фәҡәт беҙҙең ҡулда - уның меңәрләгән уҡыусылары хөкөмөндә икәнлекте генә онотоп ебәрмәйек.

**Шамил ХАРИСОВ,**
**Авария-ҡотҡарыу хеҙмәтенең янғын һүндереү бүлеге хеҙмәткәре.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ирандың Мәҙәниәт һәм ислам бәйләнештәре буйынса ойошмаһы етәксеһе Абузар Эбрахим Торкаман менән осрашты. Башҡортостан Республикаһының һәм Иран Ислам Республикаһының мәҙәниәт, мәғариф, фән өлкәһендә эшмәкәрлек мәсьәләләре өйрәнелде. Былтыр республика беренсе Рәсәй-Иран социаль-мәҙәни форумын ҡабул итте, быйыл Башҡортостанға һәм Мәскәүгә Рәсәйҙә Иран мәҙәниәте аҙналығын ҡабул итеү хөрмәте тейҙе, тип билдәләне Рөстәм Хәмитов.

✓ Өфөләге һайлау участкаларының 94 проценты, республиканың ҡала округтарының 74 проценты һайлау бюллетендәрын эшкәртеү комплекстары (КОИБ) менән йыһазландырылған. Заманса техник саралар ярҙамында һайлауҙың асыҡлығын арттырыу башланғысын республика башлығы Рөстәм Хәмитов тәҡдим итте. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы төбәк етәксеһенең идеяһын хупланы.

✓ Өфөлә байдаркала һәм каноэла ишеү буйынса яңы спорт базаһы төҙөлә. Был турала Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Премьер-министр Рөстәм Мәрҙәнов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, яңы спорт базаһы иҫке Ағиҙел күпере янында төҙөлә. Ул юғары кимәлдәге спортсылар әҙерләүгә һәм балаларүҫмерҙәр спорт мәктәбе эшенә тулыһынса тап килергә тейеш.

✓ 15 сентябрҙә беренсе курс студенттары Өфөнөң һәм Башҡортостандың башҡа студенттары менән бер рәттән Бөтә Рәсәй Студенттар парадында ҡатнаша. Өфөлә колонна Совет майҙанынан "Ватан" паркына тиклем Совет һәм Зәки Вәлиди урамдары буйлап үтәсәк, һуңынан Рәсәй студенты антын бирәсәк, юғары уҡыу йорттары ректорҙарының һәм мәҙәниәт һәм спорт эшмәкәрҙәренең кәңәштәрен тыңлаясаҡ.

✓ Башҡортостанда йәшәүселәргә шәхси төҙөлөш йәки утын әҙерләү өсөн ағас алыу еңелләшә. "Һаҡсыл хөкүмәт" проектын ғәмәлгә ашырыу барышында килешеү төҙөү ваҡыты ике тапҡырға кәметелгән - дүрт айҙан ике айға тиклем. Был хаҡта Башҡортостан Урман хужалығы министрлығынан хәбәр иттеләр. Мөлкәттәре янғындан йәки тәбиғәт ғәрәсәтенән зыян күргән граждандар сираттан тыш ағас алыу хоҡуғына эйә, тип иҫкә төшөрҙөләр ведомствола.

✔ *Ләйсән "Урал батыр" эпосынан өҙөк башҡарғанда уның йөҙөнә иғтибар иттегеҙме? Тәбиғәт балаларҙа ял итә, ейәндәрҙә йәшәй, тиҙәр. Мин халҡыбыҙҙың хәл-торошонан сығып, ҡыҙҙың йөҙөндәге билдәне "асырғаныу" тип атаным.*



ӘЙҘӘГЕҘ...

# ХАТТАР ЯҘЫШАЙЫҠ ӘЛЕ!



**Замана көләмәсе: бер апайға хат килгән. Хатты тәүге тапҡыр күргән һәм уның нимә икәнен белмәгән ейәне: "Өләсәй, һиңә смс килгән", - тип әйтә, ти.**

Беҙҙең редакцияға ла аҙнаһына бер нисә хат килә. Хат яҙыусы авторҙарҙың исемдәрен дә белеп торабыҙ. Ҡайһы ваҡыт минә лә төбәлгән хаттар ҙа була. "Һиңә хат бар!" тип һөйөнсөләп тапшыра ҡыҙҙар. Әйтерһең, ул хат яҡын кешеңдән килгән. Шулай ҙа бик ҡыуанам. Сөнки бөгөн хат алыу бик-бик һирәк була торған күренеш бит. Интернет бәйләнеше был сәнғәт төрөн (шулай атағанда ла хата булмаҫ) кешелек йәмғиәтенән ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Юҡ итте, тиергә лә була. Хәҙер халыҡ интернет, телефон аша аралаша. Хат яҙып ултырыусылар юҡ иҫәбендә. Хатта ҡайһы берәүҙәр хат яҙыуҙың нимә икәнен дә белмәйҙәр әле. Мәҫәлән, хат алышыу йылдарын күрмәгән-белмәгән бала кеше ҡайҙан белһен ул хат яҙышыуҙы?

Интернет аша беҙ нисек яҙышабыҙ? Ҡыҫҡа ғына һүҙбәйләнештәр менән йәки бер-ике һөйләм менән, шулай бит? Бик булмаһа, смайликтар ҙа "һөйләшеү" ролен үтәй ала. Телефондан һөйләшкәндә, хатта оҙайлы итеп аралашҡанда ла һөйләү телмәренән күтәрелә алмайбыҙ. Ә бит яҙғанда беҙ бөтөнләй икенсе хистәр, кисерештәр, поэтик образдар кимәленә күтәреләбеҙ. Ҡарап торғанда ике ауыҙ һүҙҙе лә ялғап һөйләшә алмағандайҙар ҙа, хат яҙғанда, үҙендәге йәшерен донъяһын аса. Сөнки ҡәләм тотоп, ҡағыҙ алып ултырып яҙыу - ул эске аңды уятып ебәрә торған бер хәл-торош.

Хат яҙышыу борон-борондан йәшәп килгән бер мәҙәниәт төрө ул. Элек хат яҙа белгән кеше үтә лә хөрмәтле, ҡәҙерле булған. Ҡайһы бер илдәрҙә хатта шуның менән генә ғаиләләрен аҫырап көн иткәндәр. Беҙҙең халыҡта ла хатта дини мәктәптәрҙә лә хат яҙырға өйрәткәндәр. Был өлгөләрҙе "Кәмһетелгәндәр", "Ырғыҙ" кеүек классик башҡорт әҙәбиәтендә лә күрәбеҙ. "Хат башы - яҙ ҡаршы. Һеҙгә күптин-күп, суктинсуҡ сәләмдәр күндерен ҡәләм тирбәтеүсе..." тип башланып киткән хаттар үҙҙәре бер әҫәр кеүек. Сәләмдәр һәр туғанына, һәр белгән кешеһенә исемен атап күндерелә. Унан яҡшы теләктәр, хат алыусыһын маҡтау теҙелә. Унан үҙенең хәлдәрен тәфсирләп, бар кисерештәре, уй-хыялдары, хәл-ваҡиғалары менән теҙеп яҙа. Аҙаҡтан мотлаҡ ниндәйҙер шиғыр, бәйет, йыр йәки һис юғы таҡмаҡтар өҫтәп ҡуя. Бында ошо аҫта ҡуйылған шиғри әҫәр хәл итә лә инде барыһын да. Ул ниндәй йөкмәткелә, тимәк, хат ебәреүсенең кәйеф-торошо ла шул самала.

Мин дә хат алышыу заманына эләктем. Яҙған хаттарым әллә нисә китаплыҡ булыр ине. Алғандары ла шул сама. Хат яҙыу мәҙәниәте менән әле яҙа белмәгәндә үк таныш булдыҡ. Ололар ултырып хат яҙа башлаһа, һүрәт төшөрөп, бик булмаһа, ҡулдың күсермәһен эшләп, уға йөҙөк-балдаҡтар "тағып" әҙерләп бирә инек. Хәреф сыймаҡлай белеү менән үҙебеҙ ҙә хат яҙырға тотондоҡ. Конверт тышын тултыртып алаһың да, ситтәге туған-тыумасаңа "яҙаһың" ғына. Әйткәндәй, хат яҙыу тәртибен беҙгә, беренсе абзацта - сәләм, икенсеһендә - хәл белешеү, өсөнсөһөндә - хәлеңде һөйләү, тигән формала мәктәптә лә өйрәттеләр. Һәр хәлдә, хатҡа юҡ-бар яҙмаҫҡа икәнде белә инек инде. Әле башланғыс синыфта ғына уҡығанда ағайҙарыма яҙған хаттарым әсәйемдә һаҡланғайны (теләгәр алып килеп тапшырған булған). Уларҙың тексы "ныйыр быҙауланы, дүрт алдым, концерт ҡуйҙыҡ" хәленән ары китмәнә лә, үҙенә күрә әүрәтерлек яҙмалар ине. Унан, үҫәбара, тиҫтерҙәрең менән хат алыша башлайһың. Күрше ауылда йәшәһенме ул, күрше районда йәки сит өлкәләме, һин уға бер тиң итеп яҙаһың. Был минең күрше ауылдыҡы ғына, тип яҙа-йөҙә сыймаҡламайһың. Ә бөтөн мәҙәнилегендә эшкә ҡушып, һөйләмдәрҙе бөтөн, тулы итеп, һауа торошонан алып күңел кисерештәренә тиклем теҙеп һалаһың.

Ошо тәңгәлдә шуны асыҡлап китәйек. Яҙышҡан ваҡытта кеше ысынлап та түгелеүсән була, йәғни тел менән һөйләп булмай торғанды ла ҡағыҙға яҙыуы ихтимал, тимәксемен. Бушҡа ғына бөгөнгө психологтар балаларҙы һүрәт яһатып, инша яҙҙыртып, уйҙарын ҡағыҙға төшөртөп, уларҙың психологик торошон билдәләмәй бит. Ололар ҙа шуның кеүек. Хатта, киреһенсә, был төшөнсәне бигерәк тә ололар менән башҡарырға кәрәктер әле. Ни өсөн әлеге мәлдә халыҡ ҡырылып интернетта ултыра тиһегеҙ? Төрлө төркөмдәрҙә яҙышып, бәләкәй генә комментарийҙарҙа хистойғоларын асып ҡалырға ынтыла улар. Сөнки уларҙың аңына яҙышып аралашыу белеме йәки коды һалынған. Улар яҙышып аралашыуға мохтаж. Ә шул теләктәрен, эске асылыштарын сығарыр урындары юҡ. Һөйләшеү ҙә, уҡыу ҙа һинең үҙеңдең яҙыуыңды алыштыра алмай. Мин быны үҙемдә лә күп тапҡырҙар һынағаным бар. Әҫәр яҙғанда, шунда бөтөн эмоцияларымды сығарып һалғанда, мин интернетты бөтөнләй онотам, ундағы бер нәмә лә ҡыҙыҡ булмай китә. Ә инде яҙышмай торғанда шул бәйләнеш селтәрҙәре ҡоло булып кителә. Шунлыҡтан, кешегә йәки көндәлек тотоп, шунда бар кисерештәрен ентекләп яҙып барырға, йәки хат алышырға кәрәк. Ә интернеттағы ҡыҫҡа, тәртипкә һалынмаған, өҙөк-йыртыҡ яҙмаларҙан беҙҙең аңыбыҙ мәҙәнилеккә лә өйрәнмәй, үҫешмәй ҙә, беҙ тасуирлап яҙыу һәләтен дә юғалта барабыҙ.

Һөйләү телмәренән тыш, яҙыу телмәре тигән нәмә лә бар бит әле. Мәктәптәрҙә балаларға яҙыу телмәре өйрәтелеп килә-килә лә, мәктәптән сығыуға ул өлкә бөтөнләй ташлана булып сығамы инде? Ә бит йәш кешелә был теләк, мохтажлыҡ бар. Уның менән нимә эшләргә, нисек ҡәнәғәтләндерергә күнелде? Шул интернет эсенә инеп сума һәм сифатһыҙ яҙмаларға керешә инде, ҡалайтһын.

Һәр кемдең холҡо төрлө бит. Мәҫәлән, туғандарым араһында ла бер ваҡытта ла хистәрен асып, һөйләшеп бармағандар бар. Хатта бер ваҡытта ла минең менән ултырып һөйләшмәгәндәре лә етерлек. Әммә мин улар менән ҡасандыр хат алышҡас һәм шул хаттар аша уларҙың эске донъяларын белгәс, әле аралашып бармағанда ла, уларҙың асылда ниндәй һәм кем икәнлектәрен беләм. Бына шундай аралашыу, берберебеҙҙе аңлау, тойоу, ҡабул итеү мөмкинлектәрен биргән икән беҙгә хатлашыу.

Ә мөхәббәт хаттары улар үҙҙәре бер айырым тема. Тарихтан билдәле булыуынса, данлыҡлы Хөррәм-солтан Сөләймәнде хаттары менән арбап ғашиҡ итә. Падишаһ гаремындағы ҡыҙ ике йыл арауығында уға үҙ тормошо, кисерештәре, хыялдары, уйҙары һәм хистәре хаҡында яҙа. Солтан булаҙы уҡый-уҡый хат ебәреүсегә ғашиҡ була. Ҡыҙҙың артыҡ сибәрлеге лә булмай, тиелә яҙмаларҙа, әммә хат яҙа белеүе уны Сөләймән алдында башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙан өҫтөн ҡуя. Быныһы шундай бер лирик сигенеү генә булды. Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә: әйҙәгеҙ, хат яҙышайыҡ. Тергеҙәйек мәҙәни хәбәрләшеү, аралашыуҙың матур бер төрөн.

**Һеҙҙән хат көтөп,**
**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




## КҮҘӘТЕҮҘӘР

***60-сы күҙәтеүем.*** Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы Станислав Говорухин Ләйсән Золотарева хаҡында: "Шул тиклем ярһыулыҡ. Ҡыҙҙа шул тиклем энергия бар - ядро зарядына етер ине..." - тине. Уйнап, әммә уйлап әйтте халыҡ артисы. Ләйсән "Урал батыр" эпосынан өҙөк башҡарғанда уның йөҙөнә иғтибар иттегеҙме? Тәбиғәт балаларҙа ял итә, ейәндәрҙә йәшәй, тиҙәр. Мин халҡыбыҙҙың хәҙерге хәл-торошонан сығып, ҡыҙҙың йөҙөндәге билдәне "асырғаныу" тип атаным. Ҡыҙ, үҙе лә һиҙмәйенсә, шуны эшләне.

***61-се күҙәтеүем.*** "Йөрәк һүҙе"нән һуң һаман да күнелде тынысландырып, уйҙарҙы бер көтөүгә йыйып булмай. Ҡупҡалйны йөрәк. Йөрәктән сыҡҡан ғына йөрәккә етә, тигәндәре шулдыр. Кисәлә булыусылар ғүмерҙәренә етерлек рух, дәрт алғандыр, менәрләгән йәндәр ғәм уты менән тоҡанғандыр ул кисәлә. Ул төндә кисәлә булыусыларҙың йоҡламайса таң аттырыуҙары бының дәлиле!

Барлыҡ ҡатнашыусыларға ла "Мәрҙәс!" билгеһе ҡуям. Зөлфиәнең ҡыҙы Гүзәл менән уныышының серен мин үҙенең йөрәген ярып сыҡҡан һүҙҙәрҙе үҙе һәм ҡыҙы башҡарыуында күрәм. Ошо уҡ шиғырҙарҙы башҡа берәү һөйләгән булһа, ундай уҡ тәьҫирле булмаҫ ине, тип тә уйлайым. Сөнки юл аҫтындағы серҙәрҙе автор үҙе генә белә. Беҙҙең шағирҙарҙың күбеһе үҙҙәре яҙғанды тынлаусыға еткерә белмәй. Әсәле-ҡыҙлы был ҡатнашыусылар шағирәнең йөрәгенән сыҡҡан тере тойғоларын, уй-кисерештәрен, йән ныуҙарын, хафа-борсолоуҙарын теп-тере, ҡап-ҡайнар килеш тамашасыға еткерҙе. Интонациялар бик дөрөҫ һәм урынлы ҡуйылды. Зөлфиә кәрәкле баҫымдарҙы тауышы менән көйләп, тик үҙе генә белгән кисерештәрен тамашасыға еткереү оҫталығын күрһәтте. Халҡыбыҙҙың иң күркәм: ихласлыҡ, әскерһеҙлек сифаттары сағылды уларҙа.

Был проектты уйлап табыусыларға, ойоштороусыларға ла "Мәрҙәс!" Шундайраҡ тәҡдимем дә бар: һүҙ сәнғәтенең иң юғары үҫеш баҫҡысы булып беҙҙең халыҡта борон-борондан сәсәнлек һаналған. Шуға күрә бәйгелә ҡатнашыусыларҙың үҙ иркенә ҡуйып, "Әйтеш" номинацияһын да индереү маҡсатҡа ярашлы булыр ине, тием. Икенсенән, конкурстың йылдан-йыл һүҙ оҫталығы, зиһен үткерлеге йәһәтенән камиллаша, үҫешә барыуы барыбер ҙә "Әйтеш"кә алып киләсәк!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✔Республикала төҙөүсенең үҙ бурыстарын үтәмәүе сәбәпле хоҡуҡтары боҙолған өләшсөләр өсөн ҡыҙыу бәйләнеш асылды. Ул Объекттар төҙөлөшөнә булышлыҡ итеү буйынса төбәк операторы базаһында эшләй. Ҡыҙыу бәйләнеш телефоны: 8 (347) 246-88-08. Бер аҙнала был телефонға 200-ҙән ашыу мөрәжәғәт килгән, тип белдерҙеләр Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетында.

✔Һалым хеҙмәте 30 августан тыләүсенең иҫәбе буйынса страховка иғәнәләре буйынса операцияларын билдәләнгән ваҡыттан һуң 10 көн дауамында иҫәпхисап бирмәгән өсөн туктатып торорға хоҡуҡлы булды. Йәғни, әгәр ойошма, предприятие йәки шәхси эшҡыуар пенсияға, социаль һәм медицина страховкаларына ваҡытында иғәнәләр күсермәһә, уның иҫәптәре ваҡытлыса тундырыласаҡ, тип аңлаттылар Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығында.

✔Башҡортостанда игендең уңышы 2 миллион тоннанан ашҡан, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығынан. "Бөгөнгә төбәктә бер миллион гектарҙан ашыу иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар һуғылған. Был - бөтә майҙандың 60 проценты", - тип белдерҙе аграр ведомствоның матбуғат секретары Алмаз Ғәлимов. Һәр гектарҙан уртаса уңыш 19,4 центнер тәшкил итә.

✔Ҡырғыҙстанға Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарына Башҡортостандан 36 спортсы юлланды. Ярыштар 8 сентябргә ҡәҙәр дауам итә, унда 66 илдән һәм Рәсәйҙең 11 субъектынан 1 556 спортсы ҡатнаша. Уйындар барышында Башҡортостан вәкилдәре тәүге миҙалдар яуланы. Гуштини милли камарбанди көрәшендә (тажик милли билбау көрәше) Артур Зөлҡәрнәев 80 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында алтын миҙал алды, ә Рәзил Шабиев 68 килограмға тиклемге категорияла почет пьедесталының өсөнсө баҫҡысына күтәрелде.

✔Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ ойошмалары ассоциацияһы кесе һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса бушлай шәхси консультациялар циклын дауам итә.10 сентябрҙә сәғәт 3-тә, 17 сентябрҙә сәғәт 3-тә төрлө темалар буйынса консультация алырға мөмкин. Консультациялар ошо адрес буйынса ойошторола: Өфө, Индустриаль шоссеһы, 44/1, 6-сы павильон, 6-22-се бүлмәләр. Алдан яҙылыу өсөн телефондар: (347) 264-62-90, 243-38-37, e-mail: aoprb@mail.ru.

✓ Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүсе милекселәр йыйылыш үткәреп, йылылыкты алдан биреүҙе һорауға һәм йыйылыш протоколын хеҙмәтләндереүсе ойошмаларға тапшырһа, уларға йылылыҡ алдан бирелеүе ихтимал.



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ТАБИПТАР, ӘЙҘӘГЕҘ...

**Башҡортостанда 10 сентябрҙән "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" программаларында ҡатнашыусыларҙан документтар ҡабул ителә башлай, ошо хаҡта республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хәбәр итә.**

Беренселәре - 1-шәр миллион һум, икенселәре 500-шәр мең һум ала. Үрҙә әйтелгән программаларҙа 50 йәшкәсә, ауыл тораҡ пункттарына, эшсе ҡасабаларға, ҡала тибындағы ҡасабаларға, 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларға эшләргә күсеп килгән табиптар һәм фельдшерҙар ҡатнаша ала. "Ауыл табибы" программаһы Башҡортостанда 2012 йылда эшләй башланы. Был ваҡыт эсендә ауылдарға эшләргә тип 1300-ҙән ашыу төрлө һөнәр табиптары: участка терапевтары һәм педиатрҙар, стоматологтар, хирургтар, акушер-гинекологтар, анестезиолог-реаниматологтар, психиатрҙар һәм неврологтар, офтальмологтар күсте. 2016 йылда төбәктә урта звено белгестәре етмәү менән бәйле тағы бер программа эшләй башланы - "Ауыл фельдшеры". Был маҡсатҡа Башҡортостан бюджетынан ул саҡта 36 миллион һум бүленгәйне, ул эшкә 72 медицина хеҙмәткәрен йәлеп итергә мөмкинлек бирҙе. Улар 500 мең һум күләмендә түләү алды. Быйыл программала тағы 48 фельдшер ҡатнашты.

## ЙӨҘӘҺЕҢМЕ?

**Республика райондарының береһендә мәктәптәрҙә физкультура дәресендә йөҙөргә өйрәтеү буйынса пилот проекты тормошҡа ашырыу күҙаллана. Башҡортостан Йөҙөү федерацияһының яуаплы секретары Рәфис Ғабдрахманов "Берҙәм Рәсәй" партияһы ойошторған Йәмәғәт башланғыстары форумында ошондай тәҡдим менән сығыш яһаны.**

"Программаның асылы - баланы спортсы итеп тәрбиәләү түгел, ә уларҙы һыуҙа үҙҙәрен дөрөҫ тоторға өйрәтеү. Улар быны белмәй. Һыуға батҡан балаларҙың төп хатаһы - һыуҙа үҙҙәрен дөрөҫ тотмауы. Статистикаға ярашлы, быйыл ғына Башҡортостанда 70-тән ашыу бала батып үлгән", - тине Рәфис Ғабдрахманов. Программаны республика районларының береһендә башлап ебәреү күҙаллана. Тәжрибә уңышлы булһа, ул тотош республикала таратыла. Физкультура уҡытыусылары ҡотҡарыусылар курсын үтергә тейеш. Мәктәптәрҙә бассейн булмағанлыҡтан, дәрестәр физкультура-һауыҡтырыу комплекстарында ойошторола. "Был башланғыс йәшәүгә хоҡуҡлы. Уны "Балалар спорты" проектына индерергә мөмкин", - тип билдәләне йөҙөү буйынса Паралимпия уйындары чемпионы, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаты Оксана Савченко.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Өфө ҡала хакимиәтендә муниципалитет башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов етәкселегендә уҙған матбуғат конференцияһында һүҙ тап ошо хаҡта барҙы. Сарала ҡаланы ресурс менән тәьмин итеү ойошмалары вәкилдәре, ҡала районы хакимиәттәре башлыҡтарының беренсе урынбаҫарҙары ҡатнашты.**

# БАШ ҠАЛА ҠЫШҠА ӘҘЕР

Йылылыҡ менән тәьмин итеү предприятиелары был юлы 26,75 километр участканы ремонтларға планлаштырһа, 6 сентябргә ҡарата дөйөм күләмдең 69,2 проценты үтәлгән. "БашРТС" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте инвестиция программаһы сиктәрендә 1935 метр йылытыу селтәрен реконструкциялаған. Ул шулай уҡ торбаларҙы алыштырыу менән дә шөғөлләнә. Быйыл был ойошма 1320 метр йылылыҡ селтәрен, бынан тыш күп фатирлы йорттарҙа 1411 метр йылы һыу торбаһын алмаштырған. Йәйгеһен электр энергияһы менән тәьмин итеүсе ойошмаларҙа ла эштәр планға ярашлы алып барыла. Һөҙөмтәлә 6,7 километр туҙған кабель һәм һауа линиялары, трансформатор подстанцияларының һәм энергия бүлеү пункттарының ҡорамалдары, биналарына капиталь ремонт үткәрелә. "Өфөводоканал" МУП-ында туҙған һыу һәм канализация торбалары алмаштырыла, уларға санация үткәрелә. "Газпром газ бүлеү Өфө" асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы ла ҡышты тулы әҙерлек менән ҡаршылай, иҫке ҡорамалдар яңыларына алмаштырыла.

Ҡаланың торлаҡ предприятиелары ла йылытыу миҙгелен тейешле әҙерлектә ҡаршылай. Тиҙҙән, йәғни урамдағы һауа кимәле 5 көн рәттән 8 градус йылылыҡтан түбән торһа, йорттарға йылылыҡ бирелә башлаясаҡ. Әммә, күп фатирлы йорттарҙа йәшәүсе милекселәр йыйылыш үткәреп, йылылыкты алдан биреүҙе һорауға һәм йыйылыш протоколын хеҙмәтләндереүсе ойошмаларға тапшырһа, уларға йылылыҡ алдан бирелеүе ихтимал. Ләкин өс йыл дауамында был хоҡуҡ менән бер генә йорт милекселәре лә файҙаланмаған. Ә инде балалар баҡсалары, дауаханалар һ.б. кеүек социаль объекттар уларҙың етәкселәре яҙған хатҡа ярашлы йылылыҡ ала башлай.

Быйылдан йылылыҡ өсөн түләүҙе 12 айға түгел, ә анығ ҡулланылған айҙар буйынса түләүгә күсеү тураһында һүҙ булғайны. Был, әлбиттә, ресурс менән тәьмин итеү ойошмалары өсөн уңайлы һәм файҙалы, әммә халыҡ өсөн ҡатмарлы булыуы ла мөмкин. Ни тиһәң дә, сығымдарҙы 12 айға бүлеп түләү еңелерәк. Әйтәйек, быйыл ноябрҙә йылылыҡ өсөн түләү 5 мең булды икән ти, уны шунда уҡ түләү күптәргә ҡыйынлыҡ тыуҙырасаҡ, ә 3 йәиһә 2,5 мең һум түләп, ҡалған өлөшөн йәйге айҙарҙа түләү еңелерәк. Был системаға күсеү тураһында ҡарар ҡабул ителһә, ул 1 октябрҙән көсөнә инергә тейеш. Әгәр ҡарар булмаһа, уны гәмәлгә индереү киләһе йылға тиклем тотҡарланасаҡ. Дөйөм алғанда, ҡала хеҙмәттәре йылытыу миҙгеленә әҙер, әммә ҡышын берниндәй ҙә авария йәки көтөлмәгән хәл-торош килеп тыумаҫ, тип әйтеп булмай. Ихтималлыҡты бөрөү ҙә инҡар итмәй, әммә уның эҙемтәләре ҙур булмаһын өсөн бөгөн мөмкин булғандың барыһы ла эшләнгән.

Земфира ХӘБИРОВА.

## УРМАНҒА БАЙБЫҘ...

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышын үткәрҙе. Унда 2030 йылға тиклем Төбәктең урман сәнәғәте комплексын үҫтереү стратегияһы ҡаралды.**

- Урмандарҙың республиканың 40 проценттан ашыу биләмәһен тәшкил итеүе бөтәһенә лә яҡшы билдәле. Әммә шул уҡ ваҡытта урман сәнәғәте комплексы продукцияһының өлөшө сәнәғәт етештереү структураһында бик түбән - 1,6 процент. Ул ағас запасы һәм уны әҙерләү күләмдәре буйынса республика менән оҡшаш башҡа төбәктәр күләменән аҙыраҡ, - тине республика етәксеһе. - Йыйылған бюджет табышы күләмендә урман сәнәғәте комплексының өлөшө ярты процент, йәғни 1 миллиард һумдан саҡ ҡына күберәк тәшкил итте. Тармаҡта иң ҙур һалым кереме ҡағыҙҙан эшләнгән изделиелар етештереү һәм ағас эшкәртеү буйынса предприятиеларҙан килә.

Ағас запасы буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында - дүртенсе, урман ултыртыу күләме буйынса беренсе урынды биләй. Шул уҡ ваҡытта оҙатылған тауар күләме буйынса - округта бишенсе, ә сағыштырма һөҙөмтәлелек күрһәткесе буйынса - 13-сө урында. Стратегияла урман сәнәғәте комплексы продукцияһын етештереүҙе өс тапҡыр арттырыу, сәнәғәт производствоһында уның өлөшөн өс процентҡа тиклем еткереү бурысы ҡуйылған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН



**Сентябрь башында Башҡортостандың баш ҡалаһында IV Өфө халыҡ-ара марафоны үтте. Быйыл ул 15 илдән һәм Рәсәйҙең 250-нән ашыу ҡалаһынан сәләмәт тормош яҡлы һәм йүгерергә яратыусы 3,6 мең спортсыны йыйҙы.**

## БАРЫҺЫ ЛА ЙҮГЕРҘЕ

Сара программаһында бер нисә дистанция ҡаралғайны: 42,2 километрға классик марафон, 21,1 километрға ярыммарафон, шулай уҡ 10, 3 километр, 4х10 километрға эстафета, хендбайкерҙар - сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән спортсыларҙың уҙышы. Маршрут Өфөнөң ҡыҙыҡлы, тарихи, иҫтәлекле урындары - Салауат Юлаев һәйкәле, Конгресс-холл бинаһы, "Ете ҡыҙ" фонтаны, "Өфө-арена" боҙ һарайы, Мостай Кәрим һәйкәле аша үтте. Старт "Динамо" стадионы эргәһендә бирелһә, финиш ҡапҡалары стадиондың асыҡ майҙанында ҡаршыланы. Майҙанда иһә тамашасылар һәм көйәрмәндәр өсөн күңел асыу программаһы ойошторолдо. Марафонда ҡатнашыусыларҙы һәм барлыҡ йыйылыусыларҙы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов тәбрикләне.

Өфө халыҡ-ара марафоны Рәсәйҙең ҙур марафондары иҫәбенә инә һәм бөтөн донъялағы ярыштар менән бер рәттән, халыҡ-ара календарға индерелгән, халыҡ-ара сертификатҡа эйә, Бөтә Рәсәй еңел атлетика федерацияһы билдарҡан Милли йүгереү хәрәкәте рейтингына инә. Марафонды уҙғарыу ҡала халҡын спортҡа йәлеп итеүгә, Башҡортостанда физик культура һәм һәүәҫкәр спортты үҫтереүгә, шулай уҡ илебеҙҙең башҡа төбәктәренән, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән туристарҙы ылыҡтырыуға ярҙам итә. Унда төрлө йәштәге спортсылар ҡатнаша ала. Өфө марафонында иң йәш ҡатнашыусыға 2,5 йәш булһа, иң өлкәненә - 89. Башҡа ҡатнашыусылар менән бер рәттән, өс километрлыҡ дистанцияла Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов та йүгерҙе.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Тамыр" телеканалының ике эше "МедиаБренд" конкурсы исемлегенә инде. "Бирешмә!" үҫмерҙәр өсөн беренсе башҡорт сериалының видеороликтары "Төбәк телевидениеһының иң яҡшы проморолигы" номинацияһында иң көслөләр иҫәбенә инде. Ә "Йәй" роликтары "Иң яҡшы оператор эше" номинацияһында финалға үтте. Бүләкләү тантанаһы һәм брендинг, промоушен һәм электрон киң мәғлүмәт сараларында дизайн мәсьәләләренә арналған конференция 12 сентябрҙә Мәскәүҙә уҙа.

✓Яңы уҡыу йылында уҡыусыларға һәм студенттарға Башҡортостан биләмәһендә йөрөгән ҡала яны поездарына билеттарҙы 50 процент ташлама менән һатып алырға мөмкин. Льгота 2018 йылдың 1 сентябренән 2019 йылдың 15 июненә тиклем ғәмәлдә була. Уҡыусыларға 50 процент ташлама менән билет алыу өсөн уҡыу йортонаң мисәте һуғылған белешмәне, ә студенттарға 2018/2019 уҡыу йылына оҙайтылыу тураһында билдә менән студент билетын күрһәтергә кәрәк.

✓Яңы уҡыу йылы алдынан Башҡортостанда белем биреү хеҙмәттәрен күрһәтеү мәсьәләләре буйынса "ҡыҙыу бәйләнеш" эшләй башланы, тип хәбәр итәләр төбәктең Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитетынан. Республикала йәшәүселәрҙең (347) 218-09-78 телефонына шылтыратып, бушлай консультация алыу мөмкинлеге бар.

✓2 сентябрҙә "Халыҡ хәтере" акцияһы старт алды. Ул республикала йәшәгән һәр кемгә ата-бабаларының хәрби юлы һәм ҡаһарманлыҡтары тураһында мәғлүмәт алырға мөмкинлек бирә. Акция барышында республиканың барлыҡ ҡалаларында ҡабул итеү бүлмәләре эшләй, унда туғандарыңдың наградалары, хәрби юлы тураһында мәғлүмәт алырға була.

✓28-29 сентябрҙә Өфөлә "Спорт комментаторҙары ассоциацияһы" төбәк ойошмаһы "Спорт тауышы" премияһын үткәрә. Сараны уҙғарыу тураһындағы бойороҡҡа республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡул ҡуйған.

✓Өфөлә башҡорт шағиры Яҡуп Ҡолмойҙоң 100 йыллығына уның Һайланма әҫәрҙәре донъя күрҙе. Китап республика Хөкүмәте булышлығында З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә баҫылып сыҡты. Китапты нәшриәттең фирма магазинында һатып алырға мөмкин.

*✓ "Өс баллы ер тетрәү беҙҙең көндәрҙә Мәләүездә, Өфөлә булды. Урал тауҙары - тергеҙелеүсе тауҙар, улар күтәрелә, ҡатламдарҙың тектоник ҡайтанан төҙөлөүе бара һәм бына тағы ҡайҙалыр нимәләр булған", - тип билдәләй белгес.*



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ШӘХСИ МӘКТӘПТӘРҘЕҢ...

## өҫтөнлөгө ниҙә?



**Заман ата-әсәләре балаларына алдынғы белем биреү, уңышлы шәхес итеп тәрбиәләп үҫтереү өсөн бер нәмә лә йәлләмәй. Ҡайһы берәүҙәр дәүләт белем биреү учреждениеларындағы шарттарҙы үҙһенмәй, шәхси учреждениеларға мөрәжәғәт итә. Өфө ҡалаһында эшләп килгән шәхси белем биреү мәктәптәренә килеүселәр күпме, улар дәүләт ҡарамағында булғандарҙан нимәһе менән айырыла, өҫтөнлөктәре нимәлә булыуы тураһында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы һөйләшеү үткәргәйне. Унда баш ҡалала әлеге көндә эшләп килгән лицензиялы ете шәхси белем биреү учреждениеһы етәкселәре ҡатнашты.**

"Шәхси белем усағының дәүләт ҡарамағындағы балалар баҡсаһы, мәктәптәрҙән айырмаһы, өҫтөнлөгө нимәлә?" тигән һорауға әллә ниндәй етди аргументтар килтермәне осрашыуҙа ҡатнашыусылар. Ата-әсәләрҙең шәхси учреждениеға мөрәжәғәт итеүе, тәү нәүбәттә, ҡәҙимге балалар баҡсаһында сираттың күп булыуына һәм мәктәптәрҙә һәр балаға иғтибар бүлеп еткерелмәүе менән бәйле, тип иҫәпләй шәхси белем биреү учреждениеһы етәкселәре. Балалар баҡсаһына сират тороуы оҙаҡ һәм уңайһыҙ процесс булыуы менән килешмәй булмай, ләкин хәҙер, билдәле анекдоттағы кеүек, бала әрме йәшендә булғанда "Сиратығыҙ етте" тип шылтыратмайҙар бит...

Шуныһы бар, шәхси учреждениелар уҡытыуҙы ойоштороу буйынса төрлө эксперименттарҙан ҡурҡмай. Мәҫәлән, "Солнечный круг" белем биреү үҙәгендә уҡытыу Мария Монтессори методы буйынса алып барыла, бында 6 синыфҡа тиклем уҡыусыларҙың өлгәшен баһалау өсөн билдә ҡуйылмай, синыфтарға бүлеү ҙә юҡ. "Детская академия" шәхси белем биреү учреждениеһында юғары синыф уҡыусыларына яҡшы белгән предметты ситтән тороп өйрәнеп, Берҙәм дәүләт имтиханы биргән предметтар йәки ауыр үҙләштергән предметтар буйынса ғына дәрескә йөрөү мөмкинлеге бар. Шәхси мәктәптең ойоштороусыһы Константин Миняев быны ыңғай баһалай: уҡыусы буш ваҡытын башҡа төрлө файҙалы шөғөлдәргә сарыф итә ала, ике смена уҡырға, шәмбе дәрестәр ҡуйырға кәрәкмәй. Чесноковка ауылында урынлашҡан "Миллениум" мәктәбе үҙен саф һауала уҡытыу, спорт йүнәлешенә ҙур баҫым яһаған белем усағы итеп таныҡтан. "Иң мөһиме, белем биреү кимәле беҙҙә күпкә юғары, - ти "Я гений" директоры Лилиә Исламова. - Сөнки беҙҙә юғары квалификациялы һәм белемле педагогтар эшләй".

Шәхси белем биреү учреждениеларына бөтә уҡытыусылар ҙа эшкә урынлашырға йөрьәт итмәй. Кадрҙар етешһеҙлеге улар өсөн дә актуаль проблемаларҙың береһе. Шәхси белем биреү усаҡтарының бынан тыш тағы бер етди проблемаһы - уҡытыу өсөн яраҡлы бина табыу. "Биналар булһа, әллә күпме мәктәп асып, бөтәһен дә уҡырға алып бөтөргә булыр ине", - ти "Супер школа" директоры Лилианна Яруллина ла. Тимәк, теләүселәр күп булғас, бизнес күҙлегенән белем биреүҙе килемле өлкә тип иҫәпләргә мөмкиндер. Ни тиһәң дә, баланың киләсәген хәстәрләүсе ата-әсәләр аҡса йәлләмәй. Шулай ҙа хәҙер бушлай белем алған уҡыусыға төрлө репетиторҙар, түңәрәктәрҙә шөғөлләнеү өсөн дә етди генә сығымдар талап ителә. Ә шәхси мәктәптә уҡығанда репетитор менән өҫтәмә рәүештә шөғөлләнеү талап ителмәй, тип бара уны ойоштороусылар. Әммә шәхси мәктәптәрҙә лә етешһеҙлеге юҡ түгел, унда... туған телдәр өйрәнелмәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлегә шәхси белем биреү усаҡтары уҡырға теләүселәргә ҡытлыҡ кисермәй, киләсәктә тағы ла күбәйер, тигән фекерҙә директорҙар. Сөнки тотош илдә балаларҙы шәхси белем усағына урынлаштырыу модаға әйләнә. Ата-әсәләр сифатлы белем һәм балаһына күп иғтибар бүленеүен көҫәй. Был яҡшымы, әллә насармы тип баһалап булмай, әлбиттә. Киләсәк күрһәтер.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*Аһ-Аһ!*

**5 сентябрь таңғы дүрт тирәһендә Башҡортостанда ер һелкенеүе теркәлгән. Быны үҙендә айырыуса Өфө, Белорет һәм Салауат райондарында йәшәүселәр тойған. Өфөләр социаль селтәрҙә йорттарының бәүелгәнен һиҙеүен яҙа, биналарҙа люстралар, карауаттар һелкенгәнен, йорт хайуандары борсоулы булғанын билдәләй.**

# БЕҘҘӘ ЛӘ ЕР ТЕТРӘЙ, ИМЕШ...

Мәғлүмәттәрҙән билдәле булыуынса, 5,5 магнитудалы ер һелкенеү шаршамбы Уралда Өфөнән көнсығышҡа табан 133-сө саҡрымда булған. Сейсмик әүҙемлек Силәбе өлкәһенең Катав-Ивановск муниципаль районында 10 саҡрым тәрәнлектә теркәлгән. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса Баш идаралығынан хәбәр итеүенсә, республика биләмәһендә ер һелкенеү оҙаҡҡа һуҙылмаған. "Литосфера плиталарының хәрәкәте ер тетрәүгә килтергән, - тип "Башинформ" агентлығына комментарий биргәләр ведомстводың матбуғат хеҙмәтендә, ҡайһы бер кешеләрҙең һелкенеүҙең техноген характер йөрөтөүе тураһындағы фекерен кире ҡағып. - Оператив хеҙмәттәр биләмәләрҙә ҡарап сыҡты. Электр һәм газ, һыу тәьминәтендә өҙөклөктәр юҡ. Һәләк булғандар, зыян күргәндәр юҡ".

"Ер шары йәшәй, үҫешә һәм ер һелкенеү - ул ғәҙәти күренеш", - тип аңлатма бирҙе Башҡортостандағы төнгө ер һелкенеүгә ҡарата география фәндәре кандидаты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Ринат Фәтҡуллин. Уның һүҙҙәренсә, бер нисә йыл элек Өфөлә ер тетрәгәйне, ул сакта ашығыс хеҙмәттәр хатта Октябрь проспектында йәшәүселәрҙе эвакуациялау тураһында иҫкәрткәйне. Ғалим шулай уҡ Урал тауҙарынан көнбайышҡа табан Өфө урынлашҡан платформа өлөшөндә ер һелкенеү 2 балл тирәһе була алыуын билдәләне.

Уның коллегаһы, география фәндәре кандидаты, Рәсәйҙең Почетлы геодезисы, Хәрби фәндәр академияһының ғәмәлдәге ағзаһы профессор Геннадий Турикешев Башҡортостандың үҙендә лә ер һелкенеү булыуы ихтимал, тип иҫәпләй. Мәҫәлән, уның һүҙҙәренсә, көслө ер тетрәү Башҡортостандың Архангел районында 19 быуатта булған. "Өс баллы ер тетрәү беҙҙең көндәрҙә Мәләүездә, Өфөлә булды. Урал тауҙары - тергеҙелеүсе тауҙар, улар күтәрелә, ҡатламдарҙың тектоник ҡайтанан төҙөлөүе бара һәм бына тағы ҡайҙалыр нимәләр булған", - тип билдәләй белгес. Шулай уҡ ғалим фекеренсә, ер тетрәүгә кеше факторы ла сәбәпсе булыуы ихтимал. "Быndай ер һелкенеү йәш ҡына Татарстанда Әлмәт районында була. 1982-2000 йылдарҙа унда 700-гә яҡын ер тетрәү теркәлгән", - ти Геннадий Турикешев. Шул уҡ ваҡытта ул 2018 йылдың 5 сентябрендәге ер тетрәүгә нимә сәбәпсе булыуын әйтә алмай. "Моғайын, ул үҙенән-үҙе булғандыр", - тип фекерләй әңгәмәсе. Ғалим шулай уҡ әле сейсмология мәсьәләләре менән шөғөлләнеүсе берҙәнбер ойошма Өфөлә булыуын әйтте. Ул Башҡорт дәүләт университеты ҡарамағында Космик хеҙмәттәр үҙәге. Вуздың сейсмик станцияһы Өфө районының Лекаревка ауылында урынлашҡан.

Өфөлә һуңғы тапҡыр сейсмик әүҙемлек 2015 йылдың октябрендә күҙәтелгәйне. Ул сакта ер аҫты һелкенеүенә Пакистанда һәм Афғанстанда 7,7 амплитудалы ер тетрәүе сәбәпсе булды.

Һуңғы яңылыҡтарҙан билдәле булыуынса, Башҡортостан һәм Силәбе өлкәһе сигенән алыҫ түгел Көньяҡ-Урал ҡурсаулығы биләмәһендә өс күсмә сейсмик станция ҡуялар. Ҡоралмалар ер өҫтөнөң шыуыу күрһәткестәрен үлсәй. Станциялар бер нисә көндән эшләй башлаясаҡ, тиҙәр Рәсәй Фәндәр академияһының Геофизика институты ҡарамағында Урал төбәге мониторинг секторында. Шулай уҡ институт белгестәренең ер тетрәүҙең эпиүҙәгенә уның тәбиғәтен өйрәнеү өсөн йүнәлеүҙәре билдәле. Мониторинг көсәйеүгә ҡарамаҫтан, ғалимдар яңы ер һелкенеүҙе көтмәй.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығыҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ирендәр ярылғанда...

❖ Ирендәргә бал һөртөргә һәм 15-20 минуттан һуң йыуып, крем һыларға;

❖ Ҡыяр һуты менән йомшартырға ла була. Көнөнә бер нисә мәртәбә эшләргә кәрәк;

❖ Һалҡын, елле көндәрҙә урамға сығыр алдынан ирендәргә майлы крем һөртөргә лә өҫтөнән пудра яғырға, һуңынан ғына помада ҡулланырға;

❖ 1 балғалаҡ эремсеккә 1 балғалаҡ кишер һуты ҡушып яһалған ҡатнашманы һөртөргә;

❖ 1 балғалаҡ вазелинға балғалаҡтың 4/3 өлөшө күләмендә кастор майы ҡушып та һөртөргә була.

### Яман шеш

❖ Был насар сир булмаһын өсөн 10-ар көн дауамында йылына 3-4 тапҡыр үләндәр менән дауаланып алыу зыян итмәҫ. Быныn өсөн ҡайын япрағы, юл үләне, һары мәтрүшкәне бер күләмдә алып болғатығыҙ һәм 2 ҡалаҡ ҡатнашмаға ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә. Һөҙгәндән һуң көнө буйы эсеп бөтөрөргә.

❖ Шулай уҡ 1-әр балғалаҡ ҡайын еләге япрағы, һары мәтрүшкә, бәпкә үләне, эхинацея алып, 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп, 30-40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Был төнәтмәне бер көндә эсеп бөтөргә кәрәк. Дауаны 10 көн дауам итергә.

### Мелисса

❖ Был үләнде халыҡ аҡ кесерткән тип тә йөрөтә. Һәр йәй һайын мелиссаның япраҡтарын йыйып киптереп алығыҙ. Кипкән 2 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, өҫтөн ябығыҙ һәм бер сәғәткә йылы урынға ҡуйығыҙ. Ашар алдынан 30-40 минут алдан ярты стакан-лап эсергә. Был төнәтмә йөрәк сиренән, ҡан баҫымы күтәрелеүҙән, үт ҡыуығы, бөйөр шешенән, нервылар ҡаҡшауынан ҡотолорға ярҙам итә.

### Теш ите

❖ Теш ите ауырыуҙары ваҡытында ҙур булмаған сей картуф сәйнәгеҙ. Ошо ысул менән электән ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙарынан һәм зәңгәнән ҡотолғандар.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ 25 йәшендә башҡорт ғәскәре төҙөүселәрҙең, аҙағыраҡ Башҡорт казак ғәскәрен ойоштороусыларҙың береһе була. 1918 йылда инде ул - Башҡорт хәрби советы ағзаһы, 5-се Башҡорт йәйәүле полкы командиры.



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ТЫЙЫУҘАР

## Никахҡа ҡарата тыйыуҙар:

- Ҡыҙ ата йортонан киткәндә үҙе менән тауыҡ алып китергә тейеш түгел - кирегә тибенеп ҡуйыуы бар.
- Ҡыҙ күсенгәндә артынан себеш биреп ебәрергә ярамай - кирегә тыр-най. Тояҡлы мал бирәләр.
- Ҡыҙ күсенгәндә ҡаҙ биреп ебәрмәйҙәр. Бер алға, бер артҡа баҫа бит.
- Ҡыҙ кейәү йортона күскән саҡта артынан гөл ебәрмәйҙәр, гөл ғүмере ҡыҫҡа булған кеүек үк, ҡыҙ ғүмере лә ҡыҫҡа булыуы ихтимал.
- Ҡыҙ кеше кейәүгә сығып, өйөнән күскәндә артына боролоп ҡарарға тейеш түгел.
- Ҡыҙҙы күсергәндә тура өйгә алып ҡайтмайҙар, урау юл менән йөрөйҙәр. Шулай итһәң, имеш, киленден ғүмере оҙон була.
- Күсенеп китеп барғанда кирегә боролмайҙар.
- Йыл тормай, килен маҡтамайҙар.
- Ҡыҙ ата йортонан күсенгәндә, ҡапҡанан сыҡҡанда бейетергә ярамай - донъяһын туҙҙыра, тиҙәр.
- Килен күскәндә юлын ҡыйырға ярамай.
- Никахта парһыҙ кешеләр булырға тейеш түгел.
- Ай өҙөгөндә никах уҡытырға ярамай.
- Никахтан һуң эт-бесәй биреп ебәрмәйҙәр, аралар насар була.

## Ҡатын, бала менән бәйле тыйыуҙар:

- Ауырлы ҡатынға йөн иләргә, бәйләм бәйләргә ярамай.
- Ауырлы ҡатынға ат менән бейәнең ҡушылғанын ҡарап торорға ярамай. Ат быуаҙ килеш оҙаҡ йөрөй, ҡатындың да шулай оҙаҡ йөрөүе бар.
- Баланы тыуғандан һуң 40 көн яңғыҙын ҡалдырырға ярамай. Башы аҫтына бәләкәй ҡыҫҡыс, йә кәсәү һалып ҡуйырға кәрәк.
- Балаға тау, йылға исемдәрен ҡушырға ярамай.
- Баланың тәүге сәсен ҡырғандан һуң ташламайҙар, һаҡлап һалып ҡуялар. Шулай итһәң, имеш, бала бәхетле буласаҡ.
- Баланы артыҡ иркәләтергә ярамай, йоҡлағанында ғына һөйөп алырға була.
- Буш сәңгелдәк бәүетмә, балаң илаҡ булыр.
- Бәләкәй баланы көҙгөгә ҡаратмайҙар, ҡурҡып, телһеҙ ҡалыуы бар.
- Ҡыҙ кешегә өҫтәлдең ҡыры янына ултырырға ярамай, кейәүгә сыға алмаҫ.
- Ҡатын-ҡыҙға кәртә аша атлап йөрөргә ярамай: ырыҫ-бәхете кәмей.
- Ҡатын-ҡыҙға һыҙғырырға ярамай, күп никахлы була.
- Ҡатын-ҡыҙға ирҙәрҙең баш кейемен кейергә ярамай.
- Һунарға ҡатын-ҡыҙ йөрөмәй, оҙатып та ҡалмайҙар, юҡһа, юл уңмай.
- Ҡатын-ҡыҙға мал, ҡош-ҡорт һуйырға ярамай.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**
**(Дауамы бар).**

УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ



# ҒӘЛИМЙӘН ТАҒАНДЫҢ...

## эмиграциялағы тормошо тураһында

**Башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашып, шул заманалар шауҡымында яҙмыштары ҡырҡа боролош алып, ғүмерҙәрен ситтә йәшәп үткәрергә мәжбүр булған башҡорт зыялылары аҙ булмаған беҙҙең тарихта. Шундайҙарҙың береһе - Ғәлимйән Таған. Үкенескә күрә, был шәхес хаҡында беҙҙең архивтарҙа мәғлүмәттәр әлегә өйрәнелеп етмәгән, ә бына сит ил архивтарында, музейҙарында ғүмерен эмиграцияла үткәргән башҡорт улы Таған тураһында ҡыҙыҡлы материалдар байтаҡ икән. Был хаҡтағы мәғлүмәттәр менән тарихсы Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА бүлеште.**

**➔ Зилә Фәсим ҡыҙы, һеҙ тапҡан мәғлүмәттәрҙән үҙегеҙ өсөн иң ҡыҙыҡлыһы нимә булды?**

- Венгрияның Будапешт ҡалаһындағы Этнография музейының "Азия" коллекцияһында һаҡланған биҙәкле самурай ҡылысы иғтибарҙы йәлеп итте. Бер быуатҡа яҡын ошо музейҙа һаҡланған был ҡорал Япония мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнеүселәрҙә генә ҡыҙыҡһыныу уятмай ине. Беҙҙең өсөн ҡылыстың әһәмиәте һәм ҡиммәте - уның Ғәлимйән Тағандыҡы булыуында. 1930 йылдың 20 октябрендә музейға тапшырылған ағас һаплы, латунь һәм ҡоростан ҡойолған был ҡылысты Ғ. Таған, һис шикһеҙ, Япониянан алып килгән булған. Белеүебеҙсә, ул көнсығыштан Ҡытайҙың Маньчжурияһына, шунан Японияға, артабан 1922 йылда Венгрияға юллана. Бынан тыш, уның бамбук ручкаһы, ҡулдан туҡылған ҙур булмаған келәме һәм йөн туҡыманан тегелгән аҫма сумкаһы ла һаҡлана икән музейҙа. Ғөмүмән, тарих фәнендә документаль сығанаҡтар ғына түгел, әйберҙәр ҙә айырым, өҫтәмә мәғлүмәт бирә ала. Был осраҡта музейҙа һаҡланған экспонаттар. Сөнки музей ҡомартҡылары белем сығанағы ғына түгел, улар эмоциялар тапшырыу һәм хистәр тыуҙырыу һәләтенә лә эйә. Йәғни әйберҙәр төп нөсхә, ысын булыуы менән ҙур әһәмиәткә эйә.

Ғ. Таған 1927 йылдан Венгрияның Будапештағы Милли музейының (һуңғараҡ Венгрияның Этнография музейы тип үҙгәртелә) этнография бүлегендә эшләй башлай. Тап ошо йылда уның тәүге баҫмалары донъя күрә, ғалим-этнограф булараҡ әүҙем эшмәкәрлеге башлана. Венгрияның Этнография музейы сайтында ла асыҡ ҡулланылышта Таған исеме менән бәйле йөҙҙән ашыу материал табырға була. Ғөмүмән, уның тураһында мәғлүмәт барлағанда "Галимжан", "Галимджан", "Галимян", хатта йышыраҡ "Галимсан" һәм "Алимсан" Таған тип эҙләү һөҙөмтә бирә. Музей экспонаттары булып киткән әйберҙәрҙе зыялы күбеһенсә экспедицияларҙан алып ҡайтҡан. Мәҫәлән, ул 1930 йылда Төркиәлә экспедицияла булған. Фото фондында был сәфәрҙән уның әлегә тиклем баҫылмаған ике фотоһы һаҡлана. Береһендә Ғ. Таған таш йортто фотоға төшөрһә, икенсеһендә - ул ҡырҙа эшләгән экспедиция майҙанында ҡырынып тора. Шул уҡ йылда ул Төньяҡ Венгрияға ауыл хужалығы буйынса мәғлүмәт йыйырға ойошторолған экспедицияла ҡатнаша. Артабан ул 1932 йылда тағы ла Төркиәгә, Балҡанға, Балтика буйына, Финляндияға сәфәр ҡыла. Һәм, әлбиттә, Венгрияның төрлө тарафтарына юлланған экспедицияларға, айырыуса Кишкуншаг һәм Надькуншаг районларына сыға. Ғәлимйән Таған хатта 1941 йылда, музей штатында булмауына ҡарамаҫтан, Венгрияға ҡайтарылған Төньяҡ Трансильванияға экспедицияға бара. Уның был этнографик экспедицияларҙан алып ҡайтҡан әйберҙәре генә түгел, ә халыҡтың йәшәйеше буйынса тупланған материалдары, һис шикһеҙ, 20-се быуат венгрҙары тарихын өйрәнеүҙә баһалап бөткөһөҙ сығанаҡ булып тора.

Ғ. Таған тарафынан ойошторолған экспедициялар былар менән генә тамамланмай. 1935 йылда ул Румынияның Бихор тип аталған районына бара. Музей фондында был сәфәрҙән ат егеү кәрәк-ярағы, тимер тарағы, ҡаптырма, фотолар, открыткалар, рәсемдәр һаҡлана. 1937 йылда ғалим Урта Тисала венгрҙар тураһында мәғлүмәт йыйыу менән шөғөлләнә. 1941 йылда ул Варсаг тип аталған, вулкан өҫтөндә 76 $м^2$ майҙанда урынлашҡан ҡасабаны өйрәнеүҙә лә ҡатнаша. 1941-1943 йылдарҙа музей фондына Ғ. Таған тарафынан тапшырылған 65 экспонат иҫәпкә алына, улар араһында сигеү өлгөләре, милли кәсеп материалдары, мебель, хужалыҡ әйберҙәре һ.б. була. Шулай уҡ ғалим-этнограф фото, туҡыма, хужалыҡ, рәсем һәм һынлы сәнғәт коллекцияларын тиҫтәләгән әйберҙәр менән тулыландырған. Был әйберҙәрҙең береһенең дә яҙма материалдары әлегә өйрәнелеп, фәнни әйләнешкә индерелмәгән.

**➔ Тағандың Башҡорт милли хәрәкәтендәге ролен ҡыҫҡаса анализлап китәйек әле...**

- Ғәлимйән Таған Башҡорт милли хәрәкәтендәге күренекле һәм билдәле фигура була. Граждандар һуғышы ваҡытында ла ул башҡорт сәйәси етәкселегендә һәм хәрби эштәрҙә хәл иткес ролдәр башҡара. Болғанышлы ваҡиғаларға тиклем ул рус теле уҡытыусыһы була. Хәлле ғаиләлә үҫкән, яҡшы белем алған, заманының уҡымышлы кешеләренең береһе. Беренсе Бөтә донъя һуғышы башланғас, офицерҙар составындағы юғалтыуҙарҙы тулыландырыу өсөн һуғыш ваҡытында офицерҙар әҙерләү өсөн махсус хәрби уҡыу йорттары асыла. Бында прапорщиктар әҙерләнә. Прапорщиктар мәктәбенә урта һәм юғары белемлеләрҙе йыялар. Ғәлимйән Таған да ошо мәктәпкә хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Тифлис ҡалаһында уҡыуҙы тамамлап, 1914 йылда Рус империяһы армияһы прапорщигы булып, Кавказ фронтына ебәрелә. Тифлис мәктәбе Рәсәйҙең башҡа хәрби уҡыу йорттарынан айырмалы рәүештә, казак ғәскәрҙәре етәкселәрен әҙерләй. Һәм был факт Тағандың хәрби карьераһына нигеҙ һала ла инде.

Рәсәй батшалығы ҡолатылғас, хәрби хеҙмәт тәжрибәһе булған, һуғыш юлы үткән ир-уҙаман 1917 йылда Башҡорт милли хәрәкәтенә килеп ҡушылып, 25 йәшендә башҡорт ғәскәре төҙөүселәрҙең, аҙағыраҡ Башҡорт казак ғәскәрен ойоштороусыларҙың береһе була. 1918 йылда инде ул - Башҡорт хәрби советы ағзаһы, 5-се Башҡорт йәйәүле полкы командиры. Бер арауыҡта хакимлыҡ үҙәге үҙенең тыуған ауылында булған Ялан кантоны рәйесе лә булып ала. Һуңынан 2-се дивизиялағы 3-сө Башҡорт уҡсылар полкы командиры итеп ҡуйыла. 1918 йылдың аҙағында Рәсәйҙең көнсығыш сиктәрендәге Халыҡ армияһында хеҙмәт итә. Унан Колчак етәкселегендәге Рус армияһында хеҙмәт итә, большевиктарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Таған, Башҡорт милли хәрәкәте лидеры М. Ҡорбанғәлиев кеүек үк, үҙ полкы менән Колчак артынан Себергә китә.

**➔ Сит илдә ул ғалим булараҡ билдәлелек яулай, шулай бит?**

- Ғ. Тағандың Венгрияға килеп, ете йыл эсендә иҡтисад докторы дәрәжәһенә күтәрелеүе шәхестең ни тиклем маҡсатлы, зиһенле булыуын дәлил. Был илгә килеп, өс йыл үтеүгә, ул диплом эшен венгр телендә яҙыуға өлгәшә. Телде юғары кимәлдә белеүенә шик ҡалмай. Һәм шуғалыр ҙа ул эске эштәр министрлығына рус телендәге документтарҙы венгрсаға тәржемә итеүгә саҡырыла. Тәржемәсе вазифаһын Ғ. Таған 1925 йылдан 1930 йылға тиклем үтәй.



***✓ Ғ. Таған венгр гражданлығын алғас, илдең эске эштәр министрлығы унан "Бөйөк төрки дәүләте"н төҙөү идеяһын пропагандаламауын һорай. Тарихсы Кесе Ковач фекеренсә, Таған был кәңәште тота.***






Йәғни музейға эшкә урынлашҡанға тиклем ул эске эштәр министрлығында хеҙмәт итә башлай. Был турала һирәк телгә алына. Был әлеге лә баяғы сығанаҡтарҙың өйрәнелеп бөтмәүе менән аңлатыла. Аңлашыла, әлбиттә, ул рус һәм венгр телен яҡшы белгән, шуға ла уның кандидатураһы раҫланған. Әммә тарихсы Шереш Аттила уның был вазифала эшләүен тағы бер нәмә менән аңлата. Ул ваҡыттағы Рәсәй һәм Венгрияның сәйәси мөнәсәбәттәрен иҫәпкә алғанда, венгрҙар өсөн Ғ. Тағандың нәҡ рус милләтенән булмауы ҡулай моменттарҙың береһе булған, тип яҙа ул.

1938 йылдың 22 июнендә Ғ. Таған илдең Этнографтар йәмғиәтенең ассамблеяһында кассир итеп тәғәйенләнә. Фәнни ойошмалағы был вазифаға һайланыуы, һис шикһеҙ, уның юғары абруйы хаҡында һөйләй, сөнки бындай урынға абруйһыҙ, яуапһыҙ кеше ҡуйылмаҫ ине.

**➔ Ғ. Таған тураһындағы мәғлүмәттәр ниндәй сығанаҡтарҙа, ҡайҙарҙа һаҡлана?**

- Ғәлимйән Таған ғалим-этнограф булараҡ танылa. Төрки халыҡтарҙың һәм шул иҫәптән башҡорттарҙың этнографияһы буйынса венгр һәм немец телендә хеҙмәттәр яҙа. Был баҫмалар Венгрияның Этнография музейында һәм Будапешт, Вена, Гамбург, Стамбул, Хельсинки һәм Париж китапханаларында һаҡланыуы тураһында ғалимдарыбыҙ яҙҙы. Бөгөнгө көндә Ғ. Тағандың Туран хәрәкәтендәге ярайһы уҡ әүҙем эшмәкәрлеге лә тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән. Был туралағы документтарҙы Венгрияның Милли архивының "Премьер-министр эргәһендәге милли әҙселек бүлеге", "Туран йәмғиәте" фондтарында һәм "Венгрияның Сит эштәр министрлығының сәйәси бүлеге" фондында табырға мөмкин. Бынан тыш, яҡташыбыҙҙың эшмәкәрлеге Этнография музейының ҡулъяҙмалар бүлегендә, шәхси документтар коллекцияһында бар. Ҡыҙыҡлы, мөһим документтар Иштван Сечени исемендәге Милли китапханала һаҡлана. Айырыуса венгр ғалимы Алайош Паикерттың ҡулдан яҙылған көндәлегенә иғтибар итергә кәрәк. Сығанаҡтар киләсәктә был тема менән махсус шөғөлләнгән ғалимдарыбыҙ тарафынан һис шикһеҙ өйрәнелеп, киң йәмәғәтселеккә еткерелер тип ышанғы килә.

Ғ. Тағандың эшмәкәрлеге 20-се быуат башындағы башҡорт халҡы тарихының билдәле ваҡиғаларын өйрәнгәндә генә түгел, ә киңерәк - Венгриялағы рәсәйлеләр эмиграцияһы тарихын, Туран хәрәкәте тарихын тикшергәндә лә айырым ҡаралырға тейеш. Сөнки был тәңгәлдәге ваҡиғаларҙы Ғ. Таған шәхесенән башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай.

**➔ Сит илдә уны күберәк кем итеп беләләр? Ғалимды, әллә эмигрантмы?**

- Ҡыуаныусҡа күрә, бөгөн дә сит ил тикшеренеүселәре өсөн ҡыҙыҡлы шәхес булып тора Ғ. Таған. Быны уның бик яҡшы кимәлдә венгр телен белеп, бик күп ҡулъяҙмалар ҡалдырыуы менән дә аңлатырға була. Шереш Аттила исемле ғалим уның Туран хәрәкәтендәге эшмәкәрлеге менән дә ҡыҙыҡһына. Ул: "Венгр сығанаҡтары буйынса, Рәсәй эмигранттары араһынан башҡа берәү ҙә Таған кеүек киң билдәлелек һәм һөйөү яулай алмаған", - тип яҙа. Ысынлап та, Венгриялағы туран ойошмаһы 1910 йылда барлыҡҡа килә һәм Урта Азия халыҡтарын, алтай, урал телле милләттәрҙе берләштереү идеяһы пропагандалай. 1930 йылдарҙа был ойошмаға Будапештағы төрөк, болгар, эстон, фин илселектәренең юғары вазифалағы кешеләре ингән. Шулай уҡ бик күп ғалимдар, сәйәсмәндәр, дипломаттар, күренекле йәмәғәт эшмәкәрҙәре венгр-туран хәрәкәтендә ҡатнашҡан. Почетлы ағзалар исемлеге алты йөҙҙән ашыу кешенән торған. Ғ. Таған, күрәһең, шул уҡ шәрҡиәтсе Бенедек Баратош ярҙамында был йәмғиәткә ылыҡҡандыр. Сөнки 20-се йылдарҙа Баратош был ойошманың вице рәйесе була. Өҫтәүенә, тап шул ваҡытта фәндә венгрҙарҙың башҡорттар менән тарихи бәйләнеше тураһында ҡыҙыҡһыныу башлана.

**➔ Ғәлимйән Таған менән Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҙмыштары оҡшаш та кеүек. Улар эмиграцияла бәйләнеш тотҡанмы икән? Был хаҡта ниндәйҙер мәғлүмәттәр бармы?**

- Ошо тәңгәлдә Ғ. Тағандың Венгрияла Ә. Вәлиди менән осрашыуы тураһында әйтеп китмәү мөмкин түгел. Ә. Вәлиди Абдулҡадир Инан менән Венгрияға 1925 йылда, үҙе генә 1929 йылда Ғ. Тағанға килә. Икенсе тапҡыр килгәнендә ул, ахыры, бер нисә айға туҡтала һәм Рәсәй мосолмандары тураһындағы доклад менән сығыш яһай. Уны бында элекке ил башлығы булараҡ ҡабул итәләр һәм доклад бик мөһабәт Ғәмәли сәнғәт музейында уҡыла. Уның тәржемәсеһе, әлбиттә, Ғ. Таған була. Ә. Вәлиди венгр-туран ойошмаһының почетлы ағзаһы итеп алына.

Венгр гражданлығын Ғ. Таған 1930 йылда алыуға өлгәшә. Быға тиклем уның Төркиәгә гражданлыҡ биреүҙәрен һорап мөрәжәғәт итеүе билдәле. Әммә үтенесе кире ҡағыла.

Венгр ғалимдары араһында, Ғ. Таған венгр властарынан Ә. Вәлиди менән рәсми рәүештә мөнәсәбәттәр булдырыуҙы һораған, тигән фекер ҙә бар. Әммә бында мөһим бер момент - Ғ. Таған венгр гражданлығын алғас, илдең эске эштәр министрлығы унан "Бөйөк төрки дәүләте"н төҙөү идеяһын пропагандаламауын һорай. Тарихсы Кесе Ковач фекеренсә, Таған был кәңәште тота.

**➔ Артабанғы тормошонда Таған Башҡортостан менән ниндәйҙер бәйләнештәр булдыра алдымы икән?**

- Әлбиттә, тыуған илен һағынғандыр, тип уйлайым. Был тойғо һәр кемгә лә хас. Иҫ киткес маҡсатлы, аңлы, илһөйәр ғалим да был хистәрҙән мәхрүм булмағандыр. Билдәле булыуынса, Ғ. Таған 1920 йылда 28 генә йәшендә тыуған иленән сығып китә. Мәжбүри рәүештә, тип әйтәйек. Ул был юғалтыу һағышын эш менән баҫҡандыр. Этнография музейында эшләү, күпләп экпедицияларға сығыу, халыҡ менән аралашыу күңел йыуанысы ла биргәндер. Өҫтәүенә, тап ошо музейҙа венгрҙар 20-се быуат башында Көньяҡ Башҡортостанданға экспедициянан алып ҡайтҡан бик күләмле коллекция бар. Әйтергә кәрәк, Ғ. Таған башҡаса башҡорт еренә бер ҡасан да әйләнеп ҡайта алмаһа ла, 1942 йылда Советтар Союзына аяҡ баҫа. Киев ҡалаһында ул билдәле венгр ғалимдары Нандор Феттиха һәм Дьюла Ласло менән тәржемәсе булараҡ музей ҡомартҡыларын иҫәпкә алыуҙа ҡатнаша.

Ғ. Таған 1944 йылдан алып 1948 йылға тиклем Германияла йәшәй һәм Гамбург ҡалаһында мәрхүм була. Йомғаҡлап әйткәндә, Ғәлимйән Таған шәхесе милли азатлыҡ хәрәкәте ағзаһы булараҡ ҡына түгел, ә бөгөнгө тарих күҙлегенән эмиграцияла (бөтөнләй ситят илдә) тормоштоң бар баҫҡыстарын үтеп, йәмғиәттә юғары вазифаларға өлгәшеүсе ғалим, кеше булараҡ та өйрәнелергә тейеш.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА яҙып алды.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Филипп НЕФЕДОВ*

# ХАЛЫҠ БАТЫРЫ САЛАУАТ

...Иркенлек, байлыҡ, хозурлыҡ менән таң ҡалдыра был ил. Ҡайҙа ҡарама - һоҡланғыс һәм ғәжәйеп күренештәр. Бер-бер артлы игe-сиге күренмәгән тау теҙмәләре, ә унда - көн яҡтыһы ла төшмәҫлек ҡара урмандар, мыжғып торған кейек-януарҙар, төрлө-төрлө ҡоштар; икенсе яҡта - осһоҙ-ҡырыйһыҙ дала һәм һушыңды алыр болонлоҡтар; көмөштәй ялтырап аҡҡан тулы һыулы йылғалары, йүгереп туймаған бала шикелле йәшел болонда уйнаҡлаған кескәй йылғасыҡ һәм шишмәләр... Ошо хозурлыҡҡа ҡарай ҙа башҡорт, йөрәгенән шатлыҡ хисе урғыла. Күңелендә тәбиғәткә гимн, матур бер йыр тыуа. Шул саҡ алыҫ-алыҫта, ер менән күк тоташҡан ерҙә офоҡто ҡаплап, ниндәйҙер гиганттар хасил була: берәүҙәре аяғөҫтө тороп баҫҡан да баштарын һауаға терәп, ҡулдары менән күкте күтәргән; икенселәре үҙ ауырлығын күтәрә алмай, ергә ауған титанды хәтерләтә. Тән семерҙәп китә: унда шайтандар йыйылышып, үҙ-ара алыш башлап ебәргәнме әллә? Ғәжәп, тик улар бит хәрәкәтһеҙ. Шул саҡ шомланыуҙар ләззәтле йөрәкһеү менән алмашына: шул саҡ башҡорт Урал тауҙарының мәғрур ҡаяларын, бейек тау түбәләрен танып ҡала. Күпме алтын-көмөш, зиннәтле таштар йәшеренгән уның ҡуйынында! Ошо илде башҡорт әсәһен яратҡан кеүек ярата һәм мәңгелеккә төйәк итә. Ерҙәрҙе улар ырыуҙарға бүлеп өләшеп ала. Берәүҙәр өлөшөнә, шулай итеп, тау ҙа урман, икенселәренә иркен дала эләгә. Башҡорттар ауыл-ауыл булып кейеҙ тирмәләрҙә йәшәгән, иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем йәйләүҙә йәйләгән, ҡымыҙ эскән. Ҡарсыға һәм бөркөттәрҙе ҡулға эйәләштереп, һунар иткән, һыбай йөрөүҙә сослоғон, йәйәнән уҡ атыуҙа мәргәнлеген һынаған.

Башҡорт ат ярата, өйөр-өйөр йылҡы, көтөү-көтөү һыйыр-һарыҡ аҫрай. Бынан тыш, урман башҡорттары кейек-януар аулай, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнә. Зирәк аҡыллы, хистойғоло башҡорттар шул уҡ ваҡытта иҫ киткес ҡыйыулыҡ һәм саялыҡтары менән айырылып торалар; шәхси азатлыҡ менән бойондороҡһоҙлоҡто бөтә нәмәнән дә юғары ҡуялар, ғорурҙар һәм ҡыҙыуҙар. Ҡорал менән мәргән эш итеүсе оҫта һыбайлылар булараҡ, бәжәнәктәр, булғарҙар һәм башҡа күрше халыҡтарҙың ҡотон ала торған булғандар. Уларҙың ырыу башлыҡтары булһа ла, хакимлыҡ итеү даирәһе сикләнгән; бөтөн мөһим мәсьәләләр халыҡ йыйынында хәл ителгән, ә унда һәр башҡорттоң тауыш хоҡуғы була. Һуғыш йә барымтаға йыйын бер кемде лә мәжбүрләмәгән - һәр кем унда ҡатнашыуҙы үҙе хәл иткән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ни тиклем башҡорт мәктәптәре күберәк, шул тиклем милләт өсөн яҡшыраҡ. Уларҙа ҡала балалары мотлаҡ ауыл балалары менән бер мәктәптә уҡырға тейеш, сөнки ауыл балалары башҡорт телен яҡшыраҡ белә.*



**"Өфө башҡорто" рубрикаһының сираттағы ҡунағы - юғары категориялы табип-эндокринолог, медицина фәндәре кандидаты Гөлзифа ӘБУШАҺМАНОВА.**

# АСЫЛЫҢА ҠАЙТЫУ ӨСӨН...

## үҙебеҙҙең мөхит кәрәк!



**Бөтөн нәмә ғаиләләге тәрбиәнән килә, юҡҡа ғына "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән", тимәйҙәр. Ниндәй ата-әсәй ҡулында тәрбиә алдығыҙ?**

- Атайым - Башҡортостандың атҡаҙанған адвокаты Әбделхәй Ғизелхаҡ улы, әсәйем иҡтисад фәндәре кандидаты Хәмиҙә Ғәзиз ҡыҙы Байморатовтар. Атайым һәр саҡ алдан күрә белде һәм аҡыллы ҡарарҙар ҡабул итте. 14 йәшенән тыуған ауылынан сығып китеп, Мораҡ педучилищеһында уҡый, 17 йәшендә инде Өфөгә юлланып, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә, һуңынан Свердловскиҙа юрист белеме ала. Үҙе генә белем тауын артылып ҡалмай, үҙенән һуң килгән ҡусты-һеңлеләрен Өфөгә килтереп, 1-се республика мәктәп-интернатына уҡырға урынлаштыра, уларҙың һәр береһенә имтихандар тапшырырға ярҙамлашып, баш ҡаланың төрлө вуздарына (БДУ, нефть, ауыл хужалығы, педагогия) уҡырға индерә. Ғаиләләрендәге 8 баланың етеһе - юғары белемле, ә Байморатовтар фамилияһы Күгәрсен районында ғына түгел, республикала бик билдәле. "Байморатовтар уҡымышлы кешеләр бит, уҡымышлы нәҫел", тигәндәрен шәхсән үҙемә йыш ишетергә тура килде.

Әсәйем Хәмиҙә Ғәзиз ҡыҙы ла Өфөгә республиканың икенсе мөйөшөнән - Балаҡатай районынан килә. Уны ла ҡәртнәйем ситкә ебәргеһе килмәй, әммә әсәйем колхоз рәйесе менән һөйләшеп, паспорты алып, баш ҡалаға сығып китә, БДУ-ның геология факультетына уҡырға инә. Университетта уҡыған йылдарында атайым менән осрашып, өйләнешеп, Өфөлә эшкә ҡалалар. Әсәйем ғүмер буйы БР Фәндәр академияһының Иҡтисади тикшеренеүҙәр бүлегендә (хәҙер БР Фәндәр академияһының Иҡтисад институты) кесе, һуңынан өлкән ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, ике бала әсәһе булғас, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. Атайым кеүек, ул да беҙгә гелән: "Уҡығыҙ, зур белемле кешеләр булығыҙ, тик белемле кеше генә был тормошта аяғында ныҡ, ышаныслы баҫып тораса", - тип тылҡыны. Атай-әсәйем беҙҙең табип булыуыбыҙҙы теләне һәм уларҙың өмөттәрен аҡланыҡ, тип уйлайым. Өлкәнебеҙ Рита - бик яҡшы стоматолог, һеңлебеҙ Зөһрә - психиатр.

**Бөгөн ҡалала башҡорт мәктәптәре бик күп, һеҙҙең осорҙа башҡорт мәктәптәре, ысынлап, бик булмаған да. Мәктәптә уҡыу йылдары ҡайһы яғы менән хәтерегеҙҙә ҡалды?**

- 8-се синыфтан һуң ябай ҡала мәктәбенән Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға барҙым һәм бында белем алыуым күп нәмәне хәл итте. Тап шунда мин ысын башҡорттарҙы күрҙем, башҡорт телен аңларға, һөйләшергә һәм үҙемдең туған башҡорт телендә яҙырға өйрәндем, башҡорт халҡының башҡа халыҡтарҙан төп айырмалығын аңланым - башҡорттар нык түҙемле һәм тыныс, физик һәм рухи йәһәттән көслө, сыҙам, эшһөйәр һәм баҫалҡы, уйлап эш итеүсән (ысын башҡорттар бер ваҡытта ла ашығыс, уйлап еткерелмәгән ҡарар ҡабул итмәй), башҡа халыҡтарға ҡарата сикһеҙ түҙемлелек, изге күңеллелек һәм башҡаларға ярҙам итергә тырышыу, күңелдәренең музыкаль һәм ижади булыуы, шул уҡ ваҡытта математик фекерләү һәм зирәклек. Былар - башҡорттарҙың күпселегенә хас сифаттар һәм тап шуның өсөн мин милләтемде бик нык ятам. Әгәр был уҡыу йортона эләкмәһәм, бөгөн үҙемдең тамырҙарымды, ырыу-затымды белмәгән бер манҡорт булып йөрөр инем. Ә тамырҙарыңды белеү, хатта 3-сө быуынға тиклем генә белеү ҙә, психологтар раҫлауынса, кешенең рухи, физик, хатта финанс именлеге нигеҙе ул.

Ҙур ауырлыҡтар аша үтеп булһа ла, улымды ла үҙемдең туған мәктәбемә - Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға бирҙем һәм шуға ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Улым үҙе: "Бөтөнләй икенсе донъяға барып эләктем", - тине. Әйтерһең дә, уның бығаса йомоҡ булған күҙҙәре, икенсе һулышы асылды - башҡорт балалары араһында йәшәүе һәм аралашыуы уға хәҙер шул тиклем еңел һәм рәхәт. Тормошонда ҙур һәм яҡты маҡсаттары барлыҡҡа килде, ул ни өсөн яҡшы уҡырға һәм ниндәй бейеклектәргә ынтылырға икәнен яҡшы аңлай. Бөгөн минең ысын дуҫтарым һәм әхирәттәрем - интернаттағы синыфташтарым. Улар менән бик күп аралашабыҙ, осрашабыҙ, бер-беребеҙгә рухи ғына түгел, матди яҡтан да ярҙам күрһәтәбеҙ, улар менән ысынлап та, ышаныслы һәм рәхәт. Улымдың да тоғро һәм ышаныслы дуҫтары - синыфташтары булыуына шатланам, ул да, Алла бойорһа, улар менән ғүмер юлын бергә үтер тип уйлайым.

**Киләсәккә табан барыу өсөн үткәндәрҙе, тарихыңды белергә кәрәк, тиҙәр. Һеҙ был фекергә ниндәй ҡараштa?**

- Психологтар хатта шулай тип белдерә: Рәсәйҙә үҙенсәлекле хәл-торош барлыҡҡа килгән: үҙенең ресурстары һәм тәбиғи байлыҡтары буйынса иң бай илдә халыҡтың төп массаһы - бәхетһеҙ һәм ярлы, сөнки һуғыштар, инҡилаптар һәм репрессиялар һөҙөмтәһендә Советтар Союзының күпселек халҡы үҙҙәренең тамырҙарын онотҡан, ата-олаталарының ниндәй заттан һәм ниндәй лайыҡлы шәхестәр булыуын, үҙенең данлы тарихын белмәй. Ә тамырҙарын белмәгән, онотҡан, уның көсөнә таянмаған кешеләр - көсһеҙ, улар менән идара итеүе еңел, улар тормошта юғары уңышҡа өлгәшмәй, тимәк, бәхетле һәм бай була алмай.

Хәҙер республикабыҙҙа Рәсәй өсөн уникаль булған хәрәкәт - Шәжәрә байрамдары барлыҡҡа килде. Ул кешеләргә ете быуынына һәм унан да күберәк быуын ата-олаталарын белеү мөмкинлеге бирә. Минеңсә, бөгөн рәсәйҙәр ҙә, Башҡортостан халҡы ла, ниһайәт, тамырҙарыңды белеү зарурлығын, уның ауыр замандарҙы еңеп сығырға ярҙам итәсәген, көс биреүен аңланы һәм шуға ла улар үҙенең ырыу-затын белергә тырыша кеүек. Тап ошо нигеҙҙә үҙәк каналдағы "Мине көт" һәм "Үлемһеҙ полк" акцияһының, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яугирҙарҙың ерләнгән урындарын асыҡлаусы һәм эҙләүсе эҙәрмәндәр отрядтарының барлыҡҡа килеүе лә юҡтан түгел. Былар барыһы ла бер төптән, барыһы ла кешеләр тамырҙарын эҙләп, ырыу көсө менән көсәйергә теләүҙән килеп сыҡҡан. Шөкөр, улар киңәйә һәм көс йыя бара.

Шәхсән үҙем ырыу көсө теорияһына нык ышанам, сөнки тормошомда башҡорт мөхитенә барып эләккәс, ниндәй ихтирамға лайыҡ халыҡтың вәкиле булыуымды аңланым, ниндәйҙер эске көс, ышаныс, маҡсатҡа ынтылыш барлыҡҡа килде. Башҡорт мөхитендә генә, ниһайәт, атайымдың һәр саҡ ҡабатлаған: "Башҡорт халҡының лайыҡлы вәкиле булырға, уға хеҙмәт итергә һәм көсөңдән килгәнсә халҡыңа ярҙам итергә кәрәк", - тигән һүҙҙәренең асылына төшөндөм.

**Тимәк, ҡаныңыҙҙағы хәтер уянған, асылығыҙға ҡайтҡанһығыҙ. Бөгөнгө космополит йәштәрҙе лә үҙ асылына ҡайтарыу мөмкин, тимәк. Бының өсөн бары тик милли мөхит булдырырға кәрәк...**

- 15-16 йәшемдә туған мәктәбем, һоҡланғыс уҡытыусыларым һәм тәрбиәселәрем ярҙамында асылыма ҡайттым, тиһәм дә була. Ул йылдарҙа беҙҙең барлыҡ уҡытыусыларыбыҙ ысын илһөйәрҙәр ине һәм беҙгә патриотик тәрбиә биреүгә барлыҡ көстәрен һалды, мейебеҙгә бик күп яҡшы һәм матур фекерҙәр һеңдерҙе. Ә интернатҡа тиклем рус мөхитендә башҡорт булыуым өсөн ҡыйырһытылып йөрөгәнемде хәтерләйем. Хатта ҡайһы саҡ атай-әсәйем беҙҙең менән башҡортса һөйләшһә, аңламағанға һалыша, үҙемде рус балаһы тип хис итә торғайным. Ниндәй аяныслы хәлдә булыуымды башҡорт мөхитенә барып эләккәс кенә бөтөн тулылығында аңланым! Шуға күрә, бер нәмәгә ныҡлы инанғанмын: ни тиклем башҡорт мәктәптәре күберәк, шул тиклем милләт өсөн яҡшыраҡ. Һәм уларҙа ҡала балалары мотлаҡ ауыл балалары менән бер мәктәптә уҡырға тейеш, сөнки ауыл балалары башҡорт телен яҡшыраҡ белә, рухи тамырҙарыбыҙға яҡыныраҡ. Бәлки, бындай мәктәптәр 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты кеүек булырға тейештер - быны шәхси тәжрибәмдән сығып әйтәм, сөнки ҡала балалары рус мөхите менән баҫылған, уларҙың хатта атай-әсәйҙәре лә рус мөхитенең баҫымын еңә алмаған шарттарҙа йәшәй. Шуға күрә, башҡорт балалар баҡсалары һәм мәктәптәре - халҡыбыҙ, балаларыбыҙ өсөн ҡотолоу юлы тип уйлайым.

**Тыуған ерҙән торған ер яҡшы, тиҙәр. Һеҙ баш ҡалала тыуған икенсе быуын өфөләр. Ҡала иң яратҡан урынығыҙ? Мөмкинлегегеҙ булһа, нимәне үҙгәртер инегеҙ?**

- Яратҡан урыным - Өфөнөң үҙәге, минең студент йылдарымда ауылса, гармунға бейеүҙәр менән үткән урыны Салауат Юлаев һәйкәле.

Әлбиттә, мөмкинлегем булһа, күп нәмәләрҙе үҙгәртер инем - юлдарҙы рәтләр, күберәк парктар, фонтандар, сәскә клумбалары, йәшел газондар булдырыр инем. Беҙҙең нефткә бай республикала быларҙы ғына эшләү ауыр түгелдер, моғайын. Шулай уҡ күберәк театрҙар, хатта шәхси театрҙар, музыка, ижад студиялары асыр инем. Беҙ үҫкәндә музыка, бейеү, ижади түңәрәктәргә, спорт секцияларына бушлай йөрөнөк, хәҙерге балаларҙың ундай мөмкинлеге юҡ. Башҡорттар өсөн - башҡорт, татарҙар һәм рустар өсөн - татар, рус мәктәптәрендә музыка һәм бейеү кластары эшләһен ине. Ә мәктәптәргә тәжрибәле, профессиональ йәһәттән үҙҙәрен раҫлаған һәм патриотик рухлы уҡытыусыларҙы ғына алырға кәрәк. Башҡорт мәктәптәрендә уҡытыусылар үҙ фәнен (физика, математика, химия һ.б.) яҡшы өйрәтеү менән бер рәттән, балаларҙың аңына илһөйәрлек тойғоһо һалырға, уларҙы юғары маҡсаттарға - үҙ халҡыңдың лайыҡлы вәкилдәре һәм киләсәктә уға ныҡлы, ышаныслы терәк булырға әйҙәргә, шулай уҡ башҡорттарҙың тик башҡорттар менән генә уҙаіп ҡорорға кәрәклеген һеңдерергә тейештәр.

**Һеҙҙең быуын ҡала башҡорто менән бөгөнгө быуын араһында айырма бармы? Үҙгәрештәр ыңғайлы, әллә, киреһенсә, киреме?**

- Хәҙерге йәш башҡорттар, минеңсә, уңайлыраҡ башҡорт мөхитендә йәшәй. Беренсенән, башҡорттарға ҡараш элекке кеүек кире түгел. Икенсенән, лайыҡлы башҡорт мәктәптәре бар. Шуға ҡарамаҫтан, ни өсөндөр йәш башҡорттар әсә телендә бик аҙ һөйләшә. Күрәһең, уратып алған рус телле мөхит (телевидение, интернет, мәктәптәр, кешеләр) ныҡлы йоғонто яһай. Шул уҡ ваҡытта ватансыл, илһөйәр, тәүәккәл башҡорттарҙың күбәйә барыуы ҡыуандыра.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

✓ *Кешенең әхлаҡи тәрбиәһе, нисек кенә булмаһын, иң тәүҙә үҫкән ғаиләһенә бәйле. Унан һуң ғына мөхит, йәмғиәттәге үҙгәрештәр, аралашҡан иптәштәр йоғонто яһай.*





# ТЫЙЫЛҒАН - ТАТЛЫ,

## ә тыйылмаһа нисек булыр ине?

**"Ишетмәһәң, ишет, әхирәт, ҡыҙымдың көндәлегенән шундай нәмәләр уҡыным. Шундай нәмәләр... Мәктәптә генә уҡып йөрөгән үҫмерҙең секс хаҡында шул тиклем хәбәрҙәр яҙыуына, етмәһә, ул турала тиҫтерҙәре менән дә асыҡтан-асыҡ һөйләшеүенә шаҡ ҡаттым. Үҙенә әйтеп, шелтәләй башлағайным, "Ә нимәһе бар унының, барыбыҙ ҙа шулай һөйләшәбеҙ", тине. Ғәжәп бит, әхирәт, ғәжәп! Беҙ йәш саҡта ул турала һөйләшеү түгел, һүҙ ҡуҙғатырға ла ҡыймаңыҡ. Хатта кейәүгә сыҡҡас та ояла инек..." Хәҙерге замандың күп әсәләренә хас борсолоу был. Үҙе совет заманы ҡанундарында тәрбиәләнгән әсәнең бөгөнгө мөхиттә үҫкән балаһына был йәһәттән ғәжәпләнеп ҡарауына һәм уның өсөн хафаланыуына нигеҙ бар, әлбиттә. Әммә шул тиклем аптырарға һәм, баланың һөйләшеү темаһын сикләп, ниндәйҙер ҡәтғи йүнәлешкә көйләргә тырышыу кәрәкме? Бөгөнгө үҫмерҙәр ни өсөн секс темаһына еңел ҡарай? Быны нисек ҡабул итергә? Бындай аралашыуҙар нимәһе менән хәүефле һәм ҡайһы яҡтан файҙалы? Ғөмүмән, үҫмерҙәр бөгөн күберәк ниндәй темаларға һөйләшә? Ошондай һорауҙар менән мөрәжәғәт итеп, төрлө быуын кешеләренең һәм белгестәрҙең фекерен яҙып алдыҡ.**

**Зарема Мотиғуллина, уҡытыусы:** Үҫмер саҡта беҙ ниндәй китап уҡыуыбыҙ, ул әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе хаҡында һөйләшә инек. Ә әҙәби китаптың рухты, күңелде тәрбиәләүҙәге әһәмиәте иҫ киткес. Күләмле китаптар уҡымаған бөгөнгө йәштәр кино, компьютер программалары, интернеттағы яңылыҡтар тураһында һөйләшә. Ҡайҙа уҡырға инеү, ниндәй һөнәр һайлау кеүек киләсәккә ҡағылышлы темалар уларҙы аҙ ҡыҙыҡһындыра. Ата-әсәһенең аҡса түләренә, уҡырға индереренә һылтаналар. Заман үҙе үк шундай фекер тыуҙыра, ә заман темаһын бер кем дә урап үтә алмай. Енси мөнәсәбәттәр темаһы көнүҙәк темаға күптән әйләнде инде. Уҡыусыларҙың үҙ-ара секс хаҡында һөйләшеүе, әлбиттә, йәмһеҙ күренеш, хатта һиҫкәндереп тә ҡуя. Тамсы тамата-тамата ташты яра, бер нәмәне йыш һөйләү уны атҡарыуға этәрә. Быныҡ өсөн тәрбиә системаһына үҙгәрештәр индерергә кәрәк. Хөкүмәт тарафынан ниндәйҙер законлар ҙа сығарылһа, бигерәк яҡшы булыр ине. Талап тәү сиратта уҡытыусыларға ҡуйылырға тейеш, йәш быуынды тәрбиәләүсе бөгөнгө уҡытыусы энтузиаст, үҙ милләтенең патриоты булырға тейеш. Үҙ халҡының тарихын ғына түгел, телен дә белмәгән уҡытыусыларҙан арынырға кәрәк. Ундайҙар уҡыусыларҙа яҡшы тәртип, көслө рух тәрбиәләй алмай.

**Әмир Сәлихов, мәҙәниәт хеҙмәткәре:** Совет осоронда, йәғни "Секс булмаған, беҙҙә партия тыуҙырған" мәлдә енси бәйләнештәр тураһында телевизорҙан күрһәтеү түгел, һөйләү ҙә тыйылды. Ул заман үҫмерҙәре был хаҡта мәғлүмәтһеҙ булды. Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән нәмәләр хаҡында нисек үҙ-ара һөйләшәһең? Бөгөн, иһә, бөтөн киң мәғлүмәт саралары был теманы асыҡтан-асыҡ яҡтыртҡанда, хатта үҙәк телевидение һәм радиола шоу-программалар сексты туранан-тура рекламалағанда йәмғиәттең дә ошо юҫыҡҡа эйәреүенә аптырарға ярамай. Секс темаһы, нисек кенә булмаһын, барыбер тыйыла, әҙәпһеҙлеккә һанала. Һәм ул сикләнергә тейеш тә. Ә тыйылған нәмә татлы була. Уны яҡтыртыуға азатлыҡ бирелгәне бирле, үҙебеҙ ҙә ябырылып шуны уҡыйбыҙ, шуны ҡарайбыҙ. Еңел-елпегә ылыҡтырыу, ҡыҙыҡтырыу ҙа еңел бит. Үҫмерҙәрҙең секс темаһына нормаль ҡарауы тәү сиратта уны ана шулай донъя кимәлендә яҡтыртыуға бәйле. Әммә һәр милләттең - үҙ йөҙә, үҙ мәҙәниәте. Иманы һәм рухи тәрбиәһе Ислам әҙәбенә тығыҙ бәйләнгән башҡорт менталитеты өсөн енси бәйләнештәр тураһында кеше алдында асыҡтан-асыҡ һөйләшеү, тотанаҡһыҙ ҡыланыу барыбер ят күренеш. Тәрбиәһеҙлек билдәһе. Европа мәҙәниәте ниндәй генә идея һөрмәһен, һәр милләттең үҙ асылына ғына хас тәрбиәһе, йәшәү рәүеше һаҡланырға тейеш. Оят белгән ерҙә тәртип бар. Ә тәртип булған ерҙә рухи ҡиммәттәр ҙә, халыҡсанлыҡ та һаҡлана. Америкала хәҙер ғиффәтле булыу модаға инә. Сөнки шашыныуҙың һәҙәмтәһе һәләкәткә илткәнен аңлап, нисек булһа ла рухи тәрбиәгә ҡайтырға тырышалар. Балаларыбыҙҙың секс тураһында мәғлүмәтле булыуы бик мәслихәт, әммә төп маҡсат барыбер әхлаҡи тәрбиәгә йүнәлтелергә тейеш.

**Бәйнә Ирғәлина, тәрбиәсе:** Беҙ уҡыған саҡта ауыл мәктәптәрендә енси темаға класс сәғәттәре үткәрелмәне. Алдыңғы уҡыусылар рәтендә йөрөгән бер танышым, ҡалаға уҡырға киткәс, яныһыш юлға төштө. Тәүге балаһын балалар йортонда ҡалдырҙы, ҡалғандарына аборт яһатты, үҙе бесәй шикелле әйләнгән һайын ауырға ҡалды. Яҡшы билдәләргә өлгәшеп уҡыһа ла, ошондай тәртибе өсөн уны училищенан ҡыуҙылар. Ғәйеп кемдә? Минеңсә, ғәйеп ике яҡта ла бар. Ҡыҙ енси өлкәлә белемһеҙ, ә мәктәптә һәм училищела аңлатыу эштәре алып барылмай. Әсәһе лә һәр саҡ тыйып үҫтереү сәбәпле, ҡыҙ уға ауырға ҡалғанын әйтергә ҡурҡты. Түбән тәгәрәү бар нәмәнән дә еңелерәк. Һәҙәмтәлә бөтөн бер яҙмыш селпәрәмә килде. Ә ҡала мәктәптәрендә уҡыусы тиҫтерҙәрем секс темаһын даими өйрәнгән. Ҡала шарттарында үҫеүенә ҡарамаҫтан, әлегәсә енси тормошҡа инмәгән, әммә секс тураһында бик күп белгән әҙәпле әхирәттәрем бар. Енси тәжрибәһе булып та, белеме булмаған, шул арҡала дауаланыу артынан дауаланыу үткән ҡайһы берәүҙәр көлкөлө һәм ҡыҙғаныс күренә.

**Сәмиға Ҡотлоева, уҡытыусы:** Бөгөнгө балаларҙың һөйләшеүенә ғәжәпләнерлек тә шул. Улар интернетҡа инеп, башҡа илдәрҙең мәҙәниәте менән танышa, тиҫтерҙәре менән аралаша, сағыштыра, үҙләштерә. Улар күберәк секс хаҡында ғына һөйләшә, тип уйларға ярамай. Шулай ҙа, бөтә донъя сағылдырған теманың беҙҙең балаларға ла ҡыҙыҡлы булыуы - ғәҙәти күренеш. Ишеткән-күргәндәре хаҡында үҙ-ара уртаҡлаша инде улар. Өлкән сыныф уҡыусыларының был хаҡта күп ҡыҙыҡһыныуы ҡурҡыныс түгел, улар инде уйлай, аңлай белә, үҙ фекерҙәре бар. Ҡала балалары хәҙер был йәһәттән юғары цивилизация кимәлендә. Тик, үкенескә күрә, бынан бер нисә йыл элек ҡала балалары кисергән хаталарҙы хәҙер ауылдарҙа ҡабатлайҙар. Замандың агрессив мәғлүмәттәренән ҡурсыу өсөн баланы күберәк рухлы үҫтерә торған әҫәрҙәргә ылыҡтырырға кәрәк.

### Психолог һәм гинеколог аңлатмаһы:

**Соня Харисова, психолог:** Кешенең әхлаҡи тәрбиәһе, нисек кенә булмаһын, иң тәүҙә үҫкән ғаиләһенә бәйле. Унан һуң ғына мөхит, йәмғиәттәге үҙгәрештәр, аралашҡан иптәштәр йоғонто яһай. Үҙе үк матур өлгө күрһәтә алмаған ата-әсә нисек итеп тәртипле балалар тәрбиәләһен? Ата-әсәһе бик мәҙәниәтле булған ғаиләлә үҫеүсе балалар ҙа бөгөн секс темаһына кинәнеп һөйләшә. Был - нормаль күренеш. Көндәлекте уҡыған теге әсәнең ҡыҙы менән енси темаға һөйләшеүҙе мәғәнәһеҙлеккә һанауы улар араһында фекер ҡаршылығы, сер йәшереү барлыҡҡа килтергән. Бына был - хәүефле. Баланың йәшерерлек сере булыуы, ә әсәнең шаҡ ҡатырлыҡ яңылыҡ асыуы - тәрбиә өлкәһендәге тайпылыш. Үҙе кеше күңеленә (ҡыҙы көндәлегенә) рөхсәтһеҙ инеп, тәртипһеҙлек ҡылған әсә балаһында нисек итеп ихласлыҡ, әҙәп, этика тәрбиәләһен? Был үҙе үк ике арала бер-береһенә ышанмаусанлыҡ, сик, тыйыу-тыйылыу барлығы тураһында һөйләй. Ҡыҙын ҡыҙыҡһындырған нәмәләр хаҡында әсә кеше иплəп кенә һорашып, был хаҡта асыҡтанасыҡ һөйләшеп торһа, йәғни үҫмер күңелен аңлай белһә, ҡыҙы үҙе үк барыһын да һөйләп, белешеп үҫәсәк. Был ҡыҙ, бәлки, үҙ асылында бик әҙәпле, тыйнаҡтыр. Иптәштәре менән секс хаҡында һөйләшеүе, егеттәр менән дуҫлашыуы ғына уның әле енси яҡынлыҡ ҡылыуы хаҡында һөйләмәй. Ул секс тураһында мәғлүмәт туплай. Иптәштәре һөйләшкән теманан ҡаҫҡан кеше, киреһенсә, үҫеш процесында тайпылыш кисерә, һуңынан уның насар һәҙәмтәгә юлығыуы ихтимал. Әммә енси бәйләнештәр хаҡында балаларға белгестәр күберәк аңлатырға тейеш. Үҙ-ара һөйләшеп белеүгә ҡарағанда махсус сығанаҡтарҙан, китаптарҙан уҡып өйрәнеү күпкә яҡшыраҡ.

**Мәрйәм Зиннәтова, гинеколог:** Швецияла енси бәйләнешкә бик иртә инәләр, әммә абортттар һаны унда юҡ кимәлендә. Был күренеш енси белем менән аңлатыла. Беҙҙең йәштәрҙең дә хәҙер енси мөнәсәбәткә иртә инеүе бер кемгә лә сер түгел. Мәктәп йәшендәге балалар был темаға һөйләшеп кенә ҡалмай, күптәре тәжрибә аша ла белә. Иң хәүефлеһе, "Замандан артта ҡалған" тигәнерәк мәғәнәһеҙ төшөнсәләр ярҙамында үҫмерҙәрҙең бер-береһенә психологик баҫым яһауы. Бик яҡшы уҡыған, тәртипле генә бер уҡыусы ҡыҙ килде беҙгә абортҡа. Тиҫтерҙәренең шундай йоғонтоһо тәьҫирендә ошо етди аҙымды яһаған, һәҙәмтәлә ауырға ҡалған. Һаҡланыу сараларын ғына түгел, тәүге енси бәйләнештең эҙемтәләрен дә белмәүҙәре ошондай бәләләргә тарыта үҫмерҙәрҙе. Бындай миҫалдарҙы илгә демократия инғән ваҡытта айырыуса күп күрҙек. Енси наҙанлыҡ арҡаһында күпме сир таралды, күпме ҡатын-ҡыҙ аборт яһатты, нисәмәһе балаһыҙ ҡалды. Мәғлүмәтле - тимәк, ҡоралды. Теория яғынан белемһеҙ булып, практикала хаталанғансы, алдан өйрәтеү, уҡытыу мөһим. Мин, мәҫәлән, балаларым уҡыған мәктәптә лекциялар уҡып, әңгәмәләр ойоштора торғайным. Уны уҡытыусыларҙан һәм ата-әсәләрҙән тыш үткәреү яҡшы, сөнки балаларҙың һорау биреүҙән тартыныуы ихтимал. Үҙеңдән ҡасып булмағандай, үҙең йәшәгән замандан да йәшенеп булмай. Әммә енси мөнәсәбәт, енси гигиена хаҡында аңлатыу менән бергә әхлаҡи тәрбиәләү үҙ-ара бәйләнештә булырға тейеш. Балаларҙың эске мәҙәниәтен һәм аҡылын дөрөҫ үҫтерһәк, енси проблемаларҙан һәм хаталарҙан улар үҙҙәре һаҡланасаҡ.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА яҙып алды.**

**✓ Ә Көнбикә ике ут араһында яна. Уға рәхәт тә, ҡыйын да. Ошо сәйәхәттең бер ваҡытта ла тамамланмауын теләй бер яҡтан, икенсе яҡтан, ул мәрхүм апаһының ире менән Хоҙай ҡушмаған юлға сыҡҡан.**






Өйөр артынан ҡайһы яҡҡа юлға сығырға икәнлекте лә белмәй ине Көнбикә. Яҡынса йүнәлеште самалай самалауын, әммә тау-урмандар бөтөп, ялан ерҙәр башланыуы менән ҡаушап ҡалды. Әлегәсә йәшәп, ҡыҙҙың был ҡәҙәр тигеҙлекте күргәне лә юҡ икән. Ул тигеҙлектә нисек хәрәкәт итергә икәнлекте уға берәү ҙә өйрәтмәгән. Тау-таш араһында ла, ҡарағы шырлыҡтар эсендә лә аҙашмаҫ, ә был асыҡлыҡта ел ыңғайына тәгәрәргә торған ҡамғаҡ кеүек булды ла ҡалды. Был уның дүрт тәүлеклек кенә юлы, былай булһа, ары ҡалайтырға? Шулай ҙа уның йәнен бер нәмә йылыта. Икенсе көнлөк юлда уҡ үҙен эҙәрлекләп килеүсене шәйләне. Кем икәнлеген дә һиҙә, тик ул әлегә танытырға теләмәй, берсә яҡынлай, берсә ҡала биреп, эйәрә генә. Ары ҡайһы яҡҡа хәрәкәт итергә белмәгәс, кисәгенән ҡалған бешкән ҡуян ите менән тамаҡ ялғап, йоҡлаған еренән ҡуҙғалмай ултыра бирҙе. Уның ҡыбырлауын көтөп арыған эҙәрлекләүсегә лә яҡынлашыуҙан башҡа сара ҡалманы.

- Нимә көтәһең? Ҡояш төшләккә күтәрелде бит инде, - Айыухан ерҙә моңһоҙ ғына көйшәнеп ултырған ҡыҙға өҫтән ҡарап өндәште. Екерә биреп. Көнбикә, әлбиттә, өндәшмәй ҡала алмай ине. Һыңар күҙен ҡыҫа төшөп, хәйләкәр ҡараны:

- Һин, әй, аҫырауын һауынға ҡыуған бай шикелле.

Айыухан был хәбәрҙән уңайһыҙланғандай итте. Менгеһенән төшөп, ҡыҙҙың ситтәрәк йөрөгән бейәһен барып алып килде, һыртына еңел күн эйәрҙе һалып һыҡтырҙы, ауыҙлыҡын кейҙерҙе лә төк итеп урап бәйләнгән кейеҙ түшәк-маҙарын эйәр артына ныҡытып ҡуйҙы. Унан һаман ризаһыҙ тоҫ менән бурылдап ҡуйҙы:

- Юлды белмәйем, тиген, аниһә.

Был юлы өндәшмәй ҡалды телсән ҡыҙ. Ысынлап белмәй бит һуң. Шулай ҙа бирешмәне, йәш бейҙең атын әҙерләүен ҡарап, ҡуҙҙәрен көлдөрөп ултырҙы. Уныһы ла быны аңғарҙы, ҡуштарын услап һондо:

- Әйҙә, байбисә, рәхим итә күр.

Көнбикә лә уйынды күтәреп, һуҙылған устарға баҫып, менеп ултырҙы. Ҡуҙғалып киттеләр.

Көн оҙоно йәнәш килһәләр ҙә, һөйләшмәнеләр. Асылда, уға һөйләр хәбәре лә, ишетер һүҙе лә юҡ ине Көнбикәнең. Хатта өндәшеп ҡуймаһын тип, тартына биреп тә килә. Ярай тегеһе һиҙгән кеүек, телһеҙ. Һөйләшеү түгел, башын да бороп ҡарамай, киң яурындарын яҙып, арҡаһын шәм шикелле тура тотоп, һыңар ҡулы балтырҙа, икенсеһе теҙгендә булып, ауыҙ эсенән мөңрәгән көйөнә иҙерәп тик килә. Әйтерһең, ҡыҙ уның янында бөтөнләй юҡ. Ә Көнбикә ике ут араһында яна. Уға рәхәт тә, ҡыйын да. Ошо сәйәхәттең бер ваҡытта ла тамамланмауын теләй бер яҡтан, икенсе яҡтан, ул мәрхүм апаһының ире менән Хоҙай ҡушмаған юлға сыҡҡан, икәүҙән-икәү ҡыр ҡыҙырып йөрөп яталар. Берәйһе белһә - оятты арьяғы. Атаһы белһә... Эх, бер ҡайыҙлар өсөн генә булһа ла ҡайтһын ине атаһы...

Ерлектә уба тигәндәй ҙә ҡалҡыулыҡ заты осрамай, ер өҫтө тип-тигеҙ булып офоҡҡа тоташҡан яҡтарға барып сыҡтылар. Юртып килеүҙәренә лә аҙнанан ашҡан икән. Шул икһеҙ-сикһеҙ кинлектә лә, юлдары киҫешеп, ике арбанан торған ылауға осранылар. Ҡаҙаҡ көтөүселәре булып сыҡты. Айыухан Көнбикәне ҡырҙараҡ ҡалдырып, үҙе барып хәбәрләшеп килде. Нимәләрҙер һатып алды. Аҙыҡтыр тиһә - кейем. Аптырап, юлдашының ҡулындағы сепрәк-сапраҡҡа ҡараны.

- Былары һиңә ярар, балаҡ-еңен төрөп булһа ла кей, - тип һондо шуларҙың бер өлөшөн, ҡалғанын, һуҙғылап, үҙенә самаланы.

Көнбикә, ул ырғытҡандан кейемдәргә ҡағылырға ла сирҡанып, танауын сирҙы:

- Нимәгә миңә былар?

- Был кейемдә ҡаҙаҡтар араһына барып инеп булмаҫ. Шундуҡ тотоп, баҙға бырағтырырҙар. Һине... Әйткәс, кей!..

Аты артында тороп ҡына өҫтөн алыштырҙы ҡыҙ. Әсе тир менән бешеккән тупаҫ киндер күлдәк-ыштан, һырлы кәзәкей, шундай уҡ керле осло түбәле көләпәрә, үксәһе ҡыйшайып ашалған кейеҙ итектәр унан аламағолош үҫмер малай яһаны ла ҡуйҙы. Үҙе лә шундай уҡ кеше өҫтөнән сиселгәнде кейеп алған Айыухан, уға ҡарап тора биргәс, ишелгән билбау менән киң бишмәтен ике ҡат уратып бәйләп тә ҡуйҙы. Тағы бер өйрөлтөп ҡарап алғас, башлығын һалдырып, яурындарына төшөп торған сәстәрен түбәгә йыйҙырып, һыҡтырып бәйләтте лә, көләпәрәһен батыраһынан ултыртып, ҡолаҡсындарын төшөрөп үк ҡуйҙы. Шунда ла ҡәнәғәт түгел ине ул. Бара биргәс, шарлап аҡҡан тар йылға ярында үҫкән шыйыҡ ағаслыҡтар эргәһендә туҡтап, шуларҙың ҡайырын айырып сәйнәп, унан шул иҙмәне усында әүәләй биреп, сәбәләнеп ҡарышҡан ҡыҙҙың бер яҡ яңағына ышҡыны. Уныһы, күп тә тормай, ҡара-ҡыҙыл булып бүртеп килеп тә сыҡты. Битенең шешә барыуын тойған Көнбикә ике услап сикәһенә тотондо:

- Ни эшләттең мине?! Битем яна!

Айыухан ҡайырыларҙы айырып, моҡсаға тултырыу менән мәшғүл. Ахырҙа, ҡыҙ устарына төкөрөп, битен ышҡый башлағас, аңлата:

- Тағы бер көнлөк юлдан ҡаҙаҡ йәйләүендә буласаҡбыҙ. Йөҙөңдө күреү менән, улар һине нисек тә алып ҡалыу яғын ҡараясаҡ. Кемем тип әйтһәм дә. Мине үлтереп булһа ла...

- Үҙенең ҡайғыһы икән бында!

- Шулай. Минең тере булыуым - һинең хәүефһеҙлеген.

- Шунан кем тип атайһың инде мине?

- Ҡустым булаһың.

- Ҡустың?! - ишеткәненән аҫыу ҡатыш шарҡылдап көлдө ҡыҙ. - Тағы нимә?!

- Тағы?.. - Айыухан ағас ҡайырын хәнйөре менән киң генә итеп киҫеп ала ла сит-ситтәрен юнып-йыша. - Беҙ - бәхет эҙләп йөрөгән ағалы-ҡустылы көтөүселәр. Күптән дала гиҙәбеҙ, ерегер еребеҙ, һырыныр туғаныбыҙ юҡ. Һин - тыумыштан телһеҙ.

Хайран ҡалып тыңлап торған ҡыҙ күҙҙәрен селт-селт йомдо:

- Нисек... телһеҙ?

- Тыумыштан ауырыу булғанһың. Битеңдәге ҡыҙамыҡ та шунан. Көмөрөң дә.

- Ниндәй көмөрөм?

- Хәҙер була, - һәүетемсә генә аңлатып, ҡулындағы ҡайырыны шымартып бөткән егет уны ҡыҙҙың арҡаһына тоҫҡап ҡарай. - Сис бишмәтеңде.

- Юҡ! - ҡаштарын төйөп тызырая ҡыҙ.

- Көнбикә! Уйнап торор мәл түгел.

- Үҙенә ҡуй! Нишләп бөтөн ауырыу миңә әле?!

- Икебеҙ ҙә ауырыу булһаҡ беҙҙе кем эшкә алһын? Минең сәләмәтлегемә ҡарап алалар ҙа инде. Һине мин ҡуша алып йөрөйөм. Ауырыу туғанымды ситкә типмәйем. Аңланыңмы?

- Аңланым. Тик... көмөрө булғым килмәй, былары ла еткән, - ҡыҙ асыу менән сикәһенә бармағын төртә.

- Һинең ҡыҙ бала икәнлегеңде лә белгертмәҫкә кәрәк, алйот! - йәне көйгән ир, Көнбикәнең көртөй яғаһынан эләктереп алып, бер-ике һелкә тартыуҙа өҫтөндәге бишмәтен систерә лә, тоғонан киң таҫтар сығарып, беләктәре менән түштәрен ҡаплап маташҡан ҡыҙҙың ҡулдарын ҡайырып тигәндәй яурын өҫтөнә әлеге ҡайырыны ултыртып, күкрәк тәңгәленән бер нисә ҡат уратып, һыҡтырып бәйләй. Кейем аҫтынан да ҡалҡыу булып ҡабарып торған күкрәктәр ҡабырғаларға ҡуша ҡыҫылып, арҡа, киреһенсә, ҡабарып, мәсхәрә сүрәткә инеп ҡала. Ғәрлегенән илар сиккә еткән ҡыҙҙың был урауы өҫтөнән керле-ямаулы бишмәтен кейҙереп, билен һаман шул бау менән һыҡтырып ҡуя. Хәҙер инде йөҙө сәбертке-сәбертке булып шешмәкләнеп ҡыҙарған көмөрө малайҙы тағы бер ҡат күҙҙән үткәргәс, ҡәнәғәт булып баш ҡаҡты:

- Бына шулай. Онотма - һөйләшмәйһең. Нимә ишетһәң дә, иғтибарһыҙ ҡал. Миңә тексәйеп ҡарама ла. Нимә ҡушам, шуны үтәйһең. Ҡарышһаң - һатып китәм, киҫәтмәне тимә.

Был урында көсһөҙләгән аңлаған ҡыҙға күнеүҙән башҡа сара юҡ. Тик ошо хәлгә төшөүенә киләсәктә үс аласағын уйлап ҡына йыуана ала әлегә. Абдрахман бей ҡыҙын мәсхәрәләгән өсөн был яртаҡыл мотлаҡ яуап бирәсәк! Көнбикә алдында яуап тотасаҡ! Ат ҡойроғона тағып һөйрәтәсәк уны! Юҡ, ҡырмыҫҡа иләүенә бәйләп китәсәк!

* * *

Тәүге йәйләүҙә уларҙы ялларға теләүселәр булманы. Шулай ҙа төнгә шунда ҡалдылар. Йәйләүҙә баш булғандай берәүгә төртөп күрһәткәйнеләр, уныһы тирмәһе ауыҙында ғына һорау алды ла, көмөрө малай эйәрткән сатан алпауытҡа артыҡ иғтибар бирмәй, иң ситтәге көтөүселәр тирмәһендә ҡунып сығырға рөхсәт итте. Тик Көнбикәне был кейеҙ ҡыуышҡа индерә генә алмаһы Айыухан. Айҙар буйы һыу күрмәгән ҡарауһыҙ ирҙәр төйәгендәге танауҙы ярып алып барған һаҫыҡ еҫтән бигерәк, унда ҡаулыдашҡандар өркөттө уны. Башын тыҡҡан ерҙән кире ҡайырылып, артынан эткән Айыухандың ҡултыҡ аҫтынан ялтлап сыҡты ла усаҡ эргәһенә барып сүгәләне. Егеткә лә уның артынан эйәрергә тура килде. Алабарманланып, нимәлер сығарып ҡуйыуынан ҡурҡа ҡыҙҙың, шуға күҙ алдында ғына тота.

Усаҡ өҫтөнә аҫылған ҡазанда быҡырлап ит ҡайнай күрәһең, татлы еҫе таралған - бешәләр инде. Быны тирмәләгеләр ҙә беләләр, күп тә үтмәй, бер-бер артлы сығып, шул тирәгә һуҙылышып яттылар. Араларынан йәшерәк берәүһе ағас шештәр алып, иттәрҙе киҫәкләп-киҫәкләп сәнсеп алып, оло йәлпәк ҡоштабаҡҡа өйҙө лә, түшәкһеҙ-маҙарһыҙ ергә ҡуйҙы. Ҡул сайҙырған кеше булманы. Һәр береһе ятҡан урындарынан һынтылып алып кимерә лә башланылар. Саҡырылмаған ҡунаҡтарға ла яҡынларға, өлөш алырға ымланылар. Айыухан ҙур булмаған ике киҫәк алып, береһен Көнбикәгә тоттороҙо. Тегеһе баш һелккәйне лә, кире ҡаҡмаҫлыҡ итеп моронона төрттө ит менән. Унан быныһы һөйгән мөнйөй башлағас, уның ашағанына ҡарап, ҡайҙан биргән көнгә төштө. Нәҙек нәфис бармаҡтарының осона ғына эләктереп, ауыҙын ҡупшы асып, былдағыларҙың бөтөн иғтибарын алды әллә? Иң башта ит таратыусы йәш егет күҙ һалды ҡунаҡтың ҡулдарына, унан бер ҡыҙарып шешмәкләнгән битенә, унан тағы ҡулдарына ҡараны. Быны аңғарған Айыухан секерәйтәһенән ҡыҙға текәлде, тегеһе был ҡараштты аңғаргас, ҡарашы менән ҡулына иҙәне. Көнбикә төрөлгән еңдәрен төшөрә бирәп, бармаҡтарын ҡаплап тотто.

- Ҡайҙарҙан, нимәләр эҙләп йөрөйһөгөҙ? - тип ҡыҙыҡһынды көтөүселәрҙең олоһо.

- Ҡайҙан тип тә әйтә алмайым. Үткән ҡышты урман яҡтарында ҡышланыҡ. Унан алдағыһын Арал ярҙарында үткәргәйнек...

- Туҡталыр урынығыҙ ҙа юҡмы ни?

- Юҡ инде хәҙер... Ата-инәй баҡыйлыҡҡа күскәнгә лә күп йылдар. Ата малы ҡалмағас, ырыуҙаштар иркенлек эҙләп ҡуҙғалғас, мин дә ҡустымды эйәртеп сыҡтым да киттем. Арыуыҡ йылдар йөрөйбөҙ шулай.

- Бала һөйләшмәйме әллә? - ҡарт ҡул һырты менән Көнбикәгә ымланы.

- Эйе, телһеҙ.

Бер аҙ ултырғас, Айыухан ипләп кенә үҙенә кәрәк юҫыҡтарҙы ҡапшаны:

- Ҡышҡа аҫырауҙа йәшәрлек урын табаһы ине. Көтөүселәр ялларлыҡ оло көтөүлектәр эҙләйбеҙ. Ошо тирәлә оло йылҡы бар, тигәйнеләр.

Бабай уйлана бирҙе:

- Булһа, был тирәлә Ҡазыйбәктә лә Йырлан йәйләүендә генә бар. Ҡазыйбәктә ҡышҡа хеҙмәтселәр кәрәктер ҙә әле, улар был йәй истәктәрҙән ҙур ҡарымта менән ҡайтҡан, тинеләр.

Уға өндәшмәй ятҡан ҡап-ҡара ялпаҡ битлеһе ҡушылды:

- Эйе, истәктең бар йылҡыһын ҡыуып алып ҡайтҡан, тиҙәр уларҙы. Тик аугирҙары юҡ икән һаманғаса. Әллә шунда ҡышламаҡсы булып ҡалғандар, әллә ни хикмәттәр - ҡайтмағандар, тей.

Был хәбәрҙән Көнбикәнең бөтөн тәне ҡалтыранды. Ул, әйтерһең, шул яуҙы ҡабаттан кисерҙе. Уның яурындары дерелдәп ултырғанын аңғарған Айыухан, кейеҙҙәрен алып ҡалҡыны:

- Туғанымдың биҙгәге башланды, алып барып һалайым әле.

Үҙе ҡыҙҙы етәкләп тигәндәй алып китеп, тирмә төбөнә урын әҙерләп бирҙе. Тегеһе йәһәт кенә йомарланып ятты ла оло сапанды башынан аша ябынды. Шул килеш тә оҙаҡ ҡына ҡалтыранып тынысланa алманы әле. Ҡан көҫәп, үс юллап килеүенә үкенгән беренсе кисе булды был.

**(Дауамы бар).**

✓ *Бөгөн телевидение еңел-елпе шоуҙар, интернет ҡара пиар, ваҡытлы баҫма кәрәкмәгән, мөһим, көнүҙәк булмаған мәғлүмәт менән тулған. Шуларҙы ҡарайым да Алкивиад этенең ҡойроғо иҫкә килә лә төшә.*



КӨЛКӨФӨ

# ТАР ИКӘН ДӘ БАҺА БЫЛ ДОНЪЯ...

**Ғәжәп был донъя! Әллә нисә миллиард халҡы булған, ә илдәр һәм күп кенә ҡалалар күләмендәге кешеләре миллионлап һаналған "Ер" тип аталған икһеҙ-сикһеҙ планетабыҙҙың да артыҡ киң булмағанлығы хаҡында уйлана башлайһың бәғзе ваҡыт. Тау менән тау осрашмаһа ла, кеше менән кеше осраша, тиҙәр бит әле. Был донъяның тарлығын тап ана шуның аша беләбеҙ ҙә инде. Әллә ҡайҙа, алыҫ сит ерҙәрҙә булырға тура килә ҡайсаҡ. Уйламағанда берәй танышыңды, хатта яҡын ғына туғаныңды шунда осратып, ғәжәпләнеп бөтә алмайһың.**

## Бирәм тигән ҡолона...

Бер мәл Екатеринбург ҡалаһына барырға тура килде. Элек унда әллә ни йыш барып йөрөмәгәнлектән, миллиондан ашыу халҡы булған был ҡаланы, әлбиттә, бөтөнләйгә тиерлек белмәйем. Ҡала үҙәге тирәһендәге ниндәйҙер йомошомдо үтәнем дә, йәш саҡта бергә хеҙмәт иткән дуҫыма барып, хәлен белешмәк булдым. Ошо ҡалала торған хеҙмәттәшемдең адресы блокнотымда һаҡланып ҡалған, әммә, үкенескә, ул йәшәгән ергә нисек барырға ла, уның телефон һанын да белмәйем. Әлбиттә, урыҫтар әйтмешләй, тел Киевҡаса алып бара. Адресын белһәң, уны эҙләп табыуы әллә ни ауыр ҙа түгел... Ҡаршыма килә яткан бер кешегә "Фәлән урамға ниндәй автобус бара икән?" тигән һорау менән мөрәжәғәт итергә булдым. Тик өләге кеше яҡынлашҡас, ғәжәпләнеүемдән, беҙҙең яҡтарҙа әйтмешләй, "торған еремә ултыра төшә яҙҙым": ҡаршымда Туймазы районы егете, мин барырға йыйынған хеҙмәттәшем Хәдит Йәркәев үҙе баҫып тора! Үҙенә бына шул хаҡта һөйләгәс, икәүләшеп рәхәтләнеп көлөкөлә, уның йәшәгән өйөнә киттек. Миллионлы ҡала ла ул хәтлем үк ҙур булмай икән...

## Әһә, кейәү, тотолдоҡ!..

Студент саҡта Сибай-Өфө поезы менән йыш ҡына йөрөй торғайным. Тимер юл буйында урынлашҡан райондарыбыҙҙың һәр төрлө вәкилдәре менән танышып, уларҙың һәм үҙебеҙҙең телебеҙҙә булған диалекттарҙы сағыштырғылап, йәиһә башҡа төрлө темаларға әңгәмәләр ҡорорға ярата инем. Эскерһеҙ, алсаҡ, һүҙгә әүәҫ булған яҡташтарың менән һәр саҡ уртаҡ тел табаһың инде ул. Шундайын да ябай, бер ҡатлы милләттәштәрен килеп осрай ҡайсаҡ, бәғзе берәүҙәре хатта үҙҙәренең эс серҙәре менән дә бүлешә башлай. Шулай бер мәл минән биш-ун йәштәргә олораҡ булған ике ағайҙың әңгәмәһенә шаһит булдым. Береһе - Баймаҡ кешеһе, Сибайға тиклем бара, ә икенсеһе - Белорет районынан. Поезға ултырып, танышып алғас та, башҡортса рәхәтләнеп, һәр төрлө мәҙәк хәлдәр хаҡында һөйләшеп килә башланы былар. Ифрат та хәбәрсел булып сыҡты күршеләрем. Ниндәй генә темаларға төшөп киткеләмәйҙәр, әйтерһең дә, улар электән айырылмаҫ әшнәләр... Быларҙан күпкә йәшерәк булараҡ, мин, әлбиттә, әҙәп һаҡлайым, ағай кешеләрҙең һүҙенә ҡыҫылмайым. Аңлауымса, ағайҙар - икеһе лә ғаиләле кешеләр, бала-сағалары ла бар. Береһе икенсеһенә ҡарағанда бер аҙ йәшерәк. "Ике егет бергә килһә, һөйләшкәне - "ҡыҙ" була..." тигәндәй, былар, шул ике арала, ысынлап та, ныҡ ҡына дуҫлашып та китте буғай, хатта үҙҙәренең егет саҡтарын иҫләй башланылар. Ҡатын-ҡыҙ халҡынан айырмалы, күп кенә ир-егеттәргә бер аҙ хас шул бындай нәмә. Тәүҙә береһе, унан икенсеһе йәш саҡтарында һөйгән ҡыҙҙарын иҫкә ала... Ҡайһы район ҡыҙҙары матурыраҡ, дәртлерәк тигән темаларҙы ла ситләтеп үтмәй был ағайҙар. Нисегерәк итеп һылыуҡайҙарҙың "башын әйләндереүҙәре" хаҡында (моғайын, бер аҙ "шыттырыбыраҡ" та!) кемуҙарҙан иркенләшеп һөйләшә был ике "дон жуан". Поезд купеһында һис бер таныш-тоношо булмағанлығы менән файҙаланалар. Бер-береһенә үҙҙәренең эс серҙәрен бушатып алғас, улар араһында яҡынса ошондайыраҡ диалог килеп сыҡты. Береһе икенсеһенән:

- Һин үҙең ҡайһы ауылдан һуң? - тип һорап ҡуйҙы.

- Фәлән ауылдыҡымын.

- Ә, ишеткәнем бар, ул ауылда минең ике туған һеңлекәшем кейәүҙә. Тик мин унда барғаным юҡ. Гел генә ситтә йөрөгәс, туйында ла ҡатнаша алманым, уны күрмәгәнемә лә әллә нисә йыл булып китте.

- Һеңлекәшеңдең исеме кем һуң, беҙҙең ауылда йәшәгәс, моғайын, беләмдер?..

- Фәләнбикә.

- Ба..., минең кәләш тә баһа ул!

- Шулаймы?.. Улай булғас, һин минә яҡын ғына кейәү булаһың бит!.. Бер аҙ тынып торғас, "ҡайнаға" булып сыҡҡан өләге ағай, хәйләкәр йылмайып, "наступление"ға күсмәһенме:

- Әһә, кейәү, тотолдоң бит хәҙер!.. Һинең башҡа ҡыҙҙар менән булған мажараларыңды вис кенә һеңлекәшкә һөйләп бирәсәкмен...

Икәүләшеп һындары ҡатҡансы көлөшөп алды был ағайҙар.

- Мин дә бит ҡәйненеңгәгә һинең хаҡта доклад яһай алам хәҙер, ушти, ҡайнаға! - тип ҡуйҙы икенсеһе ахырҙа...

## Мәскәү ҙур түгел икән...

Минең отставкалағы хәрби ағайым өлкән лейтенант булған сағында Мәскәү ҡалаһына академияға имтихан бирергә барған. Шул осорҙа һалдат булып хеҙмәт итеп йөрөгән ике туған Рәиф ағайым менән баш ҡала урамында бик ирмәк кенә осрашып алғандар. Нисек "самоволка"ға (саҡырылыш буйынса хеҙмәткәрҙәрҙең "увольнение" тип аталған рәсми рөхсәтенән тыш частән ситкә сығып йөрөүе һалдат ләғәтендә шулай тип атала) сығып йөрөгәнен Рәиф ағай, әрменән ҡайтҡас, былай тип һөйләне. Мәскәү һынлы ерҙә урамда берәй таныш офицерҙы осратырмын тип башына ла килтермәгән был ағай, "гражданка" кейеме кейеп алып, тротуар буйлап, иркенләп китеп бара икән. Көтмәгәндә ҡаршыһына ныҡ таныш йөҙлө "старлей" (старший лейтенант) килеп сыҡмаһынмы! Үҙып киткәс, тәүге секундта йөрәге "жыу" итеп ҡалған Рәиф ағайыбыҙ тиҙ генә үҙен ҡулға ала ла артына боролоп ҡарай. Өләге өлкән лейтенант та уны танып боролған икән.

- Ғайса ағай! Был һинме?..

- Һаумы, Рәиф!..

Шулай итеп, Рәиф ағайыбыҙҙың самоволкаһы яҡындағы кафела "офицерский" һый-хөрмәт менән бүләкләнгән...

## Бер-беребеҙгә оҡшағанбыҙ...

Күпмелер ваҡыт Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан булған хәрби табип, офтальмолог Айҙар Ҡолбаев менән бер госпиталдә хеҙмәт итергә тура килде. Кәүҙәгә лә бер иш, икебеҙ ҙә мыйыҡлы, подполковник званиеһында булғанғалыр, гарнизондағы кешеләр йыш ҡына беҙҙе бутай торғайны. Ҡаласыҡта хәрби форма, ә госпиталдә икебеҙ ҙә аҡ халат кейеп йөрөгәнебеҙҙә беҙҙе бутауҙарына өйрәнеп тә бөттөк. Бынһы - ғәжәп түгел. Ә бына бөтөнләйгә сит яҡта булған бер хәлде һөйләне миңә Айҙар. Шулай бер мәл, сираттағы ялында, әлбиттә, "гражданский" кейемдә, Ҡара диңгеҙ буйындағы офицерҙар санаторийына барған. Шунда урыҫ милләтле ниндәйҙер бер ят ҡатын уны күреп, һаулыҡ һорашҡан.

- Ғәфү итегеҙ, мин һеҙҙе танымайым бит әле, - ти икән уға Айҙар.

- Һеҙ - Фәлән өлкәләге Төгән гарнизонда хеҙмәт итәһегеҙ, әйеме?..

- Эйе, нәҡ шунда хеҙмәт итәм, әммә һеҙҙе мин бөтөнләйгә белмәйем... Әллә һеҙ ҙә шунда йәшәйһегеҙме?

- Юҡ, мин - Мәскәүҙән. Ә һеҙ бит - доктор?.. - тип һаман ныҡышып төпләшә икән теге мәрйә.

- Эйе, мин - доктор, тик һеҙҙе бер ҡасан да күргәнем юҡ!

- Мәскәүҙәге Үҙәк госпиталгә "повышение"ға барғанығыҙ бармы?

- Бар.

- Мин бит - Фәләнова Светлана, Үҙәк госпиталдең ЛОР булексәһенең операция сестраһы, танымайһыҙмы ни мине, Хәлил Төхвәтович?

- Мин Хәлил Төхвәтович түгел...

- Как - түгел?

- Доктор Һөйөндөковты мин беләм. Бергә хеҙмәт итәбеҙ. Ул - отоларинголог. Ә мин - күҙ табибы...

- Неужели?.. Как две капли воды похожи вы друг на друга!..

Бөтөнләйгә таныш булмаған кеше менән әллә ҡайҙа яткан диңгеҙ буйында осрашып, бына шундай ҡыҙыҡлы әңгәмә килеп сыҡҡанын һөйләп аптырағайны Айҙар дуҫым. Хәҙерге ваҡытта ул да, минең һымаҡ уҡ, отставкала, Толбазы ауылында йәшәй. Төрлө ырыуҙан (Айҙар - Бөрйән, ә мин - Түңгәүер) булыуға ла ҡарамаҫтан, башҡорттар бер-береһенә ысынлап та оҡшаш булалыр, күрәһең...

## Беҙ һәр ерҙә барбыҙ...

Һуңғы осор хеҙмәт иткән хәрби ҡаласыҡҡа яңыраҡ күсеп килгән мәл. Ҡатыным менән иртәнсәк эшкә китеп барабыҙ. Икебеҙ ҙә хәрби формала булғас, ҡултыҡлашмай ғына, арабыҙҙа бер аҙ "интервал" тотоп, ҡабаланмай, башҡортсалап һөйләшә-һөйләшә киләбеҙ. Шул ваҡытта, хәләл ефетем кеүек үк хәрби кейемдәге бер ҡатын, артыбыҙҙан шәп-шәп атлап ҡыуып етте лә, икебеҙҙең аранан "тыҡ-тыҡ" баҫып үтеп тә китте. Бындай хәлгә бер аҙ албырған ҡалған ҡатыным ишетелер-ишетелмәҫ кенә башҡортсалап:

- Мынау ҡороғор бисә аранан үтеп барасы... - тип үҙ алдына "бурылдап" алды. Шул саҡ теге сержант ҡатын кинәт кенә артына боролоп:

- Үтһә ни булған? - тимәһенме... саф башҡортсалап.

Өләге ҡатын Белорет районынан Ғәскәрова Рита исемле яҡташыбыҙ булып сыҡты...

Бына шуның һымаҡ хәлдәр һәр кем менән дә була торғандыр. Үҙҙәре менән булған шундай ҡыҙыҡлы осрашыуҙар хаҡында яҙыусы авторҙарҙың табылыуына ла шикләнмәйем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

---

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

## Яңғыҙлыҡ

Һикһәненсе йылдарҙа Мәскәүгә барғанда Лениндың мавзолейына индек. Хәҙер генә оноттолар, әүәле революция юлбашсыһын күрергә теләүселәрҙән осо-башы күренмәгән оҙон сират хасил була торғайны. Шунда алдымдан атлаған өлкән йәштәге рус ҡатыны саркофаг тапҡырына еткәс: "Нишләп улайтып туғандарынан айырып, яғыҙлыҡҡа дусар итеп, бының бер үҙен генә һалып ҡуйғандар икән?" - тип шыбырҙаны ла башҡаларҙың иғтибарын йәлеп итмәй генә сүкыныу хәрәкәттәрен яһаны.

Донъя кимәлендәге бөйөк кешеләр ҙә һуңғы төйәгә итеп тыуған ерен, яҡындары ерләнгән зыяратты һайлай. Яңғыҙлыҡ бер ҡасан да бөйөклөк килтермәй. Әҙәм балаһы башҡаларҙың ярҙамына таянып ҡына юғарыға менә, уңыштар ҡаҙана, енеүҙәр яулай. Яңғыҙ үҙе, бер үҙе ул бер кем дә түгел! Шулай булғас, фанилыҡта уны күтәрмәләгән кешеләр менән йәшәргә, ахирәткә күскәс, ҡасандыр белгән, аралашҡан башҡа әруахтар менән йәнәш ятырға бурыслы.

Мин белгән бер бабайҙы уның һуңғы үтенесен үтәп, ауыл эргәһендәге ҡаҡ тау түбәһенә мендереп ерләнеләр. Шул ауылдың эргәһенән үткәндә әллә ҡайҙан һерәйеп күренгән ҡәбер ташына ҡарайһың да үҙ алдыма шыбырҙайым: "Нишләп кенә яңғыҙлыҡҡа дусар иттең үҙеңде үҙең? Мәңгелек яңғыҙлыҡҡа!.."

## Тәнҡитсе

Мине бер кеше өнәп еткермәне, яратманы. Яратманы, тип әйтеүем шул, берәй йыйылыш була ҡалһа, баҫа ла тотона тәнҡитләргә, кәрәкте бирергә, бер һүҙ менән әйткәндә, тотош мир алдында эт ашамаҫ хәлгә төшөрә! Уның әрен ишетмәҫ өсөн тырышам да бит, был барыбер хатамды күрә, таба. Хәлбүки уның артымдан, йә һыртымдан һүҙ сыбалтҡаны, яманлағаның бер тапкыр ҙа ишетмәнем. Тиҙҙән мине район хакимиәтенә эшкә алдылар. Бер ҡайтҡанымда теге ағайҙы урамда тап иттем. Ул яңы вазифаға тәғәйенләнеүем менән ҡотлап, ҡулымды ҡыҫты ла былай тине: "Һине бына ошолайтып үҫтергән ағайыңа рәхмәт әйт! Минең рәт сығырлыҡтарҙы ғына тукмағанымды беләһең. Эшкә ашмағандарҙы түбәләнең ни ҙә, түбәләмәнең ни! "

Бөгөн артымдан урынлы-урынһыҙ бышылдағандарҙы, һүҙ йөрөткәндәрҙе күреп, һиҙеп ҡалам да тура һүҙле, дөрөҫлөктө күҙемә бағып, ярып әйткән, ғәзел һәм саф күңелле уҫал тәнҡитсемде һағынам.

## Эт ҡойроғо

Боронғо грек дәүләт эшмәкәре, Пелопоннес һуғышы полководецы Алкивиадтың бик тә матур эте булған. Бер заман хужаһы шул яратҡан этенең ҡупшы ҡойроғон ҡылысы менән сабып ырғытҡан. Һәм киткән ығы-зығы, шау-шыу! Бөтә урында ла ошо хаҡта ғына хәбәр һаталар икән. Алкивиадтың яҡын кешеләренең береһе уның ни өсөн шулай эшләүе менән ҡыҙыҡһынған. Теге хәйләкәр йылмайып былай тип яуаплаған: "Дәүләт эштәрем, ебәргән хаталарым хаҡында түгел, ҡойроҡһоҙ ҡалған этем хаҡында ғына һөйләйәҙәр икән, тимәк, ул минең файҙаға!"

Бөгөн телевидение еңел-елпе шоуҙар, интернет ҡара пиар, ваҡытлы баҫма кәрәкмәгән, мөһим, көнүҙәк булмаған мәғлүмәт менән тулған. Шуларҙы ҡарайым да Алкивиад этенең ҡойроғо иҫкә килә лә төшә.

✓ *Етәкселәрҙең халыҡ кәсеп-һөнәрҙәре менән былай етди ҡыҙыҡһыныуы һәм фестивалдә дәррәү ҡатнашыуы - һирәк күренеш, был хәл бөтөн төньяҡ-көнсығыш төбәктең бәйгене ойоштороусыларҙың эшенә мөнәсәбәтен сағылдыра.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ДӨРӨҪ ЙӘШӘРГӘ
## өйрәтәсәктәр

■ Отпуск кешенең ғүмер оҙайлығына һәм кардиологик статусына нисек тәьҫир итә, тигән һорауға яуап эҙләп, Европаның кардиология ойошмаһы 50 йыл буйына 1200 кешенең тормошон күҙәткән. Оҙайлы отпуск йөрәк сирҙәре менән ауырыу хәүефен түбәнәйтә һәм ғүмерҙе арттыра икән. Мәҫәлән, отпускыға йылына 3 аҙна тирәһе ваҡыт бүлгән бизнесмендар 1 ай буйына ял итеүселәргә ҡарағанда 37 процентҡа йышыраҡ үлгән. Иң мөһиме, улар араһында насар ғәҙәттәр менән дуҫ булмаған, дөрөҫ туҡланған, физик ауырлыҡты ла сәләмәтлеккә зыян килтермәҫтәй итеп кенә башҡарғандар күп булған. Тимәк, сәләмәт йәшәү рәүеше оҙайлы ялдың булмауын алыштыра алмай. 1 айға һуҙылған тулы отпуск стрестан ҡотолорға, йөрәк сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Был бигерәк тә ир-егеттәр өсөн файҙалы.

■ Бөтөн Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге белдереүенсә, һуңғы 12 йыл эсендә спорт менән даими шөғөлләнеүселәр һаны артҡан. Статистика буйынса, 2006 йылда ундайҙар һаны 38 процент булһа, хәҙер - 60 процент. Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, респонденттарҙың 17 проценты көн һайын күнекмәләр яһай, 22 проценты аҙнаһына бер нисә тапҡыр спорт залына йөрөй, 10 проценты - аҙнаһына 1 тапҡыр. Ҡағиҙә булараҡ, 18-24 йәшлектәр һәм 60 йәштән өлкәндәр әүҙемерәк. Рәсәйҙәр бигерәк тә еңел атлетиканы, йәйәү йөрөүҙе үҙ итә.

■ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы рәсәйҙәрҙе сәләмәт йәшәргә өйрәтмәксе. 2024 йылға тиклем бының өсөн федераль бюджеттан яҡынса 3 миллиард һум аҡса тотонмаҡсылар. Һаулыҡ һаҡлау министрлығының проектына ярашлы, 2018 йылдан башлап йыл һайын мәғлүмәт кампанияларына 403,5 миллион һум аҡса сарыф ителәсәк. Шул рәүешле рәсәйҙәрҙе сәләмәт йәшәү рәүешенә өндәйәсәктәр һәм быны өсөн 2,825 миллиард һум тотонорға уйлайҙар. Чиновниктар, 2024 йылға тиклем сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыусылар иҫәбе 60 процентҡа етәсәк, ти. Халыҡтың тәмәке тартыу, спиртлы эсемлек эсеү кеүек насар ғәҙәттәргә ҡарашын үҙгәртеүҙән тыш, сәләмәт туҡланыуға күсеүгә, физик культура һәм спортҡа ылыҡтырыуға ҙур көс һәм, әлбиттә, матди саралар түгеләсәк.

■ Йәшәгән йортонда даими рәүештә түбән температура була икән, бынан кешенең ҡан баҫымы күтәрелеү хәүефе арта. Лондон университеты ғалимдары билдәләүенсә, тышҡы температура ҡан баҫымы өсөн мөһим роль уйнай. Тикшеренеүҙәрҙә 16 йәштән өлкән 4659 кеше ҡатнашҡан. Асыҡланыуынса, һыуыҡ йортта йәшәүселәрҙең ҡан баҫымы юғарыраҡ була икән. Шуға ла ҡышын инсульт һәм йөрәк сирҙәренән үлеүселәр һаны арта. Өй өсөн уңайлы температура тип 21 градус иҫәпләнә.

■ Лондон иҡтисад һәм сәйәси фәндәр мәктәбе смартфондар һәм интернеттың ата-әсәләр һәм балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтендәге ролен өйрәнгән. Заман технологияларының ыңғай яғын тапҡан ғалимдар. Интернет менән смартфондар ярҙамында балаға яҡыныраҡ булырға һәм тығыҙ бәйләнеш булдырырға мөмкин икән. Белгестәр 18 йәштән кесерәк балаһы булған 2 мең ата-әсәнән һорау алған. Мәҫәлән, ҡайһы бер ата-әсәләр ғаиләнең традицион йолаларын юғары технологиялар менән берләштергән, ҡайһылар аҙна һайын балалары менән фильмдар ҡарай. Күптәр интернеттан бала сәләмәтлеге тураһында мәғлүмәттәр эҙләй, кемдәлер тәрбиә мәсьәләһенә ҡағылғандары ҡыҙыҡһындыра. Балалар, үҙ сиратында, ата-әсәһенә яңы технологияларҙы үҙләштерергә ярҙам иткән.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ



# ҺӨНӘРМӘНЛЕК...
## йәшәү рәүешебеҙ ул

**Республикала һәр ҙур һәм мөһим мәҙәни ваҡиға булып үткән һайын, мин баш ҡалабыҙҙың Ленин урамындағы "Урал" галереяһына барырға тырышам. Галерея мөдире Кәримә Шәрип ҡыҙы Кайдалова менән уҙған сараны күҙ алдынан үткәрергә, яҡшы һәм етешмәгән яҡтарын, асыштарын һәм яңы аҙымдарын - барыһын да уртаға һалып барларға, теүәлләргә, алдағы уңыштарын фаразларға яратабыҙ. Бигерәк тә икебеҙ өсөн дә яҡын булған кешеләрҙең - ҡул эше оҫталарының ҡаҙаныштары өсөн шатланабыҙ.**

Был юлы Кәримә ханым кинәнес менән һүҙ башланы: "Мәсетле районы мәҙәниәт бүлеге уҙған бер йыл эсендә генә республика һәм төбәк-ара кимәлдәге бер нисә ҙур конкурс-фестивалдәр үткәрҙе һәм мәсетлеләр береһендә лә һынатманы. Урындағы мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Хәниф Мәүли улы Әхмәтйәнов бик шәп кеше бит. Бер түгел, биш тапҡыр ота мәсетлеләр ҙур саралар башында тороп: беренсенән, төрлө төбәктән килгән ижадсыларҙы үҙҙәре күреп-ишетеп-өйрәнеп ҡала, илдәге һәм донъялағы дөйөм мәҙәни пульсты дөрөҫ тотоп ала. Икенсенән, үҙҙәренең ҡаҙанында ғына ҡайнамай, яңынан-яңы асыш-балҡыштар менән һаман алға бара. Өсөнсөнән, бөгөнгө отчет-ҡағыҙға батҡан донъяла Ижад кешеһе менән эшләргә, уның тын алышын, маһирлыҡ кимәлен, матди хәлен аңларға өйрәнә. Дүртенсенән, Башҡортостан өсөн генә түгел, бөтә Рәсәй төбәктәре өсөн әһәмиәтле йыйындарҙы үҙ өҫтөнә алып һәм намыҫ менән башҡарып, мәсетлеләр бөтә илдең ижади-мәҙәни тормошона булышлыҡ итә. Бишенсенән, төбәк-ара конкурстарҙы үткәреү тәжрибәһе уларҙы төньяҡ-көнсығыш Башҡортостандың эшлекле мәҙәни үҙәге кимәленә күтәрә..."

Кәримә Шәрип ҡыҙы һөйләй, ә мин Мәсетленең йәш һөнәрмәндәрен - Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Орнамент" тапшырыуҙары геройҙары булған оҫталарын йәнә бер ҡат күҙ алдынан үткәрәм: Ләмәзтамаҡтан быймасы Иштуған Ғәүнетдинов, туҙ һауыттар үреүсе Илгизә Лоҡманова, келәмдәр һуғыусы Нурания Хөснөтдинова, Яуыш ауылынан яҡташтарын һөйөндөрөп тимер ҡоймабеседкалар яһап биреүсе Айнур Хисамов, Мәсетле балалар санаторийын иҫ киткес ағас һындар менән биҙәүсе Әжекәй ауыл оҫтаһы... Ысынлап та, алтын ҡулдар төбәктә күп. Уҙған бер йыл дауамында ғына Мәсетлелә мин үҙем шаһит булған мәҙәни сараларҙы һанап ҡарайым. Халыҡ-ара "Берҙәмлек" фестивале сиктәрендә 6-сы Халыҡ-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр фестиваленә Мәсетленең үҙенән, Башҡортостандан, Рәсәй өлкәләренән һәм республикаларынан, Япония менән Ҡырғыҙстандан йөҙ ҙә ҡырҡ ҡумыҙсы ҡатнашты. Артабан Мәсетле сәхнәһе меңәрләгән тамашасы алдында "Һомай" башҡорт милли кейемдәре фестивален күтәрҙе. Декабрь айында Ағинәйҙәр ҡоро үтте, унда йыйылған Мәсетленең тамбурлы ҡайыу оҫталары башҡорт милли кейемендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш кейеме төрөн - ҡалпаҡтарҙы ла тергеҙергә һүҙ ҡуйышты: төбәктә борондан булған "сикәҡалпаҡ", "сулпыҡалпаҡ", "мәрйенҡалпаҡ", "тәңкәҡалпаҡ", "тупыйҡалпаҡ" кеүек төрҙәрен яңыса әҙерләп кейә башларбыҙ, тинеләр...

Быйыл иһә, 24 август көнө, Мәсетле районында Халыҡ һөнәрмәндәренең өсөнсө төбәк-ара конкурсы үтте. "Мечетлинская мастерская" - "Мәсетле оҫтаханаһы" тип нарыҡланған йыйын район үҙәге Ыҡтамаҡ ҡасабаһы уртаһындағы майҙанда өс меңләп кешене йыйҙы. Оҫталарҙың командалары Балаҡатай, Дыуан, Ҡыйғы, Мәсетле, Нуриман яҡтарынан, Свердлов өлкәһенең Красноуфимский менән Әртә ҡалаһынан, Силәбе яғының Нәҙепетровский районынан килде. Борон да, бөгөн дә ҡатышып йәшәгән ут күршеләр, туғандар, дуҫтар - борондан башҡорт ырыуҙары йәшәгән төньяҡ-көнсығыш Башҡортостан халыҡтары.

Иртәнсәк һауа торошо ғәләмәт йонсоу, һалҡын булһа ла, ҡатнашыусыларҙың күп булыуы "көндө һындырҙы" - бер тында гөрләп парад үтте, һәр конкурс өсөн яйлы урындар билдәләнде. Мәсетле район мәҙәниәт йортоноң иркен һәм яҡты фойеһында бик күп төрлө бәйгеселәр йәтешләп урынлашты. "Ҡорамасылар", "Тамбурлап ҡайыусылар", "Йүкәнән ишелгән һәм үрелгән кейем-һауыттар", "Тал-сыбыҡ үреүселәр", "Орсоҡсо - йөн иләүселәр", "Туҙҙан кәрәк-яраҡтар", "Ағас һын-әйбер ырыусылар" - һәммәһе лә заманға яраҡлы һәм ҡыҙыҡлы, һатып алыусыны ҡыҙыҡтырырлыҡ әйберҙәрен эшләй ҙә башланы. Бер-береһенең һәм тамашасыларҙың күҙ алдында өр-яңы ижади алымдар күренде, оҫталыҡ серҙәре сиселде, бөтә һорауҙарға яуаптар алынды. Милли кейем һәм уйынсыҡтар күргәҙмәһе әҙер нәмәләр тәҡдим итте. Урамда асыҡ һауала "Мейес сығарыусылар", "Бесән сабыусылар", "Бура бураусылар" конкурсы ҡыҙғандан-ҡыҙа барып, күңелле тамашаға әйләнде. Ир-ат, бала-саға айырыуса балта эшен, мейессе һөнәрен ҡыҙыҡ күрҙе, бәке менән ҡырғандай сабып һалынған бесән бакуйҙарын күреп һөйөндө.

Байрамдың хөрмәтле ҡунаҡтары һәм иң ихлас көйәрмәндәре муниципаль район башлыҡтары булғандыр: Балаҡатайҙан - Мәсғүт Миңнеғәлин, Дыуандан - Фаил Мөхәмәҙиев, Ҡыйғынан - Шамил Мөхәмәтдинов, Салауаттан - Марс Кашапов, Нуримандан - Азамат Носратуллин, Әртә ҡалаһы башлығы урынбаҫары Сергей Токарев менән Нәҙепетровский районы мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Любовь Иванько - барыһы ла үҙ командаһы башында йөрөнө, бәйге барышы менән һәр яҡлап ҡыҙыҡһынып, оҫталарына ярҙам итеште. Мәсетле районы хакимиәте башлығы Әнис Әсәҙуллин менән уның урынбаҫары Гөлназ Ҡадирова өсөн "Мәсетле оҫтаханаһы" - үҙ төбәге халҡына ярҙам итеү, күңелен үҫтереү, оҫталығын арттырыу сараһы. Төбәк етәкселәренең халыҡ кәсеп-һөнәрҙәре менән былай етди ҡыҙыҡһыныуы һәм фестивалдә дәррәү ҡатнашыуы - һирәк күренеш, был хәл бөтөн төньяҡ-көнсығыш төбәктең бәйгене ойоштороусы мәсетлеләрҙең эшенә мөнәсәбәтен сағылдыра. Икенсе яҡтан, район башлыҡтары тарафынан ҙур иғтибар уларҙың был тармаҡтың файҙалы яғын аңлауына ла дәлил.

Конкурс барышындағы түңәрәк ҡорҙа етәкселәр төбәк-ара һәм муниципаль берәмектәрҙең бәйләнештәрҙе нығытыу буйынса эшлекле әңгәмә ҡорҙо. "Эш-хеҙмәт һәр заманда ла кешеләрҙе туплай, тәрбиәләй, йәшәү дәрте бирә торған тәбиғи юл, һәм халыҡ кәсеп-һөнәрҙәре - рухи байлыҡ нигеҙе, матди тотороҡлолоҡ сығанағы. Бигерәк тә йәштәрҙең һәм күп балалы ғаилә ағзаларының хеҙмәт тәрбиәһенә ҙур әһәмиәт биреүе шатлыҡлы", тип ҡат-ҡат белдерҙе етәкселәр.

Ысынлап та, һөнәрмәнлек - ҙур хөрмәткә, халыҡ ихтирамына лайыҡ был яҡта. Мәсетле кешеләре агас ырыу оҫтаһы Фәнил Ғәтиәтуллиндың эштәрен көтөп ала, уның йыла, йүкә ағасын, ҡайын ороһон ырып яһаған төрлө әкиәти һындары бар халыҡты ғәжәпкә ҡалдыра - ысын рәссам йәшәй был яҡта, тиҙәр. Уның ҡатыны Айгөл дә туҙ һауыттар, биҙәүестәр яһай, шулай уҡ күргәҙмәләр ҡороп һәр байрамда ҡатнаша. Ижади ғаиләләргә айырым хөрмәт, иғтибар менән ҡарай яҡташтары. "Мәсетле оҫтаханаһы" күргәҙмәләре өсөн был яҡта күптән билдәле оҫта Марсель Ҡәйүмов яһаған тәҙрә яҡтарын һәм ҡапҡастарын күргәҙмә түренә ҡуйыу - бик ҙур ғорурлыҡ. "Йорттарҙы биҙәү, ауылдарҙы йәмләү - был бит намыҫ эше, балта тота белгән кешенең бурысы. Бер килгән ғүмерҙә эш менән биҙәп йәшәргә тырышам", ти оҫта.

Ярыштарҙы башлар алдынан командалар араһында тәүге тур - танышыу сәхнәһе гөрләп торҙо. Артабан иң ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс сығыштар башланды - һөнәри оҫталыҡ буйынса конкурс программалары майҙан тотто. Урамда иһә мейес сығарыу оҫталары янында йырып сыҡҡыһыҙ халыҡ йыйылды. Мейес - һәр кемде баласаҡтан үҙенә тартҡан йылылыҡ һәм ҡот. Күҙ алдында сихри бер күренеш - мейестәр барлыҡҡа килә, улар төрлөтөрлө, береһенән-береһе ҡупшы һәм уңайлы, мейестәрҙә ут яғыла, табаларҙа шажлатып ҡоймаҡ ҡойола...

Бына Ыҡтамаҡтағы Спорт майҙанында бер үк ваҡытта унарлаған балта туҡылдарға кереште - бура бураусылар бәйге асты! Ҡулдарҙа күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә уйнаған балталарҙан тапсыҡтар оса, маңлайҙарға тир бөрсөктәре бәреп сыға. Тик туҡтарға ваҡыт та, сама ла юҡ - билдәле ваҡыт эсендә ҡоҙоҡ бураһы әҙер булырға тейеш! Ундайҙы бураүҙың да үҙ сере, талаптары бар икән. Оҫталар үҙҙәре уҡ белеп-күреп-әйтеп тора һәм баһамандар иң йәтеш, ыҡсым бураларҙы билдәләй: Балаҡатай егете Айҙар Зариповҡа беренсе приз бирелә, Нуриман балта оҫтаһы Әлфир Харисов икенсе урынды яулай, Мәсетленән Илдар Шәрипов өсөнсө урынды ала.

Ағас ҡайыры йәки ҡамыш, талсыбыҡ йә йүкә, туҙ йә киндер бау, һалам йәки тамыр - ата-бабаларыбыҙ һәр тәбиғәт бүләген эшкәртеп, үҙенә кәрәк-яраҡ яһап алған. Ғәжәп ҡумталар, һандыҡтар, һауыттар - бик күп төрлө үрелгән әйберҙәр халҡыбыҙға көнитмештә бик ҡулай булған. "Мәсетле оҫтаханаһы"нда бер сәғәт эсендә береһенән-береһе ҡупшы һәм ныҡлы кәрзиндәр ҙә пәйҙә булды. Уларҙы үреүсе оҫталарҙың фантазияһы, образлы һәм зауыҡлы эштәре һәр кемде һоҡландырҙы.

Ана, бесән сабыусылар бәйге тотҡан ялан. Салғысылар стартҡа әҙерләнеп теҙелгән. Салғы сүкеү, үткерләү, шулай уҡ үләнде сабыу - һәр кемдең дә ҡулынан килмәй, әммә был эште үҙгәнәсә белгән һәм яратҡан кешеләр бар һәм буласаҡ. Салғысылар төркөмләп ярышты, беренсе урынды - ҡыйғылар, икенсеһен - балаҡатайҙар, өсөнсөһөн нуримандар яуланы. Яңы сабылған бесән еҫе яланға тулды...

Быйылғы өсөнсө төбәк-ара "Мәсетле оҫтаханаһы" өсөн күптән көтөлгән һәм бик тә тәбиғи булған ярыш төрө өҫтәлде - тәү тапҡыр тамбурлап ҡайыусылар конкурсы үткәрелде. Ҡайыусылар - сәскә-үлән орнаментын тамбурлап сиккән ҡатынҡыҙҙар был төбәктең милли хазинаһын - тәньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ҡайыулы кейемдәрен барлыҡҡа килтергән. Егерменсе быуат башында уҡ рус ғалимы В. Круковский яҙып ҡалдырғанса: "Башҡорт ҡатыны биҙәктәрҙе бер ҡайҙан да күсермәй - үҙ күңеленән, үҙ тәбиғәтенән, үҙ тормошонан ала. Башҡорт ҡайыусылары һаҡлап ҡалған орнаменттар - халыҡтың мәҙәни ижадын юғалтмау, ҡул эш сәнғәте өлгөләрен киләһе быуындарға тапшырыу ул". Мәсетле ҡайыусыларынан Дамира Фәхрисламова беренсе урынға, Дания Вәлеева икенсе урынға сыҡты, өсөнсө урын Балаҡатай тамбурлап ҡайыу оҫтаһы Айгөл Игошкинаға бирелде. Уларҙың дамберәнәләре, көмөш ҡулдә сумып йөҙгән алтын өйрәктәрҙәй, уйнап ҡына торҙо - яңы үрәнәктәр (орнамент) ҡайыны. Был үрәнәктәр быуаттар буйы башҡорттоң меңле, гәйнә, йылан, танып, өпәй, ҡошсо, терпәк, әйле, дыуан, балаҡатай, олоҡатай, яланҡатай, көҙәй, табын ырыуҙарының донъяһын күркәм иткән биҙәктәр - башҡорт тамбурлап ҡайыу өлгөләре. Ҡорама ҡорау - һәр башҡорт өйөн йәмләгән халыҡсан ижад төрө, матур ҡул эше. Был сәнғәти биҙәү эше һуңғы йылдарҙа тергеҙелде, рәссамдар ысынтылап мауығып тотонор зауыҡлы кәсепкә әйләнде. Башҡортостан оҫталары "Корамату" конкурстарында, Рәсәй кимәлендә ҡорама фестивалдәрендә алда бара хәҙер.

Сара һуңында Төбәктәргә "Мәсетле оҫтаханаһы енеүсеһе" тигән маҡтаулы исемдәр ҙә бирелде: мәсетлеләр - беренсе урында, нуримандар - икенсе урында, балаҡатайҙар - өсөнсө урында. Һәр команда дипломдар һәм иҫтәлекле бүләктәр менән ҡайтып китте.

Ошо уҙған матур сара хаҡында тәмләп һөйләй-һөйләй, "Урал" галереяһында Кәримә Шәрип ҡыҙы Ҡайҙалова менән "Мәсетле оҫтаханаһы" байрамы ҡунаҡтарын, конкурстарҙа ҡатнашыусыларын иҫләп, уларҙың алтын ҡулдарын, илһамланып янған күҙҙәрен, алсаҡ бәхетле йөҙҙәрен күҙ алдына килтерәбеҙ. Бик тә рәхмәтле, бәрәкәтле бәйге ойошторола - унда ҡатнашыу, тамаша ҡылыу, уйлау-хыялланыу ғына ла сәмләндерә, яңы образдар уята. Кеше өсөн һөнәрмәнлек - иң ышаныслы һәм файҙалы йәшәү рәүеше. "Һөнәрле - үлмәҫ, һөнәрһеҙ - көн күрмәҫ", тип бик раҫ әйткән халҡыбыҙ. Халыҡ әйткәндә белһәк һәм халыҡ һүҙен тотһаҡ, мөгайын да, хур булмабыҙ.

**Сәрүәр СУРИНА.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҠУЛЫҒЫҘ ОЙОҺА...



**Ҡул йәки аяҡ ойоуҙың сәбәптәре төрлө булыуы мөмкин: артрит, артроз, остеохондроз… Улар ҡайһы ваҡытта тәҙеп булмаҫлыҡ ауыртыныуҙарға килтерә. Халыҡ медицинаһы был күренеште ябай һәм һәр кем башҡара ала торған саралар менән еңеләйтергә кәңәш итә.**

Фитотерапевтар раҫлауынса, һары ҡандала үләне (донник лекарственный) ҡулдар ойоғанда ярҙам итә. Киптерелгән бер семтем үләнгә бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, бешерергә кәрәк. Ике көн дауамында бер нисә сынаяҡ эсергә.

Контраст ванналар. Ҡулды йәки аяҡты йә эҫе, йә һыуыҡ һыуҙа алмашлап тоторға, һуңынан йылытыусы май һөртөп, урап ҡуйырға. Дауаланыу курсы - 10 көн.

Эвкалипттың эфир майы ҡушылған камфора майы йоҡо алдынан ҡул йәки аяҡ ойоуын бөтөрә. Өс сеанс та етә.

Аяҡ һәм ҡул суҡтарына ҡан әйләнешен тиҙләтеүсе гимнастика мотлаҡ. Ҡулдарығыҙҙы өҫкә күтәреп, 80 тапҡыр йомоғоҙ һәм асығыҙ. Шул уҡ күнекмәне ҡулдарығыҙҙы алға һуҙып башҡарығыҙ. Теләһә ниндәй физик көсөргәнеш (әлбиттә, сама менән) ҡан әйләнешен яҡшырта, тимәк, ауыртыныу торошон еңеләйтәсәк.

Ҡабаҡ буҡҡаһын йылы килеш ҡулбаштан алып ҡул суҡтарына тиклем һөртөргә һәм йылы әйбер менән урап ҡуйырға. Енеллек килгәнсе ҡабатларға.

Тоҙло ҡыярҙы шаҡмаҡлап турап, бер нисә ваҡланған әсе борос ҡуҙағы менән ҡушып, ярты литр арҡы ҡойорға һәм бер аҙна ҡараңғы урында тоторға. Һарҡыткандан һуң, ҡул-аяҡ суҡтарын ыуыу өсөн тотонорға.

Тибет монахтары ысулы: табаҡҡа ҡайнар һыу ҡойорға. Уның төбөнә бармаҡтарҙы алмаштырып ныҡ итеп баҫырға. Ойоу тиҙҙән үтер.

10 гр тарттырылған ҡара бороҫҡа 100 мл үҫемлек майы ҡушып, һүрән утта болғап тороп 30 минут бешерергә. Һыуынғандан һуң, ҡул-аяҡ суҡтарына һөртөргә. Йылап ауыртыу һәм ойоу бөтәр.

Йоҡларға ятҡанда еҙ беләҙек кейһәгеҙ, ҡулығыҙҙың ойоуы үтер.

Ҡул-аяҡ суҡтары ойоғанда тәмәке тартыу, алкоголь ҡулланыу, кофе һәм ҡаты сәй эсеү тыйыла. Ҡайнар аш, бутҡа, шулай уҡ организмды сыныҡтырыу, физик көсөргәнеш ҡан әйләнешен нормаллаштерергә ярҙам итер.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Американдарҙың мәғлүмәте буйынса, колледж йәки университет тамамлаған кеше уҡымаған кешегә ҡарағанда алты йылға оҙағыраҡ йәшәй. Инглиз белгестәре Швецияла 1906 йылда (ул ваҡытта белем түбән кимәлдә була) һәм 1922 йылда (белем кимәле күтәрелә башлай) тыуған 70 йәшлек кешеләрҙең биологик йәшен билдәләй. Асыҡланыуынса, 1922 йылда тыуғандар үҙҙәренең 70 йәшендә 1906 йылда тыуғандарға ҡарағанда биологик йәшерәк була.

Авторҙар ғүмер оҙайлығының бары тик белем кимәле һәм белем алыу оҙайлығы менән бәйле булыуын асыҡлай. Бәҡтиһәң, кеше ни тиклем оҙағыраҡ уҡый, уның шул тиклем оҙағыраҡ йәшәү мөмкинлеге арта. Әлбиттә, белемле кешеләр, гәҙәттә, сәләмәт тормош алып бара. Әйткәндәй, ҡатын-ҡыҙҙың ғүмер оҙайлығына аҡыл йоғонто яһамай. Сөнки юғары интеллектлы ҡатын-ҡыҙ донъя менән идара иткән ир-атҡа даими рәүештә үҙенең аҡыллылығын раҫлап торорға тейеш. Шуға күрә улар даими стреста йәшәй. Бынан тыш, ғаилә бурыстары күберәк ҡатын-ҡыҙ елкәһендә ята. Былар барыһы ла улар өсөн көсөргәнеш. Ә башҡа осраҡтарҙа оҙаҡ йәшәү иҫәбе юғары интеллектлы кешеләрҙә оҙайлыраҡ.

Ысынлап та, ғүмер оҙайлығы IQ-ға бәйле. Финляндия белгестәре шундай белдереү яһай. Уларҙың тикшеренеүендә 10 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат ҡатнаша һәм 11 йәшлек ваҡыттарында тест үтәләр, артабан 46 йыл буйына уларҙың тормошон ғалимдар күҙәтеп тора. Түбән интеллектлы ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ араһында үлем осраҡтары интеллекттары юғары булғандар менән сағыштырғанда ике тапҡырға артығыраҡ була (тест барышында ғаиләнең тормош кимәле, баланың ауырлығы, 11 йәшендәге буйы, тәртибе, ата-әсәһенең шөғөлө һәм ҡыҙыҡһыныуҙары, ғаиләһе, ғаилә проблемалары иҫәпкә алына). Бынан тыш, Британия һәм Америка ғалимдары ололарҙың күп мәсьәләләр буйынса йәштәргә ҡарағанда аҡыллыраҡ булыуын асыҡлай. Тикшеренеүселәр шикләнмәй: йәш, мейелә дегенератив процестар барыуға ҡарамаҫтан, кешегә аҡыл өҫтәй. Әлбиттә, йылдар үтеү менән ҡыҫҡа ваҡытлы хәтер ҙә, фекерләү ҙә насарая, әммә оҙайлы хәтер бөтөнләй зыян күрмәй.

Ғалимдар раҫлауынса, ололар теге йәки был мәсьәлә буйынса рациональ, үлсәнгән ҡарар ҡабул итә, сөнки уларҙың мейеһе дофамин - шунда уҡ яуап бирергә этәргән гормондың йоғонтоһона әҙерәк бирешә. Һөҙөмтәлә, оҙайлы хәтерҙә түбәндәге парадокстың яуабы ла ята: ололар йәштәргә ҡарағанда дөрөҫ яуапты тиҙерәк таба. Бәҡтиһәң, улар аналогияға таяна икән - оҙайлы хәтерҙән әҙер һәм тикшерелгән яуаптарҙы ала. Бынан тыш, тикшеренеүселәр макакаларҙың мейеһен өйрәнә һәм ҡарт маймылдарҙың яңылыҡты өйрәнгән ҡүҙәнәктәрҙең яртыһын юғалтыуын асыҡлай. Уның ҡарауы, оҙайлы хәтер һаҡланған ҡүҙәнәктәргә бер нәмә лә булмай. Эш шунда: мейе тупланған мәғлүмәтте енел ҡуллана, кәрәкмәгәнен алып ташлай. Кеше ни тиклем олораҡ, мәғлүмәт тә шул тиклем күберәк. Шуға күрә ололарҙың ҡарары дөрөҫөрәк кеүек күренә.

Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләренән шундай һығымта яһарға мөмкин: хәтер "йоҡоға талмаһын" өсөн даими рәүештә интеллектуаль эшмәкәрлек менән шөғөлләнергә кәрәк.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 10 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 10 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра".
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Т/с "Ищейка". Новый сезон. [12+]
1.10 "На самом деле". [16+]
2.10 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Челночницы. Продолжение". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Принцип Хабарова". [12+]
3.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Предчувствие". [16+]**
**11.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 Наука 102. [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Наши годы. [12+]**
**17.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Орнамент. [6+]**
**18.00 "Асылташ". [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Интервью.**
**19.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**19.30 "Бай". [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [12+]**
**20.30 Бизнес-проба. [12+]**
**20.45 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Возвращение". [18+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Озорная молодость". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 11 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 11 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра".
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Т/с "Ищейка". Новый сезон. [12+]
1.05 "На самом деле". [16+]
2.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Челночницы. Продолжение". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Принцип Хабарова". [12+]
3.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Предчувствие". [16+]**
**11.00 Следопыт. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Орнамент. [6+]**
**18.00 Бай баҡса. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Интервью. [12+]**
**19.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**19.30 Автограф. [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Легенда о Джабберуоке". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Убей меня, голубчик!" [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 12 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 12 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра".
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Т/с "Ищейка". Новый сезон. [12+]
1.10 "На самом деле". [16+]
2.10 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Челночницы. Продолжение". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Принцип Хабарова". [12+]
3.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Предчувствие". [16+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Тәмле. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Барбекю со звездой. [12+]**
**17.15 Современник. [12+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [6+]**
**17.45 Имею право. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо" (Нижний Новгород). КХЛ.**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Бала-саға. [6+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Затмение". [18+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Х/ф "Неравные". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 13 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 13 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра".
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Т/с "Ищейка". Новый сезон. [12+]
1.10 "На самом деле". [16+]
2.10 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Челночницы. Продолжение". [12+]
23.15 "Новая волна-2018". Бенефис Владимира Преснякова.
2.15 Т/с "Принцип Хабарова". [12+]
3.55 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Предчувствие". [16+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 У дачи. [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Йырлы кәрәҙ. [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Барбекю со звездой. [12+]**
**17.15 Современник. [12+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Интервью. [12+]**
**19.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**19.30 Башҡорттар. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью.**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Эра драконов". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 14 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 14 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Голос 60+". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Х/ф Премьера. "Субура". [18+]
2.55 "Мужское / Женское". [16+]
3.50 Модный приговор.
4.45 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Юморина". [16+]
23.00 "Новая волна-2018".
2.05 Х/ф "Сәләми". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Вторая мировая. Начало". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**14.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**15.45 "Шәп арба". [6+]**
**16.00 "Выше всех". [6+]**
**16.15 "Зеркальце. [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Барбекю со звездой. [12+]**
**17.15 Д/ф "Мы родом из мультиков. Сто лет российской анимации". [6+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). КХЛ.**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Наука 102. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**0.00 Х/ф "Город порока". [16+]**
**2.30 Спектакль "Последнее море Чингисхана". [12+]**
**4.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Д/ф "Вторая мировая. Начало". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 15 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Ералаш.
6.40 М/с "Смешарики. Новые приключения".
6.55 Т/с "Родные люди".
9.00 Играй, гармонь любимая!
9.45 Слово пастыря.
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "На тебе сошелся клином белый свет..." К юбилею Михаила Танича.
11.20 "ДОстояние РЕспублики: Михаил Танич".
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "ДОстояние РЕспублики: Михаил Танич".
13.15 "Памяти Михаила Танича".
14.15 "Не забывай". Песни Михаила Танича.
16.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.20 Премьера сезона. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.50 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 "КВН". Премьер-лига. Финал. [16+]
0.40 Х/ф Премьера. "От имени моей дочери". [16+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.10 Модный приговор.
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Актуальная тема. Местное время.
9.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
14.00 Х/ф "Потерянное счастье". [12+]
16.00 Субботний вечер с Николаем Басковым.
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Сухарь". [12+]
0.30 Торжественное закрытие Международного конкурса молодых исполнителей "Новая волна-2018".
3.15 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.15 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Х/ф "Пятеро друзей-2". [6+]**
**9.30 Посмотрим… [0+]**
**9.45 Следопыт. [12+]**
**10.00 "У дачи". [12+]**
**10.30 "Большой чемодан. [6+]**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Орнамент. [6+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Замандаш. [6+]**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 "Бай". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Концерт фольклорного ансамбля песни и танца "Мирас". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Колесо времени. [12+]**
**20.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**20.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**21.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**21.15 Победить себя… [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим… [6+]**
**22.15 Следопыт. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Проповедник с пулеметом". [16+]**
**2.15 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.00 Спектакль "Вознесись, мой Тулпар!" [12+]**
**5.15 Автограф. [12+]**
**5.45 Д/ф "Мы родом из мультиков. Сто лет российской анимации". [12+]**
**6.30 Новости (на рус.яз.). [0+]**

## 16 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15 Т/с "Родные люди".
6.00 Новости.
6.10 "Родные люди".
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код".
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Леонид Куравлев. "Это я удачно зашел". [12+]
11.15 Честное слово с Юрием Николаевым.
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Александр Абдулов. "С любимыми не расставайтесь". [12+]
13.15 Х/ф "Ищите женщину".
16.10 Международный музыкальный фестиваль "Жара". Гала-концерт.
17.50 Премьера. "Я могу!"
19.25 Премьера. "Лучше всех!"
21.00 Воскресное "Время".
22.00 Х/ф "Жги!" [16+]
23.50 Х/ф "Не брать живым". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.45 Модный приговор.
3.45 "Давай поженимся!" [16+]
4.30 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

4.50 Т/с "Лорд. Пёс-полицейский". [12+]
6.45 "Сам себе режиссёр".
7.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Вести-Башкортостан. События недели.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Т/с "Сваты-2012". [12+]
13.55 Х/ф "Ни за что не сдамся". [12+]
18.00 "Удивительные люди-3".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.25 "Новая волна-2018". Бенефис Леонида Агутина.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 Бай бакса. [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [0+]**
**10.30 "Ал да гөл". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 Байтус. [6+]**
**11.15 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Алтын тирма. [0+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [0+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). КХЛ.**
**19.00 "Дороги дружбы. Башкортостан - Венгрия". [12+]**
**19.30 Имею право. [12+]**
**19.45 Моя Республика. [12+]**
**20.00 Лидеры региона. [12+]**
**20.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Свидание с джазом. [12+]**
**23.15 Х/ф "Мастер". [18+]**
**1.45 Спектакль "Гроза". [12+]**
**4.15 Автограф. [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Учим башкирский язык. [12+]**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**12 сентябрҙә республиканың барлыҡ театрҙары "Театр төнө" акцияһында ҡатнаша. М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры тамашасыларға театр буфетынан фирма ризыҡтарын - "Ғафаровса кәтлиттәр", "Ирсаева териякиһы", "Бөҙрә Хайсарчик" тортын тәҡдим итергә вәғәҙәләй. Был проекттың етәксеһе - Башҡортостандың, Рәсәйҙең халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев.**



# АРТИСТАР МЕНӘН КҮҢЕЛ АСЫРҒА!

Тамашасылар байрам кәйефен тупһанан уҡ тоя аласаҡ: киске 7-се яртыла театр алды майҙанында Руслан Хайсаров командаһы тамашасылар менән аралаша. Әкиәт геройҙары уйындар ойоштора, улар балаларға ла, уларҙың атаәсәләренә лә ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Төп саралар театр фойеһында киске 8-се 15 минутта башлана, беренсе ҡатта тамашасыларҙы композитор Урал Иҙелбаев етәкселегендә театр оркестры ҡаршы ала. Икенсе ҡатта төрлө ролдәргә кастингта ҡатнашыу мөмкинлеге бар. Кастингты "Башҡортостан" киностудияһы хеҙмәткәрҙәре ойоштора. Проекттың был өлөшөн актер Урал Әминов алып бара. Унын һөйләүенсә, теләгән һәр кем костюмдар кейеп, грим һалып, үҙен киноактер ролендә һынап ҡарай ала. Тамашасыларҙы театрҙың Көрән залында танылған кинорежиссер Булат Йосопов көтөп ҡала. Ул унда оҫталыҡ дәресе уҙғара.

Был төндә тамашасылар өсөн фотозона ойоштороla. Буфетта башҡорт байҙары булып кейенгән актерҙар Ирек Булатов, Илсур Байымов, Хәким Мортазин һәм Юнир Ҡоланбаев театр мәрәкәләрен яратыусыларҙы "Ҡунаҡ ашы"на көтә. Улар ҡыҙыҡлы хәлдәр һөйләр, төрлө йырҙар йырлар һәм, әлбиттә, ҡурайҙа ла уйнар. Киске сәғәт 8-ҙә театрлаштырылған тамаша башлана. Программала - театр актерҙары уйнаған фильмдарҙан, спектаклдәрҙән өҙөктәр, яратып тыңлаған йырҙар.

Театрлаштырылған тамашанан һуң тамашасыларға драма театры актерҙары ҡатнашлығында ҡыҫҡа метражлы фильмдар тәҡдим ителә. Театр музейында викторина үтә, ә дүртенсе ҡатта урынлашҡан кулуарҙа Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Эльвира Юнисова артистар һәм тамашасылар менән бергә яңы пьеса уҡыясаҡ. Бәләкәй залда Туфан Миңнуллиндың "Әҙләнем, бәгерем, һине" спектаклен ҡарарға мөмкин буласаҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Был сараға республиканың башҡа театрҙары ла ҡушыла. **Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында** ла бай программа әҙерләнгән. Балаларҙы ишектән уҡ яратҡан геройҙары ҡаршы аласаҡ. Фойела ҡурсаҡтар күргәҙмәһе эшләй, унда уҙған быуаттың 30-сы йылдарында эшләнгән ҡурсаҡтарҙы ла күрергә мөмкин. 18.00 сәғәттә "Ҡыҙ һәм килмешәк", 21.00 сәғәттә өлкән балалар өсөн "Нильстың сәйәхәт йылъяҙмаһы" спектаклдәре тәҡдим ителә. Ҡурсаҡ театрына 4 сентябрҙән театр кассаһында бушлай таратылған билеттар буйынса инергә була.

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында** 19.00 сәғәттә "Чума на оба ваши дома" спектакле күрһәтеләсәк. Бәләкәй залда "Диләфрүзгә дүрт кейәү" спектакле ҡуйыла. 20.00 сәғәттә Репетициялар залында Башҡортостандың халыҡ артисы Ольга Мусина режиссура буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрә. Милли йәштәр театрында тағы ла бер акция: 12 һәм 13 сентябрҙә бөтөн спектаклдәргә билеттарҙы 50 процент ташлама менән алып буласаҡ.

**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында** 19.00 сәғәттә Екатеринбург ҡалаһынан "НитьЯ" театрының "День Ангела" спектакле ҡуйыласаҡ.

ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

# ЛАЙЫҠЛЫЛАР КЕМДӘР?

## Салауат Юлаев премияһына

**2018 йылда Башҡортостан Республикаһының әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына дәғүә иткән әҫәрҙәр билдәле булды.**

Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы махсус комиссия мәғлүмәтенә ярашлы, конкурсҡа шағир Салауат Әбүзәров, яҙыусылар Мәүлитбай Ямалетдинов, Азат Абдуллин, композиторҙар Ләйлә Исмәғилева, Рәшит Йыһанов, солист-инструменталист Рәмил Ғәйзуллин, рәссам Рифҡәт Арыҫлановтар үткән. Комиссия ойошмаларға, уҡыу йорттарына, ижади йәмәғәтселеккә ошо дәғүәселәрҙең ижадын тикшереүҙә ҡатнашырға саҡыра. Баһаларҙы 2018 йылдың 20 сентябренә тиклем комиссияға ебәреүегеҙҙе һорайҙар: 450101, Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46-сы йорт. Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте, 313-сө бүлмә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 280-80-96.

## Ш. Хоҙайбирҙин премияһына

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы 2018 йылға журналистика өлкәһендәге иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияләр буйынса комиссия, тәҡдим ителгән эштәрҙе ҡарағандан һуң, түбәндәге дәғүәселәрҙе конкурста ҡатнашырға һайлап алды:**

"Киске Өфө" гәзитенән Миләүшә Ҡәһарманова (Хәбилова), "Башҡортостан" гәзитенән Гүзәлиә Балтабаева, "Кызыл таң" гәзитенән Октябрь Вәлитов, "Истоки" гәзитенән Светлана Гәфүрова, "Ватандаш" журналынан Энгель Зәйнетдинов, "Шоңҡар" журналынан Рәшит Зәйнуллин, "Башҡортостан ҡыҙы" журналынан Гөлназ Ҡотоева, "Уфимские нивы" гәзитенән Оксана Садиҡова, "Юлдаш" радиоһынан Венера Ситдиҡова, "Салауат" гәзитенән Зөфәр Толомғужин, "Игенсе" гәзитенән Лиана Ханмурзина, "Балтач таңнары" гәзитенән Хәнис Хәзимов һәм Риф Ғарипов, шулай уҡ уҙ-үҙен тәҡдим итеүсе авторҙар - Рәзилә Низамова, Рәзилә Ырыҫҡужина, Ниязбай Сәлимов, Хәлил Һөйөндөков.

Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары отставкалағы медицина хеҙмәте подполковнигы Хәлил Тәхвәт улы Һөйөндөковтың ижады менән яҡшы таныш. Сәләмәтлек, ғаиләләге тәрбиә, туғандарҙың, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре, йәмғиәттәге төрлө әхлаҡи күренештәр, дини ҡағиҙәләр тураһында үҙенсәлекле, талантлы яҙмалар авторы ул.

Шулай итеп, комиссия йәмәғәт ойошмаларын, хеҙмәт коллективтарын һәм айырым кешеләрҙе Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға тәҡдим ителгән авторҙар ижадын тикшереүҙә ҡатнашырға саҡыра. Үҙ фекерегеҙҙе, тәҡдимегеҙҙе һәм иҫкәрмәләрегеҙҙе матбуғат биттәрендә, телевидение һәм радио программалары йәки түбәндәге адрес буйынса хат аша еткерергә мөмкин: 450076, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 10-сы ҡат, Башҡортостан Журналистар союзы. Телефон-факс: 276-42-66. Эштәрҙе тикшереү 27 сентябргә тиклем дауам итә.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҠУНАҠТАР КИЛӘ




**Өфөлә 15-25 сентябрҙә Халыҡ-ара фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре ойошмалары советының (СИОФФ) 48-се Бөтә донъя конгресы була. Ул VI Бөтә донъя фольклориадаһы алдынан ойошторола.**

Конгресс йыл һайын СИОФФ ағзалары булып торған төрлө илдәрҙә уҙғарыла. Сараны Халыҡ-ара фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре ойошмалары советы, Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто, Башҡортостан Хөкүмәте, Башҡортостандың Конгресс-бюроһы ойоштора. Конгресы уҙғарыу СИОФФ етәкселегенә һәм уның ағзаларына Башҡортостан менән танышырға һәм 2020 йылда Өфөлә Бөтә донъя фольклориадаһына йәлеп итеү күҙалланған инфраструктураны өлөшләтә һынап ҡарарға мөмкинлек бирә. Бөтә донъя конгресы 11 көн дауам итәсәк, уның эшендә 60 илдән - Әзербайжан, Швейцария, Хорватия, Индонезия, Люксембург, Канада, Һиндостан, Финляндия, Коста-Рика, Франция, Япония, Румыния, Италия, АҠШ, Словения, Ҡытай, Венгрия, Германия, Македония, Испания, Камерун, Босния һәм Герцеговина, Мексика һәм башҡа дәүләттәрҙән СИОФФ-тың милли секциялары һәм башҡарма комитетының 200 вәкиле ҡатнаша. Сара бер нисә майҙансыҡта: Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа, Конгресс-холда, "Шератон" ҡунаҡханаһында уҙа.



**27 сентябрҙә Сибай ҡалаһында Мөнәжәт башҡарыусыларҙың сираттағы VI Асыҡ төбәк-ара конкурсы үтә. Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Сибай ҡала округы хакимиәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль, рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, Сибай сәнғәт колледжы.**

# МӨНӘЖӘТСЕЛӘР ЙЫЙЫЛА

Конкурс халҡыбыҙҙың боронғо дини фольклор төрө булған мөнәжәт жанрын, уны башҡарыу йолаһын тергеҙеү һәм үҫтереү, уны башҡа мәҙәни ҡомартҡыларыбыҙ рәтендә таратыу, йәштәрҙә ошо халыҡ ижады өлгөһөндә эстерик зауыҡ һәм илһөйәрлек тәрбиәләү маҡсатында үткәрелә. Сығыштар 17 йәшкә тиклемгеләр, 18 йәштән өлкәндәр, яңғыҙ йә коллектив башҡарыусылар араһында өс номинация буйынса баһаланасаҡ: мөнәжәт; нәсихәт; М. Ямалетдиновтың Ҡөрьән сүрәләрен шиғри тәфсирләүенән өҙөктәр башҡарыу. Ғаризалар 25 сентябргә тиклем Сибай ҡалаһы, Таусылар (Горняков) урамы, 14 адресы буйынса Сибай сәнғәт колледжында ҡабул ителә. Бөйләнеш өсөн телефон: 8(347-75) 2-46-32; regstar88@mail.ru

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә-Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (30) дүшәмбе | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 18:14 | 19:44 | 21:14 |
| 11 (1) шишәмбе | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 18:12 | 19:42 | 21:12 |
| 12 (2) шаршамбы | 5:14 | 6:44 | 13:30 | 18:09 | 19:39 | 21:09 |
| 13 (3) кесе йома | 5:16 | 6:46 | 13:30 | 18:06 | 19:36 | 21:06 |
| 14 (4) йома | 5:18 | 6:48 | 13:30 | 18:04 | 19:34 | 21:04 |
| 15 (5) шәмбе | 5:20 | 6:50 | 13:30 | 18:01 | 19:31 | 21:01 |
| 16 (6) йәкшәмбе | 5:22 | 6:52 | 13:30 | 17:59 | 19:29 | 20:59 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ЗАУЫҠ

Тамара ҒӘНИЕВА

# МЕҢ ҺИГЕҘ ЙӨҘ УН ИКЕ



1

Изгелекле ирҙәр - ил таяуы.
Һынау, ғазап килеү -
Яҙмыш ҡоно.
Ни сәбәптән һине һуғарҙыҡ беҙ,
Ҡаныбыҙ геүләп аҡты, Бородино?

Бынау сәскә, үлән орлоғона
Йылы өрҙө кемдең һуңғы тыны?
Ҡымыҙ тәме килә.
Бейәләрҙең
Елене эйеүҙәнме, Бородино?

Шәһит киткән мөслим ырыуҙашты
Разый алды микән ер ҡуйыны?
Ике ғасыр...
Булһын!
Тубыҡланып
Ясин сығайымсы, Бородино!

Ҡурай үҫә ана...
Шыҡкандыр ул
Иңгән өсөн ергә йөрәк моңо.
Тупрағың да иҫләй икән шуны,
Далабыҙҙай йәмле Бородино.

Миктәп ҡалды беҙҙең шәжәрәләр,
Ырыуҙарҙың һынғас зат-олоно.
Беҙҙең дан да күп ул...
Париж белә.
Әллә нишләп һинең күкрәгеңә
Һәйкәл ҡуйғы килә, Бородино.

2

Көткән бивак.
Усаҡ.
Ирҙәр йоҡлай.
Ҡаҙандарҙа бешә һурпабыҙ.
- Суфия һылыу, килсе,
Бер һөйәйем.
Арыған ҡанғынама ут ҡабыҙ.

Ҡаһым сатырының янағында
Һоро юрға менән буҙ бейә.
- Ҡайт һин илгә, һылыуым!
- Улай тимә...
- Аҡ йөҙөңә, ҡурҡам, күҙ тейә.
Ҡылтаймасы.
Ҡытығым килә бит һуң,
Булыр, бәлки, яу бит,
Бер-бер хәл.
Һиңә күҙе ҡыҙған уҙаман күп,
Йоғонорҙар минһеҙ. Бихәләл.

- Ҡаһым түрә! Һин үҙеңә күрә
Былай-алай түгел, көнсөлмө?
Беҙ ҡушарлап яуға сығып киттек
Мин тол булып ҡайтһын өсөнмө?

Уҡтан-туптан беҙҙе аяр көс бар:
Икебеҙгә яҙған мөхәббәт.
Ил-төйәктең ханы булырһың, тип
Ватан көтә.
Беләһең бит уны.
Үҙебеҙгә яҡмай мал-мөлкәт.
...Суфия һылыу менән Ҡаһым түрә
Париждарға барып инәрәк
Сатырында ут алышты шулай,
Ғашиҡтарға донья түңәрәк.

Һуғыш та юҡ кеүек.
Һил камиллыҡ.
Бер һандуғас илереп моң тирҙе.
...Клязьма яры алыҫ.
Кем юраһын
Мирҙы тетрәндерер мәкерҙе.

3

Айсыуаҡтың айлы кистәрендә
Ашҡаҙарҡай буйы уйһыуҙа,
Айға ҡарап кемдер доға ҡыла,
Ә бер егет моңло йыр һуҙа.

"Ҡаһым түрә менгән һор юрғаның..."
Кешнәүҙәре телә төн һилен.
Күк ҡабағы асылыр. Ҡайтыр төҫлө
Һағынышҡан ирҙәр ил-ерен.

Айсыуаҡтың һөҙәк битләүендә
Тояҡтарҙың һуңғы эҙе бар.
Ҡылғандарға һуғылып
елдәр йырлай:
"Бәхилләшеп китте улар былай...
Тик дандары ҡайтты.
Любизар!
Ә дандары тере!
Любизар!"

4

Бородиноны мин күргәнем бар.
Илап торғаным бар һеңкелдәп.
(Көфөр микән?)
Уйлап ҡуйғаным бар:
Ни хаҡына шул самалы түләү?
Ирәүәнләр ғәзиз иркендән
Мәхрүм иткән батша хаҡынамы
Ирҙәр беҙҙең ҡорбан ителгән?

Ниндәй батша?
"Батшаларға беҙ баш эйҙекме?"
Уларҙан бер аяу күрҙекме?
Үҙебеҙгә күрә түгел ул беҙ,
Яратмайбыҙ ирек быуғанды,
Ҡуйындарға алып ҡурайҙы
Яу сабабыҙ
Яҡлап ил-төйәкте,
Ят-еһерҙе, яҡын туғанды.

Онот, халҡым, етте!
(Нимәгә ул!)
Париждарға барып ингәнде.
Онотма тик Клязьма ярҙарында
Бонапарттан еңелмәгән, әммә
Ағыуланған Ҡаһым түрәнде.

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# ЯТАҠАЙ ДЕБЕТ БУЛМА

- Кейем керһеҙ, шешек һулһеҙ булмай.
- Белекһеҙ менән аралашһаң - һоҫолорһоң, белекленән отҡорлоҡҡа өйрәнерһең.
- Һаран мал һанар, аҡыллы ғилем туплар.
- Ике төрлө һөйләүсе ятаҡай дебеткә тиң булыр.
- Күркәмлек түгел төҫтә, ә намыҫлы囗 эштә.
- Маллының ауыҙы майлы, эше лә яйлы.
- Бәйеле аҙған юлдан яҙған, оло бәхеттән ҡалған.
- Ҡараҡ бушҡа йөрөмәҫ, эт юҡҡа өрмәҫ.
- Балағың оҙон булһа ла, телең оҙонаймаһын.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

**19 сентябрҙә Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылында "Ҡаһым түрә ҡунаҡҡа саҡыра" башҡорт халыҡ тарихи йырҙары төбәк фестивале уҙғарыла. Сараны Стәрлетамаҡ район мәҙәниәт йорто ойоштора. Ҡатнашыусыларҙың сығыштары "Башҡорт халыҡ тарихи йыры"; "Биҙәү-ҡулланма ижады" номинациялары буйынса баһалана. Конкурсҡа 16 йәшкә тиклемгеләр, 16-25 йәшлектәр, 26-42 йәшлектәр, 43 йәштән өлкәндәр саҡырыла. Ҡатнашыуға ғаризалар 2018 йылдың 12 сентябренә ҡәҙәр ҡабул ителә. Электрон адрес: mbuksrdk@yandex.ru. Өҫтәмә мәғлүмәт өсөн телефондар: 8(3473) 26-73-78, 8-917-809-30-33, сайтта һәм төркөмдә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАТАЛАРЫҢДЫ...

## ҡартлыҡҡа һөйрәп барма

Бер көн көл булмайынса, бер көн килеп гөл булып булмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ерҙә яуызлыҡ булмаһа, кеше Алланы иҫкә лә төшөрмәҫ ине.

**(П. Гольбах).**

Йәшлектәге хаталарыңды ҡартлыҡҡа һөйрәп алып барма, ҡартлыҡтың үҙенең дә хаталары күп буласаҡ әле.

**(И. Гете).**

Һәр кемдең үҙ йәшенә ярашлы булһын йөҙө...

**(Гораций).**

Ҡартлыҡта үҙ-үҙеңә ышаныусан булыу - ҡурҡыныс: сәғәт һайын тиерлек үҙ хаталарың үҙеңә һөжүм итеүе мөмкин.

**(Әбуғалисина).**

Ҡарттарҙың өйрәтеүҙәре ҡышҡы ҡояш һымаҡ: яҡтырта, әммә йылытмай.

**(Л. Вовенарг).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Йөҙ йәшкә еткән батшаға Үлем килә. Батша уға: "Мин батшалыҡ эштәре менән булып, үҙем өсөн тулы ҡанлы итеп йәшәп өлгөрмәнем әле. Йәллә мине һәм, ана, улдарымдың береһен алып кит", - тип үтенгән. "Ярай, улайһа, - тигән Үлем. - Был хаҡта улдарыңа үҙең әйт". Батшаның йөҙәрләп улы булған. Аталары үҙ теләген әйткәс, өлкән улдарының барыһы ла уның тәҡдименән баш тартҡан. Ун алты йәшлек иң кесе улы ғына ризалашҡан. Үлемгә был егет йәл булып киткән һәм: "Һин бит бигерәк йәшһең һәм гонаһһыҙһың. Һинең ағайҙарыңдың күбеһе хәҙер үҙҙәре 60, 70 йәштә һәм улар артынан килергә лә күп ҡалмаған. Һин ни өсөн минең менән китергә ризалаштың?" - тип һораған. "Әгәр ҙә минең атайым ошо йөҙ йыл эсендә йәшәп туймаған икән, тимәк, мин дә уның һымаҡ уҡ буласаҡмын. Йәшәү танһығын ҡандырыуҙың ниндәйҙер икенсе ысулы барҙыр бит. Был донъяла йәшәп, был ысулға өлгәшеп булмағас, ҡана, үлем ярҙамында быға өлгәшеп ҡарайым..." - тигән егет. Үлем уны үҙе менән алып киткән. Ә атаһы тағы йөҙ йыл йәшәгән. Үлем тағы килгәс, батша бик аптыраған: "Шулай тиҙ генә килеп тә еттеңме? Мин йәшәп тә өлгөрмәнем бит әле, йәшәргә тип ниәтләп, күпте планлаштырҙым, хәҙер бына йәшәй башлайым тигәндә генә һин килеп еттең..." Үлем менән быңдай осрашыу барлығы ун тапҡыр ҡабатланған. Батшаға мең йәш тулғас, Үлем уға тағы килгән һәм унан: "Йә, хәҙер ни әйтерһең? Һинең урыныңа тағы бер улыңды алып китәйемме?" - тип һораған. "Юҡ, - тигән батша, - мин хәҙер кеше өсөн хатта мең йыл да файҙаһыҙ икәнен яҡшы беләм. Эш ваҡыт күплегендә түгел, ә аңыбыҙҙа икән. Ун ғүмер бирелһә лә, кеше тигәнең әленән-әле бер үк ығы-зығыға инеп сумасаҡ, көнитмешен һәм асылын әрәмгә үткәреүгә бәйле буласаҡ. Башҡа төрлө йәшәй белмәй кеше..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1579/09